*Бер аҡыл эйәһенән: "Ни өсөн ярлы кешеләр байҙарға ҡарағанда изгелеклерәк һәм йомартыраҡ?" - тип һорағандар. "Тәҙрәгә ҡара әле, һин унда ни күрәһең?" - тигән аҡыл эйәһе. "Ихатала балалар уйнап йөрөгәнен күрәм...". "Ә хәҙер көҙгөгә ҡара, унда ни күрәһең?", - тигән тағы аҡыл эйәһе. "Үҙемде күрәм..." "Бына бит, - тип һығымта яһаған аҡыл эйәһе, - тәҙрә лә, көҙгө лә - бер үк быяланан эшләнгән. Әммә быялаға аҙ ғына көмөш өҫтәһәң, унан үҙеңде генә күрәһең..."*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№36 (558)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**"Байҙар иҡтисады" асылы...**

йәки Сит илгә законлы рәүештә аҡса күсереү юлы тураһында



3

**Тотҡон хаттары...**

хәҡиҡәт еткерә



7

**Ваҡыты-ваҡыты менән зарыбыҙҙы...**

Аллаһы Тәғәләгә еткереп торорға кәрәк



8-9

**Бала һаулығы өсөн...**

мәктәп тә яуаплы



12-13

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Бөгөнгө көн сәйәсәте, тормошобоҙҙағы етешһеҙлектәр тураһында фекерегеҙҙе тура ярып әйтә алаһығыҙмы? Ғөмүмән, һеҙ үҙегеҙҙе ирекле фекер эйәһе тип иҫәпләйһегеҙме?

***Ноәман МУСИН, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:*** Тормоштағы кире күренештәр, етешһеҙлектәр тураһында яҙыусылар ҙа әйтмәһә, кем әйтергә тейеш һуң? Кешелекте борсоған фекерҙәрҙе беҙ яҙған әҫәрҙәребеҙ аша ла әйтәбеҙ, әлбиттә. Заманында тирә-яҡ мөхитебеҙгә янаған хәүеф, урмандарыбыҙҙың ҡырылып бөтөү ҡурҡынысы айҡанлы тәрән борсолоуҙарым "Мәңгелек урман" романын һәм унан һуңғы әҫәрҙәремде яҙыуға сәбәпсе булды. Кем нисектер, әммә мин үҙем уҡыусыларым менән булған ижади осрашыуҙарҙа ла, яҙыусылар йыйындарында ла, киң мәғлүмәт сараларындағы публицистик сығыштарымда ла әйтәһе һүҙемде әйтә йөрөйөм. Бөгөнгө тормошобоҙҙағы борсоулы хәлдәр һәм проблемалар айҡанлы халыҡтың өнһөҙлөгө ҡурҡыуҙан киләлер, тип тә раҫлай ҡайһы берәүҙәр. Әммә мин был фекер менән һис тә килешә алмайым. Ҡурҡмай ул халыҡ, ә ялыҡҡан, арыған. Буш хәбәр һөйләүҙәрҙән, алдаҡҡа ҡоролған вәғәҙәләрҙән ғарҡ булған һәм вайымһыҙлыҡҡа бирелгән. Нисә йылдар буйына бирелгән вәғәҙәләргә өмөт итеп, шуларҙың, исмаһам, береһе лә тормошҡа ашмағас, хәбәр һөйләүҙән бер фәтүә лә юҡлығын белә һәм яҡшы аңлай бит ул халыҡ. Ярай, һайлауҙар ҙа булып үтер, ләкин нимә үҙгәрер икән һуң? Бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк, бөтәһе лә шул килеш ҡаласаҡ. Донъябыҙҙы тамырынан үҙгәртмәй тороп, ил иҡтисадын Рәсәй өсөн ят моделгә ҡормай тороп, бер ниндәй алға китешкә лә өмөт итеп булмай. Ҡытай бит, ана, юлын тапты һәм әлеге мәлдә донъяла иң үҫешкән иҡтисадҡа эйә. Беҙ һис таба алмайбыҙ үҫеш юлын. Кемдәрҙелер был бик ҡәнәғәтләндерә лә, күрәһең, сөнки уларға шулай уңайлыраҡ. Шул уҡ Рәсәй парламентын алып ҡараһаҡ та, ундағы партиялар фракцияларының тулыһынса дәүләт тәьминәтендә майҙа йөҙөүсе етәкселәренең дә, министрҙар һәм юғары дәүләт чиновниктарының да ил, халыҡ мәнфәғәтендә эштәре юҡ. Фәҡәт йылы урындары үҙҙәренә уңайлы булһын. Әйткәндәй, иғтибар итәһегеҙ микән: халыҡ та бит үҙенә йомолдо хәҙер. Өндәшмәүе уның шунан, тип уйлайым, ә ҡурҡыуҙан түгел: донъяһы теүәл, ашарына бар икән - шуныһы менән ҡәнәғәт. Был бигерәк тә ауыл ерендә күҙгә ташлана: һәр кем үҙ йүнен хәстәрләй, малтыуарын ҡарай, ғаиләһен аҫырай - башҡаһы өсөн башы ауыртмай. Ил етәкселегенә яҡын даирәләрҙән башлап, бөтә вертикалдәр ҙә коррупция ауында сырмалған, патриотлыҡ юҡ дәрәжәһендә, иҫ киткес вайымһыҙлыҡ хөкөм һөрә. Былай дауам итһә, илебеҙгә үҙенән-үҙе тарҡалыу хәүефе янай. Яҡын перспективала булмаһа ла, ил етәкселеге әкренләп радикаль үҙгәрештәргә йүнәлеш алмаһа, мин Рәсәйҙең киләсәген аныҡ ҡына күҙ алдына килтерә лә алмайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ТУҒАН ТЕЛДӘ УҠЫУҒА...

## бер ни етмәй!

**Быйылғы яңы уҡыу йылында Башҡортостанда 430 мең бала парта артына ултырҙы, уларҙың 44 меңе - беренсе класс уҡыусылары. Өфөлә иһә уҡыусылар иҫәбе - 97691, беренсе класҡа 10813 уҡыусы килде.**



Мәғариф системаһында лайыҡлы урын алып тороусы башҡорт милли гимназиялары һәм лицейҙарында ла йылдан-йыл уҡыусылар, шул иҫәптән, беренсе класҡа килеүселәр һаны арта бара. Йыл һайын башҡорт мәктәптәрен тамамлаусыларҙың йөҙ проценты менән тиерлек юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүе лә уларҙың абруйы һәм белем биреүҙең юғары сифаты тураһында һөйләй. Мәҫәлән, **Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын** тамамлаусы 179 сығарылыш уҡыусыһының барыһы ла юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән. Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт нефть техник университеты, Башҡорт дәүләт медицина университеты һәм башҡа республика вуздары менән бер рәттән, гимназияны тамамлаусылар Мәскәү дәүләт университеты, Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университеты, Юғары иҡтисад мәктәбе дәүләт университеты, Беренсе Мәскәү дәүләт медицина университеты, Санкт-Петербург дәүләт медицина университеты, Екатеринбург федераль университеты, Силәбе дәүләт университеты студенттары рәттәрен тулыландырҙы. 7 уҡыусы хәрби йүнәлештә белем аласаҡ.

**(Дауамы 5-се биттә).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# Ә СТӘРЛЕЛӘ... башҡорт тауышы ишетелмәй

**Туҡһанынсы йылдарҙа Стәрлетамаҡта сәнғәт, мәҙәниәт донъяһы гөрләп торҙо. Ошо эште атҡарыуҙа киләсәкте тиҫтәләрсә йылдарға алдан күрергә һәләтле, ҡыйыу публицист, Стәрлетамаҡ Яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе Вил Ғүмәров, ялҡынлы шағир Рауил Ниғмәтуллин, "Аманат" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Әҙһәм Барлыбаев һәм президиум ағзалары, аҡһаҡалдар ҡоро тәрән аҡыл менән һөҙөмтәле эшләне. Халыҡтың рухиәтен байытыусы мәҙәниәт усаҡтарын ойоштороуға күп көс һалыусы шәхестәр Венер Абдуллин, Хәлил Ишбирҙин, Илшат Йомағоловтың исемен иҫкә алмау ҙа яҙыҡ булыр.**

Ошо кешеләр ике-өс йыл эсендә Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театрын, башҡорт телендә нәшер ителеүсе "Ашҡаҙар" гәзитен, Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт филармонияһын, атаҡлы Бейеү театрын ойошторҙо. "Аманат" аҡһаҡалдар ҡоро халыҡҡа үҙе бер терәк булды.

Ә бөгөн Стәрлетамаҡ башҡорттарына нимә булған? Ни өсөн башҡортса тамашалар ярым буш залдарҙа үтә? Ни өсөн милли баҫмаларабыҙ һанға һуғылмай? "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһында"ғы законды ғәмәлгә ашырыу ҡәтғи булырға тейеш икәнен белеүселәр ҙә юҡ шикелле хәҙер беҙҙә. Ҡала урамдарынан үткәндә магазиндарҙың, учреждениеләр, ойошмаларҙың алтаҡталарына күҙ һалығыҙ әле - аҙым һайын тиерлек хата! Ни эшләп ҡаланың терминология комиссияһы закон үтәлешен контролдә тотмай? Хаталы алтаҡталы предприятие, ойошма хужаларына штраф һалырға уның хаҡы юҡ микән әллә?

Мәҫәлән, "Фабри" сауҙа үҙәге бинаһына ингәс, стеналарына ҡарап, үҙендә инглиз телле илдәгеләй итеп тояһың. Дөрөҫ, ҡыйыҡ башында "Тәмле" тип яҙылған бер генә башҡорт һүҙе бар. "Салауат" кинотеатры эргәһендә "45" тип яҙылған бер ойошманың ишегендә "без выходных" тигән һүҙҙе "ял һеҙ" тип тәржемә иткәндәр. Бына һеҙгә "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһында"ғы законың 13 йыл буйы үтәлеше һөҙөмтәһе!

Ҡайҙа беҙҙең Стәрлетамаҡ башҡорттары ҡоролтайы, ни өсөн уның тауыш-тыны сыҡмай? Элек был йәмғиәт ойошмаһы урындағы хакимиәт менән бик тығыҙ бәйләнештә булһа, бөгөн ундай бәйләнеш тә һиҙелмәй. Башҡа милләттәрҙең йәмәғәт ойошмалары әүҙем эшләй, төрлө тәҡдимдәр менән сығыш яһай. Ә беҙҙең Стәрлетамаҡ башҡорттары ҡоролтайының тауыш-тыны ла, инициативаһы ла ишетелмәй. Ҙурлығы һәм әһәмиәте буйынса Башҡортостандың икенсе ҡалаһы булған хакимиәттә башҡорт милләтенән белгестәр булмауында беҙҙең ҡоролтай ҙа ғәйепләлер, сөнки тап ҡоролтай кадрҙар резервын булдырырға, етәксе органдарҙағы вакантлы урындарға үҙ кандидатураларын тәҡдим итергә тейеш бит. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҡайғыртмаһаҡ, үҙ мәсьәләләребеҙҙе үҙебеҙ хәл итмәһәк, ҡайҙа ла үҙ тауышыбыҙҙы ишеттерә йөрөмәһәк, беҙҙе берәү ҙә ҡайғыртмаясаҡ икәнен аңларға ваҡыт бит инде.

**Миғҙәт ХАННАНОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө көн сәйәсәте, тормошобоҙҙағы етешһеҙлектәр тураһында фекерегеҙҙе тура ярып әйтә алаһығыҙмы? Ғөмүмән, һеҙ үҙегеҙҙе ирекле фекер эйәһе тип иҫәпләйһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Спартак ИЛЬЯСОВ, тарихсы, яҙыусы, йыраусы:*** Бөгөнгө көн ысынбарлығы, уның һәләкәтле эҙемтәләре хаҡында мин теҙеп әйтеп тормаһам да, һәр беребеҙ көн һайын, сәғәт һайын уны үҙ елкәһендә татый, шул ауыр йөк менән тереклек итә. Халыҡ аңлай бөтәһен дә, күреп-белеп тора хәлдә, тик был хаҡта ҡайҙа ғына һәм күпме генә һөйләмә - файҙаһыҙ булыуын да яҡшы белә. Шуға өндәшмәй ҙә. Хатта ил граждандарының төп законыбыҙ Конституция менән гарантияланыусы иң ябай ихтыяждарына - хеҙмәткә, белем алыуға, медицина ярҙамына, торлаҡҡа эйә булыуға хоҡуҡтарына юл ябыла бара икәнен дә күреп-белеп торабыҙ. Башта, һынылыш осоро, тигән булдыҡ та, өндәшмәй генә түҙҙек, һәр яңылыҡты аңлап ҡабул итергә тырыштыҡ. Әммә ул "яңылыҡтар" һыңғайлатманы бит тормошобоҙҙо. Минең үҙемдә ауыл, ер кешеһенең яҙмышы бигерәк босой. Етештереү ҡеүәттәре юҡҡа сығып, ҡала халҡы эшһеҙ ҡалғайны, хәҙер, яғыулыҡ хаҡын тағы күтәрә бирһәләр, крәҫтиән дә иген сәсеп, уңыш йыйыуҙан туҡтар, ахырыһы... Ә был бит ҡот осҡос булаcаҡ - икмәк теләнселәп, Көнбайышҡа, океан аръяғы илдәренә ҡул һонмаһыҡ, тимә. Хәйер, ил халҡы үҙен шундай түбәнселеккә төшөрөүгә юл ҡуймаҫ, тип өмөтләнәйек, сөнки халыҡ ҡурҡмайынса ирекле фекерләргә өйрәнде бит бер талай. Дөрөҫ, Рәсәй тарихы буйынса ирекле фекерләүселәрҙе эҙәрлекләүгә ҡоролған. Рәсәйҙә бер ваҡытта ла демократия ла, федераль дәүләт ҡоролошо ла булмаясаҡтыр инде ул. Илде бындай хәлдән сығарыу юлын ғалимдар эҙләп ҡараһын, тием мин хәҙер, аптырағас...

***Фәтих ИШБИРҘИН, хеҙмәт ветераны:*** Ниндәйҙер фекер әйтеү өсөн уға мохтаж булған йәки уға ҡолаҡ һалыусы тыңлаусыһы ла кәрәк бит әле, юғиһә, үҙ алдыңа һөйләнеп йөрөгән һымаҡ килеп сығасаҡ. Ә ундай фекер белдереп йөрөүселәргә, ғәҙәттә, негатив, тиҫкәре, мыжыҡ кеше тигәнерәк ярлыҡ йәбештерә һалалар. Дөйөм һүҙ һөйләргә булалыр ҙа әле, ә бына аныҡ берәй мәғлүмәт, кемдәрҙәндер яҙыҡ эше, конкрет етешһеҙлек тураһында ауыҙыңды асып ҡына ҡара - ауырткан еренә килеп әләккәндәр ғәфү итмәйәсәк быны. Етди мәсьәләмә был, ваҡтөйәк булһынмы, әммә шунда уҡ эҙәрлекләү, үс алыу, исемеңә ҡара яғыу кеүек кампания башланырын көт тә тор. Һөҙөмтәлә һине йәмәғәтселеккә "аҡылы бер аҙ етешмәгән бушбоғаҙ" итеп һүрәтләп тә ҡуялар әле ул. Шундай "мизал" менән генә ҡотолһаң, хуш та бит, әгәр "сөйләнеп баҫылған" етәксең эҙәрлекләп, үс ала башлаһа? Ирекле фекер әйтеү өсөн ирекле кеше булырға кәрәктер ул, тимен шуға күрә. Ябай хеҙмәткәр, эшсе үҙ түрәһенә ҡаршы әйтә алмаған кеүек, ул түрә лә йылы, уңайлы креслоһынан ҡолаҡ ҡағыуҙан ҡурҡып, юғарылағы етәкселәргә ауыҙ асып тәнҡит һүҙе әйтә алмай, тәбиғи. Бында кемделер ғәйепләү яҙыҡ та һымаҡ булып китә, сөнки беҙ тәҡи демократия, дискуссия һәм бәхәс, фекер алышыу мәҙәнилегенә өйрәнә алмаҡ һәм булмай ҙа ул беҙҙең менталитеттан. Ирекле кеше өсөн дә асыҡ эфирҙа микрофондарға, матбуғат баҫмаларына юлды шар асып ҡуймағандар, шәйт. Унан ирекле фекерен ағас ҡыуышына барып ҡысҡырһынмы ул? Йыйылыштарҙа, һәр төрлө митингыларҙа һөйләнгән хәбәрҙең дә юғарыға барып етмәүе сер түгел. Хәҡиҡәткә ынтылыш шуға күрә ике йүнәлештә барырға тейеш. Дәүләт етәкселәре, төрлө кимәлдәге власть әһелдәре йәмәғәтселек, электорат фекерен белгеһе килһә, халыҡҡа табан бер нисә аҙым яһарға "түбәнселек" ҡылырын ине. РФ Президенты Владимир Путинға, ҡырҡ иләктән үткәрелгән хәлдә лә, ана бит ниндәй киҫкен генә һорауҙарға яуап бирергә тура килә. Ә Норвегияның Премьеры Столтенберг, мәҫәлән, халыҡтың власть тураһында фекерен белергә теләгәс, бер көн Осло урамдарында таксист булып эшләп алыуҙан да бер ҙә кәмһенмәне.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индексыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **414 һум 36 тингә** яҙылырға була.

● Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе төрлө **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 2 уҡыусыбыҙ -"400 башҡорт халыҡ йыры", 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың "Алдар батыр", 10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", 10 уҡыусыбыҙ** 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ унайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум.**

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru.** Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru.** Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 5 сентябрҙә Astec Inc компанияһының (АҠШ) халыҡ-ара һатыуҙар буйынса вице-президенты Раджи Элмаула менән осрашты. Осрашыуҙа республикала юл төҙәлешендә ҡулланылған юғары сифатлы компоненттар етештереү мөмкинлектәре тикшерелде. Был компания асфальт етештереү заводтарын булдырыу буйынса лидер булып тора. Башҡортостан Президенты менән осрашыу барышында төбәктең юлдар селтәрен үҫтереү, шулай уҡ юлдар төҙөү өсөн ҡатышма әҙерләү буйынса производстволарҙы яңыртыу мәсьәләләре тикшерелде.

✓Смарт-мәктәп - элиталы мәктәп тигәнде аңлатмай, был башҡалар өсөн өлгө булыуҙы күҙ уңында тота. Ағымдағы уҡыу йылы аҙағынаса 20 дөйөм белем биреү учреждениеһына смарт-мәктәп статусы биреләсәк. Ғаризаларҙы тикшергән ваҡытта экспертлар белем биреү процесында яңы мәғлүмәт технологияларының әүҙем һәм урынлы ҡулланылыуын, белем биреү сифатын, уҡыусыларҙың үҙ аллы мәғлүмәт эҙләй, таба һәм файҙалана белеүен иҫәпкә аласаҡ.

✓Республикала пенсионерҙар һаны 1092,2 мең кешенә тәшкил итә - былтырғыға ҡарағанда 17,1 меңгә күберәк. Төбәктә пенсияның уртаса күләме - айына 9448,5 һум (2012 йылдың 1 июленә ҡарата ул 8610,5 һум тәшкил иткәйне). Пенсионерҙарҙың 997,4 меңе хеҙмәт пенсияһы ала, шул иҫәптән ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһын - 897,6 мең кеше (пенсияның уртаса күләме - айына 10 056,2 һум), инвалидлыҡ буйынса - 47,8 мең кеше (6460,7 һум), ҡараусыһын юғалтыу буйынса - 52 мең кеше (6876,6 һум) ала. Дәүләт пенсияһы - 94,8 мең кешегә (пенсияның уртаса күләме - айына 6611,3 һум), шул иҫәптән социаль пенсиялар 90,8 мең кешегә (6425,2 һум) түләнә.

✓Ишембай ҡалаһындағы Волга буйы федераль округының Башҡортостан кадет корпусын яңыртыуға кәм тигәндә 350 миллион һум аҡса бүленәсәк. Яңыртыу эштәре федераль һәм республика бюджеттары, шулай уҡ бюджеттан тыш средстволар иҫәбенә үткәреләсәк. Был хаҡта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов белдерҙе. РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич һүҙҙәренсә, корпусты үҫтереү буйынса өс йылға иҫәпләнгән программа ҡабул ителәсәк.

ШАҢДАУ

**РФ Дәүләт Думаһына, ата-әсәләренең пенсияһына өҫтәмәне балаларының эш хаҡынан алыуға бәйле закон ҡабул итеү тураһында тәҡдим индерелгәнен "Киске Өфө"нән уҡып белгәс, бик оҙаҡ ваҡыт был яңылыҡтың асылы хаҡында уйланып йөрөнөм. Был мәсьәлә закон һынлы закон итеп күтәрелгәс, уның ыңғай яҡтары ла барҙыр инде ул, тип уйланым.**



# "БАЙҘАР ИҠТИСАДЫ" АСЫЛЫ...

## йәки Сит илгә законлы рәүештә аҡса күсереү юлы тураһында

Уйҙарымдың осона сыға алмайынса, бер көн шулай ҡала ситендәге баҡсама килеп төштөм. Шунан был яңылыҡты баҡсалағы урыҫ күршем менән асыҡларға булдым. Ул да, мин дә пенсияла булғас, был мәсьәлә икебеҙгә лә берҙәй ҡағыла бит инде. Шуға күрә әңгәмәбеҙ үҙенән-үҙе тәбиғи рәүештә килеп сыҡты. Мин әйтәм, хәҙер РФ Дәүләт Думаһына ошо тәҡдимдәрҙе индерергә маташалар. Ундай тәҡдим индергән кешенең башы бармы икән? Был осраҡта урыҫтар: "Все ли у него дома?"- тигән һорау ҡуя торғайнылар. Мин дә урыҫ күршемә ошо һорауҙы ҡуйҙым.

- Да, у него не все дома. Он хранит их в штатах или в Швейцарском банке, - булды күршемдең яуабы.

Ошо урында минең шаяртып ҡына ҡуйған һорауым "байҙар иҡтисадына" төштө лә китте. Баҙар иҡтисадын мин ана шулай "байҙар иҡтисады" тип атайым. Ни өсөн тигәндә, үҙегеҙ беләһегеҙ, Ельцин башлап ебәргән баҙар иҡтисадын илебеҙ йылғырҙары йәһәт кенә "байҙар иҡтисадына" әйләндереп, йәһәт кенә илебеҙҙең төп байлығын үҙ ҡулына туплап өлгөрҙө.

-Юҡты һөйләмәгеҙ әле, күрше. Мин һеҙҙең менән килешмәйем. Дәүләт Думаһына беҙҙең тарафтан ил мәнфәғәтен ҡайғыртҡан кешеләр генә һайлап йыйылған. Улар бына ошо законды ҡабул итеп, һинең менән минең кеүек ярлы пенсионерҙарға, ҡарттарға балаларыбыҙҙың ихтирамын, иғтибарын тәрбиәләй. Балалар ҡартайған ата-әсәһен онотмаһын, тигән маҡсаттан да сығып сығарылалыр был закон, - тинем мин икебеҙгә лә аңлашылған телдә.

Күршем гуманистик идеяларҙан бигерәк алыҫ торған кеше булып сыҡты һәм үҙенең дөрөҫләгән раҫлар өсөн берәм-берәм миҫалдар килтерә башланы. Баҡтиһәң, уның бер улы элек РСУ-ла, юлдар ремонтлаусы булып эшләгән икән. Хәҙер ул эшһеҙ ултыра. Ә юлдарҙы кавказлылар, үзбәктәр һәм башҡа сит ил граждандары ремонтлай. Сөнки уларҙы эшләтеү эш биреүсегә күпкә арзанға төшә икән. Икенсе улы 7 мең һум алып эшләп йөрөй. Ул аҡсаһы уның ғаилә сығымдарының 2 процентын да ҡапламай, етмәһә, шуның 2 процентын ул атаһына түләргә тейеш булып сыға. Шунан ошо буламы инде дәүләттең ата-әсәгә ихтирам һәм иғтибар тәрбиәләү ысулы?

Дәүләт Думаһына тәҡдим ителгән был законды оҡшатмаһы күршем. Оторо ҡаршы сыҡты. Мине яйайлыҡта, бер ҡатлылыҡта ғәйепләп, һүҙен шулайыраҡ дауам итте:

-Бына беҙгә телик аша сит илдә йәшәп ятыусы танылған артистарҙы, эшҡыуарҙарҙы, депутаттарҙы йыш ҡына күрһәтеп торалар. Хәҙер беҙҙең илдә лә байҙарҙан килем тураһындағы декларацияны ҡәтғи рәүештә талап итә башланылар. Икенсенән, Рәсәй банктарынан сит илгә аҡса күсереү ҙә закон тарафынан тыйыла хәҙер. Тап шуның өсөн дә Дәүләт Думаһындағы "аҡыллы баштар" сит илгә китәсәк-киләсәк аҡсаларына ошо рәүешле законлы "күпер" һала. Нисекме? Бына былай. Мәҫәлән, Израилдә йә АҠШ-та йәшәгән берәүҙең улы йә ҡыҙы беҙҙә миллионер икән, ти. Бына шул миллионер сит илдә михнәт сиккән атаәсәһен "хәстәрләп", ай һайын эш хаҡынан 2 процент аҡса күсерә. Тик, ысынлап та, 2 процент ҡынамы? Тот ҡапсығынды! Имеш, 2 генә процент. Закон бар, ә законды һәр ваҡыт урап үтә һәм боҙа торған юлдары һәм закон аҫты акттары ла була. Закондар беҙҙең илдә боҙоу өсөн сығарыла. Йәғни был закон илебеҙ капиталын сит илгә законлы рәүештә сығарыу өсөн уйлап сығарылған да инде...

Күршем һүҙен тамамлап, инде тынысландым ғына тигәнендә тағы ла бер фекерен әйтеп һалды. Уныһы мине күптән борсоп йөрөгән мәсьәләгә бәйле булып сыҡты.

-Әгәр ҙә Дәүләт Думаһында беҙҙең кеүектәрҙе уйлаһалар, килемдән алынған һалымдарҙы ла тигеҙ түләтмәҫтәр ине. 10 меңгә эшләп йөрөгән мин дә, миллион алғаны ла 13 процент һалым түләйбеҙ. Был ғәҙел хәлме? Милион алғандар 30-35 процент түләһәләр ҙә, уларҙың айлыҡ эш хаҡы минекенән 60-70 тапҡырға күберәк килеп сығыр ине. Уның ҡарауы, ҡаҙнаға күпме аҡса килер ине лә, шул сумманан беҙҙең пенсияға өҫтәмәне 2 процент итеп түләрҙәр ине. Вот где собака зарыта. Минеңсә, байҙар өсөн һалымды арттырыу мәсьәләһен күтәрергә кәрәк Дәүләт Думаһына...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Урыҫ күршем күҙемде тулыһынса асты. Ысынлап та, мин гуманистик принцип тип аңлаған яңы закондың ана шундай маҡсаттары ла бар икән. Закон сығарыусылар кем һуң? Хәйер, ҡарға күҙен ҡарға суҡымай, тиҙәр.**

**Салауат МОСТАФИН.**

ШАҢДАУ

# БАШҠАЛАРҘЫҢ ТОРМОШОНА ҠЫҪЫЛЫРҒА!

## Был ҡарарҙы беҙгә лә ҡабул итеү фарыз

**Гәзитебеҙҙең 33-сө һанында Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Ерең һатһаң, ауылыңа һат..." мәҡәләһен уҡып тетрәндем, уйландым, һоҡландым.**

Бик күптәр шундай уҡ хистәрҙе кисергәндәр, тип уйлайым. Уйланыуымдың һәм һоҡланыуымдың сәбәбе - Әхмәрҙең нәҡ кәрәк мәлдә, кәрәк урында булыуы һәм ерҙе килмешәктәргә һатырға юл ҡуймауы. Ул үҙе лә бит "Эх, халҡымдың ябайлығы, бер ҡатлылығы..." тип әсенеп тә, ғәжәпләнеп тә яҙа. Туғандарын яңылыш, хата аҙым яһауҙан ҡурсалап алып ҡалыр өсөн Әхмәр Үтәбайҙы ниндәйҙер көстәр ауылына әйҙәгән бит. Әлбиттә, тормош юлын үткәндә күп алданабыҙ, уйлап еткермәй, хаталарға юл ҡуябыҙ шул.

Күптән түгел Башҡортостан "Юлдаш" телеканалында "Амели" тигән матур бер кинофильм ҡарағайным. Ҡыҫҡаса: Амели исемле ҡыҙ баланың ҡырыҫ холоҡло атаһы хәрби табип булып эшләй. Ул бер саҡ балаһының һаулығын тикшерергә була һәм уны үҙ янына ултырта, уның тын алышын, тамағын, йөрәк тибешен тикшерә. Атаһының быңдай иғтибарына дусар булған ҡыҙҙың күңелендә шатлыҡ хистәре тулышып китеп, йөрәге дөпөлдәп тибә башлай. Шул сәбәпле атаһы ҡыҙына "йөрәк ауырыуы бар" тигән диагноз ҡуя. Артабан ҡыҙыҡайҙы балалар баҡсаһына ла, мәктәпкә лә йөрөтмәйҙәр. Уны өйҙәрендә әсәһе генә уҡыта. Шулай итеп, Амели тиҫтерҙәре менән аралашмай, өйөндә яңғыҙ бала булып үҫә. Үҫеп буйға еткәс, ҡыҙ бер сит ҡалала кафеға эшкә урынлаша. Тәүҙә ул үҙенә бығаса таныш булмаған мөхитте оло ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтә. Тик бер көндө: "Башҡаларҙың тормошона ҡыҫылырға!" - тигән ҡарарға килә ҡыҙ. Сөнки ул берәүҙәрҙең ярҙамға мохтажлығын, икенселәрҙең уҫаллыҡтарын бөтөрөү зарурлығын, уларға дөрөҫ юлды күрһәтергә кәрәклеген аңлай. Тик Амели үҙенең ҡайһы бер уҫалдар алдында юғалып ҡалыуын һиҙә һәм фильмдең иң матур мәлендә: "Эх, һәр урамда яҡшы, дөрөҫ кәңәш биреүсе "суфлер" булһын ине", - тип хыялланыуы һүрәтләнә. Ҡыҙ баланың үҙенә лә битараф булмаған яҡшы кешеләр осрай һәм бәхетенә ҡыйыу аҙымдар яһарға ярҙам итәләр...

Оҙон-оҙаҡ итеп был фильмды бәйән иттем, аптырап уҡыйһығыҙҙыр. Үҙ өйөбеҙгә бикләнеп йәшәп, битараф кешеләргә әйләндек инде. Әллә беҙгә лә Амели кеүек: "Бүтәндәрҙең, ауылдарыбыҙҙың, ҡалаларыбыҙҙың тормошона ҡыҫылырға!" - тигән ҡарар ҡабул итергә ваҡыттыр.

"Күп урында артыҡ һүҙ ысҡындырмаҫ өсөн һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ", тип тә әйтелә баяғы фильмда. Шулай ҙа, Амели хыялланғанса, һәр урамда кәңәш биреүсе, аҡыл өйрәтеүсе осрамаһа ла, "Шөкөр" тип әйтә алабыҙ. Битараф булмағандар барыбер ҙә бар һәм улар кәрәк урында осрап, беҙҙе төрлө яңылыш аҙымдарҙан ҡурсалап та ҡуя.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ер, өй һатҡанда "Ауыл хакимиәтенең, аҡһаҡалдарҙың рөхсәтен һорарға кәрәк", тигән шарт законда бармы икән? Хәйер, беҙҙең халыҡта бының кеүек яҙылмаған закондар бихисап булыуын да онотмаҫҡа кәрәк.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына был юлы 12 журналист дәғүә итә: Рөстәм Вәхитов ("Бельские просторы"), Самат Ғәлиуллин (Ғафури районы), Мадриль Ғафуров ("Коммунист Башкортостана"), Юрий Нестеренко (Стәрлетамаҡ), Зөйтүнә Ниғмәтйәнова ("Киске Өфө" гәзите), Рәдис Ноғоманов ("Өмөт" гәзите), Әнәс Арыҫланов (Туймазы), Айрат Нурмөхәмәтов ("Башҡортостан"гәзите), Людмила Кашапова ("Молодежная газета"), Зөлфиә Рәхмәтуллина (Башкортостан юлдаш телевидениеһы), Галина Салихова ("Панорама Башкортостана"), Ильяс Такалов (Йылайыр районы), Мәүлиә Рахимова, Эльза Скрипченко, Евгения Хормушко (Учалы гәзите). Тәҡдимдәр 25 сентябргә тиклем 450076, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урам, 13-сө йорт адресы буйынса Журналистар союзында ҡабул ителә.

✓Баш ҡаланың Гоголь урамында төҙөлгән туғыҙ ҡатлы ҡунаҡхананың дөйөм майҙаны 4420 квадрат метр булаcаҡ һәм унда 91 номер ҡуҙаллана. Тәүҙә ҡунаҡханаға өс йондоҙ "таҡһалар", күптән түгел проектка индерелгән үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә тағы бер йондоҙ өҫтәргә булғандар. Бөгөнгә төҙөлөштә етенсе ҡаттың колонналарын бетонлау һәм арматурлау бара. Объекты 2014 йылдың декабрендә файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты быйыл да уҡыу йылын "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте аҙналығы" менән башлап ебәрҙе. Сара сиктәрендә иң белемле студент билдәләнде, төрлө экспедицияларға йомғаҡлау яһалды, йәш шағирҙар һәм яҙыусылар менән осрашыуҙар үтте. Шулай уҡ был аҙнала факультет коллективы телсе ғалимдар менән дә осрашты.

✓Өфөнөң Октябрҙең 50 йыллығы һәм 8 Март урамдары киҫелешендә урынлашҡан Октябрь революцияһы һәм Граждандар һуғышы батырҙары мемориалы янында сквер асыу тантанаһы үтте. Скверҙы реконструкциялау буйынса эштәр 2013 йылдың йәйендә башланғайны. Әлегә скверҙың рәсми исеме юҡ, документтарҙа ул "Йәштәр" скверы тип билдәләнә. Скверға исемде һәр өфөлө тәҡдим итә ала, иң уңышлы тип табылғандары тауыш биреү өсөн Өфө хакимиәте сайтында урынлаштырыласаҡ.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Ҡала Советы депутаттары яңы урамдарға атамалар биреү тураһында ла ҡарар ҡабул итте. Хәҙер Кооператив бистәһендә Баныу Вәлиева, Муса Вәлитов, Мөхәммәтғәли Исҡужин, Фәтих Иҡсанов исемендәге урамдар барлыҡҡа киләсәк.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БЮДЖЕТТЫ "ҺУҒАРЫУСЫ" ТАРМАҠ

**Муниципаль милек идаралығы (УМС) тигән атама күптәр өсөн, бәлки, бер нәмәне лә аңлатмайҙыр һәм күптәр уға әһәмиәт тә бирмәйҙер. Әммә идаралыҡтың төп бурыстарының береһе булып Өфө ҡала округы бюджетын тулыландырыу тора, тиһәк, күптәрҙең ҡолағы "ҡарп" итеп ҡалыр, моғайын. Ысынлап та, был ойошма бөгөн бюджет булдырыусы структура тип иҫәпләнә һәм бюджеттың 13 проценттан 25 процентҡа тиклем өлөшө тап уға тура килә. Быйыл баш ҡалалағы төп "милекселәр" бюджетҡа 1 миллиард 600 миллион һум индерһә, быйылға план 2 миллиард һум тип билдәләнгән. Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһында Муниципаль милек идаралығы (элекке КУМС) начальнигы Азамат Сәғитов ошо хаҡта һәм күсемһеҙ милек баҙарындағы ҡануниәтҡә индерелгән яңылыҡтар менән таныштырҙы.**

Мәҫәлән, 2008 йылда 159-сы Федераль закон ҡабул ителә һәм ул бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына дәүләт һәм муниципаль торлаҡ булмаған милек фондынан ҡуртымға алған объекттарҙы торгтарһыҙ ғына һатып алыу хоҡуғын билдәләй. Ошо йылдар эсендә норматив-хоҡуҡи актҡа әһәмиәтле үҙгәрештәр индерелә. Әгәр бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары бинаны 2013 йылдың 1 июленә тиклем ике йыл ҡуртымға алған булһа, хәҙер уны һатып алыу мөмкинлегенә эйә. Шулай уҡ алыш-биреш үткәрелгәндә майҙан күләме сикләнмәй. Милек өсөн ай йәки квартал һайын иҫәпләшеп барырға мөмкин, түләү мөҙҙәте республикала элек ете йыл булһа, хәҙер ул өс йылға ҡалдырылған.

2009-2013 йылдарға Өфөлә муниципаль милекте хосусилаштырыуҙың фаразлау планына дөйөм майҙаны 190 мең квадрат метр булған 922 объект индерелһә, бөгөнгә яҙылған ғаризаларға ярашлы, шуларҙың 640-ы, йәғни 70 проценты һатылған. Эшҡыуарҙар һатып алған объекттарҙың дөйөм майҙаны 133 мең квадрат метр тәшкил итә. Һатыу-һатып алыу килешеүҙәренә ярашлы, килем 4 миллиард 105 миллион һум. Әлеге ваҡытта был сумманың 2 миллиард 170 миллион һумы бюджетҡа ингән дә инде. Ә ҡалған сумма, түләү мөҙҙәте әлегәсә ете йылға һуҙылғанлыҡтан, килешеү төҙөгән көндән алып ошо ваҡыт үткәнсе яйлап бюджетҡа индереләсәк. Йәғни бөгөнгә 178 объект өсөн генә түләү тулыһынса башҡарылған.

2013 йылда ғына йыл башынан алып муниципаль торлаҡ булмаған фонд объекттарын һатыу-һатып алыу килешеүҙәре буйынса ҡала бюджетына 454 миллион һум килем ингән. Һатылған объекттарҙың хаҡы ҡайҙа урынлашыуына ҡарап, 10 мең һумдан (подвалдар) 64 мең һумғаса (1-се ҡаттар) тибрәлә. Уртаса алғанда инде, был сумма квадрат метр өсөн 32 мең һумдан ашыу тәшкил итә.

Шулай уҡ 178-се "Дәүләт һәм муниципаль милекте хосусилаштырыу тураһында" Федераль Закон нигеҙендә УМС тағы ла күберәк һатып алыусыларҙы йәлеп итеү маҡсатында торгтарҙы асыҡ итеп үткәрергә планлаштыра. Бындай алым әгәр һатыуға сығарыласаҡ объект буйынса уҙғарылған аукцион нигеҙһеҙ тип табылғанда тормошҡа ашырыласаҡ. Был осраҡта объекттың хаҡы аукционға сығарылған хаҡтың 50 процентына тиклем төшөрөлөүе мөмкин. Бындай схема нигеҙендә әлегә өс: Төҙөүселәр урамы, 7а, Севастополь урамы, 1/1, Сафронов проезды, 10 адрестары буйынса урынлашҡан объекттар һатыуға сығарыласаҡ. Азамат Тәлгәт улы әйтеүенсә, был объекттар уңайһыҙ урындарҙа урынлашҡан, әммә буш тороп, улар бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй һәм бер файҙаһыҙ ултыра. Әгәр аукционда ҡуйылған хаҡты 50 процентҡа төшөрөп, уларҙы асыҡ торгҡа сығарғанда, бәлки, уларға хужа табылыр, ә ҡала бюджеты күпмегә булһа ла файҙа алыр ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Архитектура һәйкәлдәре эшҡыуар-арендаторҙарҙың иғтибарын бигүк йәлеп итеп бармаған объекттар булып иҫәпләнә. Сөнки эшҡыуар тәү сиратта үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта. Уға ни тиклем тиҙерәк килем алһа - шул тиклем яҡшы. Шуға ла улар ҡуртымға халыҡ күп йөрөгән, "ҡыҙыл линияла" булған һәм ремонт өсөн артыҡ сығымдар талап ителмәгән, сығымдар булған хәлдә лә тиҙ арала үҙен аҡлаған майҙандарҙы алырға тырыша.**



# КВАДРАТ МЕТРЫ...

## бер генә һум!

Ә архитектура һәйкәлдәре исемлегенә ингән, етди ремонт һәм артабан да хәстәрлек һәм иғтибар талап иткән объекттар йүнселдәрҙең күҙ уңынан ситтә ҡала. Муниципалитеттар иһә бындай тарихи объекттарҙы реконструкцияларға тырыша, әммә бюджеттың уларҙы "йәкмәргә" хәленән килмәй. Тимәк, мәсьәләне хәл итеүгә бер генә юл - шәхси инвесторҙарҙы йәлеп итеү - ҡала. Йәғни бер атыуҙа ике ҡуян - тарихи объект та ремонтлана һәм сафҡа индерелә, бюджет аҡсаһы ла сарыф ителмәй. Бөгөн Өфөлә шундай биш объект иҫәпләнә. Яҙғыһын ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов уларҙы һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса етди бурыс ҡуйғайны. Ошо көндәрҙә үткән ҡала Советы сессияһында депутаттар ҡәнәғәтләнерлек хәлдә булмаған мәҙәни мираҫ объекттарын ҡуртымға биреү тураһындағы яңы положениены раҫланы. Уға ярашлы, бындай объекттар арендаторға 25 йылға бирелә. Ҡуртымға алыусы килешеү төҙөгәндән һуң бер ай эсендә уға хоҡуғы булыуы тураһында теркәү үткәрергә, теркәү үткәндән һуң биш көн эсендә махсус органдарҙан Һаҡлау йөкләмәһе (охранное обязательство) алырға тейеш.

Һуңынан инде арендаторҙың ғаризаһына ярашлы минималь йыллыҡ ҡуртым хаҡы квадрат метр өсөн айына 1 (бер) һум тәшкил итәсәк. Әммә бының өсөн объектты ҡуртымға алыусы уны үҙ иҫәбенә реконструкцияларға, ремонт үткәрергә тейеш. Был эштәрҙе башҡарыу ваҡыты өс йыл менән сикләнә. Ошо өс йыл дауамында ҡуртым хаҡы торг үткәрелгәнгә тиклем баһалау органдары объектҡа ҡуйған баҙар хаҡын тәшкил итә. Положениела шулай уҡ яҡтарҙың үҙ бурысын үтәмәгән осраҡта ҡуртым килешеүен өҙөү яуаплылығы ла ҡарала.

Шулай уҡ ҡала Советы депутаттары Ленин районындағы яңы урамдарға атамалар биреү тураһында ла ҡарар ҡабул итте. Хәҙер Кооператив бистәһендә Баныу Вәлиева, Муса Вәлитов, Мөхәммәтғәли Исҡужин, Фәтих Иҡсанов исемендәге урамдар барлыҡҡа киләсәк. Бынан тыш, яңы урамдар исемлегенә Артезиан, Ирәмәл, Тағанай, Нөргөш, Сармат атамалары ла өҫтәлде.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠОШТАР ОСОР БЕЙЕКЛЕКТӘН



**Йыл һуңында Өфөлә 48 метр бейеклектәге күҙәтеү тәгәрмәсе, йәғни "шайтан" ҡуласаһы файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Йәйҙең һуңғы көндәрендә Мәжит Ғафури исемендәге ял һәм мәҙәниәт паркында уның нигеҙенә тәүге ташты һалыу тантанаһы үтте.**

Ул Мәскәү һәм Сочи ҡалаларындағыларҙан ғына ҡалышып, ҙурлығы буйынса Рәсәйҙә өсөнсө урында торасаҡ, ләкин илдә йыл буйы файҙаланылған иң ҙур шайтан "ҡуласаһы" буласаҡ. Уның кабиналары йылытыласаҡ һәм унда кондиционерҙар урынлаштырыласаҡ. Кабиналар һаны 24 булһа, һәр береһе алты урынға иҫәпләнәсәк. Ҡуласа алты минут эсендә бер әйләнеш яһаясаҡ. Төҙөләш яҡынса өс ай ярым дауам итәсәк. Күҙәтеү тәгәрмәсе паркты реконструкциялауҙың бары тик беренсе этабы ғына булып торасаҡ.

Ғөмүмән алғанда, ике йыл дауамында шәхси инвесторҙар бында ҙур үҙгәрештәр индерергә ниәтләй. Мәҫәлән, паркта йәйге йылы көндәрҙә ял итеү һәм күңел асыу өсөн асыҡ һауала аттракциондар комплексы булһа, ҡыш көнө улар ябыҡ бинала ла эшләйәсәк. Ябыҡ комплекс иһә Рәсәйҙә генә түгел, ә Европала иң ҙур комплекс буласаҡ. Әйткәндәй, парк проекты Европаның ошо йүнәлештә махсуслашҡан иң ҙур компанияларының береһе тарафынан эшләнгән.

Паркка инеү Октябрь проспекты яғынан буласаҡ. Унда күҙәтеү тәгәрмәсе килеүселәрҙе ҡаршы алған иң беренсе объект булһа, артабан инде милли башҡорт ауылы, ретро автомобилдәр музейы, балалар майҙансығы, тиҫтәләрсә заманса аттракцион урынлашасаҡ. Шулай уҡ бында һыу зонаһы ла, экологик парк та, ҡышҡы баҡса ла, йәйге кинотеатр ҙа, балалар тимер юлы ла һ.б. буласаҡ. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - бөгөн үҫеп ултырған ағастар мөмкин тиклем һаҡланасаҡ.

# ТЕАТР ГАРДЕРОБТАН БАШЛАНҺА...

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡалалағы объекттарҙың хужалары һәм уларҙы ҡуртымға алыусылар алдына шундай талап ҡуя: биналарҙың эргә-тирәһендәге территория төҙөкләндерелгән булырға тейеш. Сөнки милекселәрҙең дә, арендаторҙарҙың да туранан-тура бурысы - граждандар өсөн имен һәм уңайлы ял урындары булдырыу, уларҙы тейешле кимәлдә тотоу.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең 300-ләп ғалимы ғәҙәттән тыш йыйылыш үткәреп, Рәсәй Фәндәр академияһын реформалаштырыу тураһында РФ Дәүләт Думаһына индерелгән закон проектына ҡаршы сығыш яһаны. Улар фекеренсә, был закон Академияны һәм Ватан фәнен емереүгә килтерәсәк.

✓Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана бөгөн, 7 сентябрҙә, Асыҡ ишектәр көнө үткәрә. Килгән ҡунаҡтар бында төрлө күргәҙмәләр, һирәк осрай торған китаптар менән танышасаҡ. Телләрҙән инглиз, немец һәм француз телдәре буйынса тест үтеп, үҙенең белем кимәлен тикшереп ҡарай аласаҡ. Шулай уҡ йырсылар, композиторҙар, бейеүселәр менән осрашыу ҙа көтөлә.

✓Алдағы көндәрҙә һауа торошо насарланасаҡ һәм тағы ла ямғырҙар башланасаҡ. Дүшәмбенән республикала 11-19 градус булыуы көҙаллана. 26 октябрҙә ҡар яуыуы көтөлә.

✓БР буйынса Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре йәшерен ҡомарлы уйын ойоштороусыларҙы фашлауҙы дауам итә. Ошо арала ғына Өфөлә, Ишембайҙа, Салауатта, Стәрлетамаҡта 6 йәшерен пункт асыҡланып, 78 уйын ҡоралы тартып алынды.

✓Иртәгә үтәсәк берҙәм тауыш биреү көнөндә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың бишенсе саҡырылыш депутаттарын һайлайбыҙ. Республикала 3 миллиондан ашыу һайлаусы бюллетендәргә үҙ билдәһен ҡуйырға тейеш. Башҡортостан Конституцияһына ярашлы, Ҡоролтай 110 депутаттан төҙөлә. Мандаттар өсөн барыһы 383 кандидат тауыш йыйырға әҙерләнә. Йәшәгән урынында теркәлмәгән граждандар Өфөлә 119-сы участкала (Посадская урамы, 26-сы йорт) тауыш бирә ала. Үҙәк һайлау комиссияһында эшләүсе "Ҡыҙыу линия" телефоны: 8-800-347-54-54; 8-347-250-25-95.

✓12 сентябрҙә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында тамашасылар өсөн "Театр төнө" сараһы үткәрелә. Махсус әҙерләнгән тамашаларҙан, концерт шоуынан тыш, тамашасыларға театр бинаһы буйлап экскурсия, төрлө конкурстар, күңел асыу саралары ойошторыласаҡ. Сара төнгә сәғәт 12-лә "Эксперимент" тигән спектакль ҡарау менән тамамланасаҡ. Ошондай уҡ "Театр төнө" М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында ла, башҡа театрҙарҙа ла үтәсәк.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ТУҒАН ТЕЛДӘ УҠЫУҒА...



## бер ни етмәй!

(Башы 1-се биттә).

**Республика башҡорт лицей-интернатын** тамамлаусы 62 егеттең барыһы ла юғары уҡыу йортона уҡырға ингән, уларҙың күбеһе Өфө дәүләт авиация техник университетын, Өфө дәүләт нефть техник университетын, Башҡорт дәүләт университетын, Башҡорт дәүләт аграр университетын, Башҡорт дәүләт педагогия университетын һәм шулай уҡ Рәсәй дәүләт гуманитар университетын, Санкт-Петербург дәүләт университетын, Ҡаҙан федераль университетын, Силәбе, Магнитогорск вуздарын һайлаған.

Баш ҡаланың үҙенең башҡорт милли белем усаҡтарында ла был йәһәттән эштәр көйлө. Мәҫәлән, **Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһын** былтырғы уҡыу йылында тамамлаған 61 уҡыусының 3-әүһе төрлө йүнәлештәге колледж-техникумдарға уҡырға инһә, ҡалған 58 уҡыусы белем алыуҙы юғары уҡыу йорттарында дауам итәсәк. Әйткәндәй, уларҙың барыһы ла республика юғары уҡыу йорттарын һайлаған. Ә уларға алмаш булып беренсе класҡа 120 бала уҡырға килгән.

**М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһын** 49 уҡыусы тамамлаған, уларҙың 4-әүһе колледж-техникумдарға, 45 уҡыусы вузға уҡырға ингән, улар араһынан 2-һе - Мәскәү, 2-һе Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарын һайлаған. Беренсе класҡа килеүселәр һаны - 112.

Дим районында урынлашҡан **102-се башҡорт гимназияһында** беренселәрҙең һаны - 125. 26 сығарылыш уҡыусыһының 16-һы республиканың юғары уҡыу йорттарында, ҡалғандары урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарында уҡый башлаған.

Инорс биҫтәһендәге **140-сы башҡорт гимназияһында** беренсе класҡа 49 уҡыусы ҡабул ителгән. Ә сығарылыш уҡыусыларының 5-әүһе урта профессональ белем биреү уҡыу йорттарына, 25-е вуздарға, шул иҫәптән, Рәсәй юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән, бер уҡыусы иһә Чехия вузында телдәр өйрәнәсәк.

**136-сы башҡорт лицейына** беренсе класҡа 80 уҡыусы килгән, былтырғы 11-се класты тамамлаған 46 уҡыусының 45-е юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән.

**48-се башҡорт лицейын** тамамлаған 18 уҡыусының 17-һе шулай уҡ республиканың юғары, 1-әүһе - урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарына уҡырға ингән.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әле һаман балаһын башҡорт мәктәп-лицей-гимназияла уҡытырға ҡарар итә алмаған ҡайһы бер ата-әсәләрҙең икеләнеүҙәрен таратырға булышлыҡ итер, моғайын, әлеге мәғлүмәт. Күп мәктәптәр сығарылыш уҡыусыларының йөҙ процент менән юғары уҡыу йорттарына инеүенә өлгәшә алмай. Ә әлеге башҡорт милли уҡыу йорттарында был ғәҙәти күренеш. Ул ғына түгел: был белем усаҡтары туған телгә, туған мәҙәниәткә һөйөү тәрбиәләй, баланы рухлы, ғәмле итә - был үҙе үк баланың тәртибенә, тормошта оло маҡсаттар менән йәшәргә өйрәнеүенә ыңғай тәьҫир итә. Бына шулай, хөрмәтле ата-әсәләр, Өфө буйлап абруйлыраҡ уҡыу йорто эҙләп йөрөүҙе туҡтатығыҙ ҙа, ике лә уйлап тормаҫтан, балағыҙҙы башҡорт лицейына йә гимназияһына уҡырға алып барығыҙ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**



Бөгөн баш ҡалала төҙөкләндереү мәсьәләһен өҫтөнлөклө итеп алыусы предприятиелар бер нисә: "БР-ҙың Өфө ҡала округының электр транспорты идаралығы" МУП-ы, "Газпром трансгаз Өфө" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт, "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" МУП-ы. Үҙ предприятиеларының объекттары урынлашҡан территорияларҙың эргә-тирәһен төҙөкләндереү мәсьәләһенә айырым иғтибар бүлеп, улар ҡала инфраструктураһының сифатлы үҫешенә һиҙелерлек өлөш индерә. Мәҫәлән, "БР-ҙың Өфө ҡала округының электр транспорты идаралығы" МУП-ы территорияһында алма баҡсаһы бар. Яҙғыһын ул тирә-яҡҡа хуш еҫ бөркҡән сәскәләре менән күҙҙе ҡамаштырһа, көҙгөһөн иһә мул уңышы менән ҡыуандыра. Әлегә бында тиҫтәнән ашыу ағас үҫә. Ағастар араһында урынлашҡан беседка менән фонтан - водителдәрҙең һәм кондукторҙарҙың ял мәлендә ятаҡкан урынына әүерелгән дә инде.

"Газпром трансгаз Өфө" яуаплылығы сикләнгән ширҡәте Ҡашҡаҙан күле районындағы территорияны тәртиптә тота. Быйыл яҙғыһын бында 77 төп йәш шыршы ултыртылһа, предприятие хеҙмәткәрҙәре йыл һайын күлдең тирә-яғын экологик өмә мәлендә сүп-сарҙан таҙарта. Предприятие үҙе төҙөгән "Витязь" һауыҡтырыу комплексының территорияһы ла хеҙмәткәрҙәрҙең иғтибар үҙәгендә. Сөнки ул предприятиеның визит карточкаһы булып тора.

"Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" МУП-ы иһә баш ҡала урамдарына әкиәти төҫ биреп кенә ҡалмай, үҙ территорияһын да гөл-сәскәгә күмә. Бында ҡара яҙҙан ҡара көҙгә тиклем төрлө-төрлө сәскәләр күҙҙең яуын алып ултыра.

Бындай миҫалдар иғтибарға һәм хуплауға лайыҡ. Ни генә тимә, театр гардеробтан башланған кеүек, тәртип һәр кемдең эшләгән предприятиеһының ишек алдынан башлана. Һәм иң мөһиме - таҙартҡан урында түгел, ә бысратмаған, тәртип булдырылған урында ғына һәр саҡ таҙа була.

ЙӘРМИНКӘЛӘР

# ЮҠТЫҢ ҮҘЕ ГЕНӘ ЮҠ!

**Йылдың ниндәйҙер кимәлдә уңышлы булыуын көҙгө йәрминкәләрҙең иртәрәк башланыуынан сығып та билдәләргә мөмкин. Ғәҙәттә, улар сентябрҙә гөрләһә, быйыл иһә август башында уҡ баш ҡаланың төрлө майҙандарында алыш-биреш барҙы. Быға бал ҡорттарының әүҙемлеге этәргес биргәндер ҙә, бәлки. Сөнки йәрминкәләрҙе тап умартасылар башлап ебәрҙе.**

Иң беренсе бал йәрминкәһе 5 августа Совет районының Йәштәр мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда асылһа, 17 августа Спорт һарайы алдында Октябрь районы менән Иглин районы хакимиәттәре берлектә ойошторған йәрминкә үҙ һатып алыусыһын тапты. Был көндө 10 тонна һуған, 12 тонна башҡа йәшелсә-емеш, 12 тонна бал һатылған. 24-25 августа инде йәрминкә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының махсус ҡарарына ярашлы уҙғарылып, көҙгө йәрминкәләрҙе рәсми асты, тиергә лә мөмкин. Был сара, нигеҙҙә, "татлы" йәрминкә булды һәм 42 райондан баш ҡалаға баллы ылауҙар килде. Ике көн дауамында йәмғеһе 28 тонна бал һатылды. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: былтыр балдың килограмына хаҡ 300-400 һум булһа, быйыл был файҙалы ризыҡты 250 һумдан башлап алырға мөмкин ине. Ә инде элиталы тип иҫәпләнгән сорттарҙың хаҡы иһә 400 һум торҙо.

Был хаҡта журналистар өсөн ойошторолған матбуғат конференцияһында ҡала округының Сауҙа һәм хеҙмәттәрҙе координациялау идаралағы начальнигы Ирина Рублева белдерҙе. Шулай уҡ ул баш ҡалала үҙ баҡсаһында үҫтергән йәшелсә-емешен һатыу өсөн граждандарға тейешле шарттар тыуҙырылыуға ҡарамаҫтан, уларҙың әле һаман ҡайҙа теләйҙәр, шунда һатыу итеүҙәренә борсолоу белдерҙе. Бөгөн баш ҡалала туғыҙ урында махсус һатыу майҙансығы булдырылған һәм унда 275 бушлай урын бар. Ләкин әбей-бабайҙар ғына түгел, башҡалар ҙа дөйөм талаптарға буйһонорға теләмәйенсә, үҙенә нисек оҡшай, шулай һатыу итә бирә. Әлбиттә, һатып алыусы уларҙың продукцияһын, экологик таҙа, тип алырға тырыша. Әммә ысынбарлыҡта уларҙың ҡайҙа, нисек үҫтерелгәнлеген берәү ҙә белмәй. Хатта ҡайһы берҙә Затон баҙарында сүплеккә сығарып ташланған йәшелсә-емеште йыйып алып, йыуып һатыусылар ҙа осрай. Бөгөнгә Өфөлә 140 шундай тыйылған урында һатыу нөктәһе бар. Уларҙа 650 кеше үҙ сауҙаһын ҡорған. Шуларҙың 50 проценты - пенсионерҙар. Хоҡуҡи ҡануниәт нигеҙендә бындай сауҙагәрҙәргә барлығы 1611 протокол төҙөлөп, 1 миллион 85 мең һумлыҡ штраф һалынған, шуға ҡарамаҫтан, уларҙы тәртипкә өйрәтеү мөмкин түгел.

Әйткәндәй, йәрминкәләр башланғандан алып йәмғеһе 25 миллион һумлыҡ продукция һатылған. Әле йәрминкәләрҙең тап ҡыҙған сағы. Йәшелсә-емеш йәрминкәләре 24 августан 24 октябргә тиклем дауам итһә, ҡышҡы, нигеҙҙә, ит йәрминкәләре 14 декабрҙән 29 декабргәсә барасаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Атеросклероз

❖ **Ҡыр сәйе** (буквица) үләне нервылар ҡаҡшауы, баш әйләнеүе, баш ауыртыуы, эпилепсия, тиҙ арыу, гипертониянан яҡшы сара. Был үләндең көндәлек нормаһы - 6 грамм (3 ҡалаҡ). Ошо дозаны шәкәр болғатылған 500 мл ҡайнар һыуҙа 15 минут төнәтергә һәм сәй итеп, ашар алдынан эсергә. Ҡыр сәйе эсте йомшартыу сифатына ла эйә.

❖ **Клевер** борондан баш шаулауы менән оҙатылған склероздан ҡулланыла. Бер тигеҙ күләмдә алынған һабаҡлы клевер һәм шулай уҡ һабағы менән өҙөлгән боланут (кипрей) төнәтмәһе даими рәүештә шаулап торған баш ауыртыуынан ҡотҡара, яҡшы итеп йоҡлаясаҡһығыҙ. Үләндәр ҡатнашмаһын көн дауамында сәй кеүек бешереп эсәһең. Төнәтмәнең тәме тәмле, үҙәк нервылар системаһына тынысландырғыс тәьҫир итә, шешеү процесын туҡтата, ашҡаҙан сей яраһы, гастрит һәм ҡатыуҙарҙан (колика) ҡулланыла.

❖ **Тимьян** (чабрец башкирский). Кейәү үләне менән бер төргә ҡарай, уны шулай уҡ кейәү үләне урынына ҡулланырға мөмкин. Ҡарағай урмандары ситендә үҫә.

**Атеросклероз һәм хәтер юғалтыу хәүефе булғанда ҡулланыр өсөн бер нисә үлән төрө тәҡдим итәм:**

❖ **шалфей** (үләне) - 30 өлөш, **йүкә** (сәскәһе) - 10 өлөш, **кесерткән** (үләне) - 10 өлөш, **ҡандала** (үләне сәскәләре менән) - 5 өлөш (протромбин юғары булғанда - 10 өлөш), **кейәү үләне** - 10 өлөш. 1 ҡалаҡ үләнгә ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡас менән ябып, төнәтергә. Һөҙөргә һәм ашар алдынан 30 минут алда йылы көйөнсә эсергә.

❖ **мелисса** (үләне) - 10 грамм, **ҡыр сәйе** (үләне) - 10 грамм, **энәлек** (сәскәләре йәки емеше) - 40 грамм, **юшан** (үләне) - 10 грамм, **ер еләге** (үләне) - 30 грамм. 1 ҡалаҡ үләнде 250 мл ҡайнар һыу менән төнәтеп, шәкәр йәки бал ҡушып эсергә. Бик тәмле, шуға ла был үләндәрҙе сәйгә ҡушып эсергә була.

❖ **клевер** (үләне сәскәләре менән) - 30 грамм, **боланут** (үләне сәскәләре менән) - 30 грамм, һары мәтрүшкә - 10 грамм, арыҫлан ҡойроғо (үләне) - 10 грамм, ҡайын (япрағы) - 10 г. 1 ҡалаҡ үләнгә 300 мл. ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, сәй урынына бал ҡушып эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ Рус телен боҙоп, башҡортсалап маташыу ике телгә лә ихтирам уятмаҫ. "Мамыңа әйт әле", "Папың өйҙәме?", "Мамыңдың хәле нисек?" тип һөйләшеү үҙендә лә, телендә лә кәмһетеү ул.



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ҡот ҡойоусы

**Тәңкә кеүек булып төшөү.** Ҡот ҡойғанда ҡурғаш бәғзе ваҡыт тәңкә кеүек булып төшә. Был осраҡта кешенең ҡото осмаған, ауырыуы башҡа сәбәптән, ауырыу эйәләренән, ен-шайтандан, тиҙәр.

**Һарыҡ йөрәге име.** Ҡот ҡойоп та, тауыҡ ултыртып та ҡото осҡан кеше ипкә килмәһә: "Бының ҡото ныҡ осҡан. Йөрәге урынынан тайған"', - тип, уға йөрәк ултырталар, һарыҡты сала һалып, күкрәген ярып, туҡтап та өлгөрмәгән йөрәген ала һалалар ҙа ҡото осҡан кешене салҡатан һалып, уға йөрәге тәңгәленә һарыҡ йөрәген ултырталар, һарыҡ йөрәге шиңгәнсе ултырырға тейеш.

**Ете төрлө үлән име.** Ҡото осҡан кеше оҙаҡ тәҙәлмәһә, уны ете төрлө үлән менән ыҫлайҙар.

## Ҡот әпсендәре

Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом!
Ишектән дә кил, тишектән дә кил,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом, кил, ҡотом!
Эйәләрең бында, ҡотом,
Ағын һыуҙай ағып кил,
Аҡ балыҡтай йөҙөп кил,
Эйәләрең бында, ҡотом,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом,
Ҡорайт, ҡотом, кил, ҡотом.
Ғазраил фәрештә! Килтер ҡотом!
Эйәң бында, эйәң бында -
Кил, ҡотом!
Айҙан килдең - айға кит,
Көндән килдең - көнгә кит,
Ерҙән килдең - ергә кит,
Елдән килдең - елгә кит!
Әй һин, ҡотом, кил, ҡотом,
Саҡырғанда кил, ҡотом,
Эйәһен табып бир, ҡотом.
Ҡотом әмере буйынса,
Ҡорҡот әмере буйынса.
Ҡорҡот атай, ҡотоң бир.
Түлкә атай, ҡотоң бир.
Ҡотом ҡайҙа - мин шунда,
Ҡотом ҡайҙа - мин шунда.
Ҡайт, ҡотом, ҡайт, ҡотом,
Ҡайт, ҡотом, ағып ҡайт -
Ағын һыуҙы йөҙөп сыҡ,
Гөлбикәнең ҡото осҡан.
Ҡамышлыҡты йырып сыҡ,
Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,
Кил, ҡотом, кил!
Мөрйәнән дә кил,
Ишектән дә кил,
Тишектән дә кил!
Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Ерҙән осһаң, ерҙән кил,
Эттән осһаң, эттән кил,
Малдан осһаң, малдан кил.
Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Ҡайт, ҡотом, ҡайт!
Ҡайҙа булһаң, шунан ҡайт!
Ни ҡояһың?
Ҡот ҡоям.
Ни ҡояһың?
Йөрәк эҙләйем.
Сәбәп минән булһын,
Сихәт Алланан булһын.
Көф-көф-көф!
Әгүҙү бил-ләһи минәш-шәйтанир-ражим,
Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,
Эй, Раббым!
Ошо ҡолонդо сәләмәтләндер!
Ошо ҡотто ҡойорға мәжбүр булдым.
Был бәндәнең килгән рәнйеүе китһен!

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Ун алтынсы һабаҡ: "Туған телгә һөйөү низән башлана?"



**Ғаиләлә туған телдә аралашыу, әкиәттәр һөйләү, йыр-моңдоң тәьҫире тураһында күп һөйләйбеҙ, күп аңлатабыҙ. Әммә баланың үҙ күҙҙәре менән күреп, күҙәтеп, өлгө алып тәрбиәләнер шарттары тураһында онотабыҙ, йәки иғтибарға алмайбыҙ.**

Балала китапҡа һөйөү тәрбиәләгән ғаиләлә, әлбиттә, бәләкәй генә булһа ла китапхана була. Китап кәштәләрендә башҡорт теләндәге китаптарҙың ҡайҙа, нисек урынлаштырылыуына мотлаҡ иғтибар итергә кәрәк. Баланың хәтерендә ҡала торған күренеш был. Магазиндан китап һайлағанда баланы иң элек башҡорт әҙәбиәте бүлегенә алып барыу ҙа ыңғай өлгө булыр.

Башҡорт телендәге матбуғатҡа яҙылыу һәм бала аңдарлыҡ мәҡәләләрҙе ҡысҡырып уҡыу йә йөкмәткеһен һөйләү, яйлап-яйлап гәзит-журналдар уҡыуға ылыҡтырыу ҙа үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен бирер.

Ә инде уҡыусы балаға дәрес әҙерләшергә ярҙам иткән ваҡытта, иң ауыр предмет, тип, математиканан түгел, ә туған тел дәресенән башлау яҡшы. Туған телдән дәрес әҙерләгәс, ял иттереп алып, ауыр бирелгән предметтарға тотоноу баланың рухи сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһар. Билдәле, рухи сәләмәтлектең физик сәләмәтлеккә лә, тәрбиәгә лә йоғонтоһо бик ҙур. Югиһә, ауыр бирелгән предметтар менән оҙон-оҙаҡ ваҡыт үткәреп, аңлатып, бала тамам арып йонсоғандан һуң ашығып-ашығып башҡорт теле дәресен әҙерләтеү йәки әҙәби әҫәр уҡытып маташыу һис кенә лә дөрөҫ түгел һәм был дәрестәргә ҡарата һөйөү тойғоһо тәрбиәләмәй.

Тәбиғәткә сыҡҡанда ағас, үлән, ҡош, ер-һыу атамаларын башҡортса әйтеү генә түгел, уның ни өсөн тап шулай аталыуын да аңлатыу балала уғата ҡыҙыҡһыныу уятыр.

Туғанлыҡ атамаларының да байлығын файҙаланырға кәрәк. Үҙенән оло йәки кесе туғандарына исеме менән йәнәш мотлаҡ туғанлыҡ атамаһын да ҡушып өйрәнһен бала.

Дуҫтары менән аралашҡан саҡтағы телмәренә иғтибар итеү ҙә кәрәк. Телмәр таҙа булырға тейеш.

- Рус телендә һөйләшкән саҡта башҡорт һүҙҙәре ҡушмайһың бит, шулай уҡ башҡорт телендә аралашҡанда ла рус һүҙҙәре ҡушмай, матур, ағымлы итеп һөйләш. Ике башҡорт балаһы үҙ-ара туған телендә һөйләшһә, телегеҙҙең дә, үҙегеҙҙең дә баһағыҙ ғына артыр. Телебеҙ бер телдән дә кәм түгел, уның байлығын файҙаланырға кәрәк, - тип өйрәтеү бала зиһененә һалына бара.

Рус телен боҙоп, башҡортсалап маташыу ике телгә лә ихтирам уятмаҫ. "Мамыңа әйт әле", "Папың өйҙәме?", "Мамыңдың хәле нисек?", "Был минең ывнугым", "Быныһы двоюродный племянигым", "Баламды бабушкыһына алып ҡайттыҡ", тип һөйләшеү үҙендә лә, телендә лә кәмһетеү ул. Бындай телмәрҙе ишетеү бала күңелендә һис кенә лә туған теленә һөйөү тойғоһо уятмаҫ.

Тимәк, балала телгә ҡарата һөйөү уятыу үҙеңдән, шәхси өлгөңдән башлана икәнлеген иҫтән сығармайыҡ.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ДӘРЕСЛЕК ТҮГЕЛ, ӨЛӘСӘЙЕҢ ХАҠЛЫ

**Былтырғы уҡыу йылынан башлап Рәсәй, шулай уҡ Башҡортостан мәктәптәрендә "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" предметы уҡытыла башланы. Предмет алты йүнәлештә төҙөлгән: "Православие мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Йәһүд мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Буддизм мәҙәниәте нигеҙҙәре", "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре", "Донъяуи этика нигеҙҙәре".**

Билдәле булыуынса, башҡорт мәктәптәре өсөн тәғәйенләнгән уҡыу программаһы буйынса эшләгән мәктәптәр өс йүнәлеште һайланы һәм Мәғариф министрлығы тәҡдиме менән тиҙ арала был өс йүнәлеш буйынса дәреслектәр тәржемә ителде. Әммә был өр-яңы предметты алып барыусы байтаҡ уҡытыусыларҙың әҙерлекһеҙ, уның бөгөнгө атай-әсәйҙәр өсөн дә ҙур яңылыҡ булыуын иҫәпкә алып, былтыр "Киске Өфө" гәзитендә һәр дәрес буйынса өс йүнәлештә өҫтәмә материалдар бирелде. Белеүебеҙсә, улар был предметты алып барыусы уҡытыусылар өсөн ҙур ярҙам булды, тик, ҡыҙғаныска ҡаршы, "Киске Өфө"нө алдырып уҡымаусы уҡытыусылар был материалдан мәхрүм ҡалды.

Байтаҡ уҡытыусылар предметтың ауыр булыуына, өҫтәүенә, "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"н дә русса уҡытырға тура килеүенә зарлана. Шуға уҡытыусыларға өндәшәм. Әгәр мәктәбегеҙ башҡорт мәктәптәре өсөн тәғәйен уҡыу планы менән эшләһә, башҡорт телендәге дәреслектәргә заказ бирҙереүгә өлгәшегеҙ. Юҡһа, ҡайһы бер мәктәп директорҙарының, Берҙәм дәүләт имтиханы биреүе ауыр, тип, туған телдәрҙе дәүләт теле булараҡ ҡына уҡытып, башҡа предметтарҙы русса уҡытыуға күсереүе билдәле булды. Күп башҡорт мәктәптәрендә хатта "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" предметы дәреслектәре лә рус телендә ҡайтарылған һәм башҡорт уҡыусыһы Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе - Мухамет, Ғәйшәне - Айша һәм башҡалар тип уҡырға мәжбүр икәнен беләбеҙ. Өләсәйе бәйғәмбәрҙәрҙең исемдәрен башҡортсалап тәҙәтһә, бала руссалап әйтә, өләсәйе менән бәхәсләшә икән. Бындай осраҡтар аҙым һайын хәҙер.

Ҡыҫҡаһы, был китаптарҙың башҡортсаһы бар, заказ бирел алдыртырға ғына кәрәк.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР!

# ИҢ ҘУР МӘРТӘБӘ... башҡортса йырлау



**Һеҙ һүрәттә күргән был ике һылыу ҡыҙ Наҙгөл Актаева менән Рената Ҡалмырҙина Өфө ҡалаһында тыуған. Әле улар 293-сө балалар баҡсаһына йөрөй, туған телдә йырларға, әкиәттәр сәхнәләштерергә, бейергә ярата.**

Ике һылыуҡай ҡуптән түгел баш ҡала балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре араһында үткән "Башҡортостан йондоҙсоҡтары" конкурсында "Башҡортостан, илгенәм" йырын башҡарып, уңышлы сығыш яһаны. Был конкурстың май айында баш ҡаланың Киров районында үткән этабында Гран-при ҙа яулағайны улар. Бындай уңышҡа, әлбиттә, туған телдә йыр йырлап өлгәштеләр. Ғөмүмән, матур милли кейемдәр кейеп, ҡала халҡын милли йыр-моңдарыбыҙ менән ҡыуандырыуҙы ҙур мәртәбә һанай Наҙгөл менән Рената. Үҫкәс, ике әхирәт тә йырсы булырға ниәтләнә. Кем белә, бәлки, беҙҙең алда киләсәктә ҙур әртис булып китер ҡыҙҙар ултыралыр...

Ә әлегә улар Өфө ҡалаһының 293-сө балалар баҡсаһына йөрөй, музыкаль етәкселәре Альбина Баймөхәмәтова үткәргән дәрестәрҙә музыка серҙәренә төшөнә. Альбина Ринат ҡыҙы әйтеүенсә, ҡыҙҙарҙың киләсәге бик яҡты булмаҡсы.

✓ **Беренсе хаттың ебәрелеү датаһы 1916 йылдың 29 октябре. Унда Мутиғулла ата-әсәһенә үҙенең әсирлеккә эләгеүе хаҡында хәбәр итә. Икенсе хатында ул ҡара икмәк, шәкәр, аҡса ебәреүҙәрен һорап яҙа.**

*ТАРИХ ШАҢДАУЫ*

# ТОТҠОН ХАТТАРЫ...

## хәҡиҡәт еткерә

**Ошо көндәрҙә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана хеҙмәткәрҙәре архивтар араһында дүрт открытка-хатҡа юлыҡты. Беренсе донъя һуғышы осоронда Цоссен лагерында әсирлектә булған һалдат яҙған был хаттар, ҙур күләмле булмаһалар ҙа, үҙҙәренең уникаллеге менән ҙур тарихи ҡиммәткә эйә. Китапхананың ҡулъяҙмалар һәм һирәк осрай торған баҫмалар бүлеге мөдире Гезикова Антонина Николаевна табылдыҡ хаҡында түбәндәгеләрҙе бәйән итте.**


Kriegsgefangenen-Sendung
Корреспонденція военнопленныхъ
Въ Россію
Адресъ отправителя: Германія
Военнопленному:
Личный № 106312
Фамилія
Имя
Отчество
Почтов. станція
Городъ
Село, деревня
Получатель
Стар. лаг. секторъ бар.
Нов. лаг. блокъ 3 баракъ 8
Квартира
Гаммерштейнъ.
Hammerstein.
Feldpostkarte.
Kriegsgefangenensendung
Zossen
Цоссенъ
Военный цензоръ № 2018
906 51
1916 года 25 го ноября Здравствуйте!

\- Хат-открыткалар китапхана архивтарын байҡаған ваҡытта ғәрәп телендә яҙылған китап эсендә табылды. Хаттар 1916-1917 йылдар менән даталанған. Улар Беренсе донъя һуғышы йылдарында Германия территорияһынан һуғыш әсирҙәре өсөн тәғәйенләнгән Цоссен лагерынан ебәрелгән. Әле үҙебеҙ тапҡан мәғлүмәттәргә ярашлы, мосолман халыҡтарынан булған тотҡондар өсөн төҙөлгән был махсус хәрби төрмәнең мәсете лә булған.

Хаттарҙың авторы Авзалитдинов Мутиғулла Кәшфетдин улы (шәхси номеры 106312, 3-сө лагерь блогы, 8-се барак). Ләкин уның ысын исем-шәрифе бер аҙ башҡасараҡ булыуы ла мөмкин. Лагерь ҡағиҙәләре буйынса, хат мотлаҡ надзирателдәр уҡый белгән телдә яҙылырға тейеш булған. Шуға ла хаттар яҙғанда урыҫ теле ҡулланылған. Мутиғулла үҙе урыҫ телендә яҙа белмәгән, күрәһең, быны хаттарҙың төрлө яҙыу менән яҙылыуынан сығып әйтергә була. Тотҡондоң һүҙҙәрен ҡағыҙға төшөрөүселәр үҙҙәре нисек ишеткән, шулай яҙған. Шул сәбәпле, тотҡондоң исеме лә төрлө хаттарҙа төрлөсә теркәлгән.

Хаттар Бәләбәй өйәҙенең Әгертамаҡ ауылына адресланған (бөгөнгө көндә был ауыл Туймазы районына ҡарай). Ул ваҡытта Әгертамаҡ почта станцияһына яҡын ҙур ғына ауыл булғандыр, тип фаразларға мөмкин. Исем-шәрифе төрлөсә яҙылһа ла, хат адресатына тиклем барып еткән.

Хаттар ҡәләм менән яҙылған. Шуға ла ҡайһы бер хәрефтәр юйылған. Тулыһынса юйылып бөтөүҙән открыткаларҙың китап эсендә ятыуы ғына һаҡлап ҡалған. Беренсе хаттың ебәрелеү датаһы 1916 йылдың 29 октябре. Унда Мутиғулла ата-әсәһенә үҙенең әсирлеккә эләгеүе хаҡында хәбәр итә. Икенсе хатында ул ҡара икмәк, шәкәр, аҡса ебәреүҙәрен һорап яҙа. Киләһе хатында ебәрелгән күстәнәс, аҡса өсөн рәхмәтен белдерә. Был ғәжәп күренеш. Сөнки ошо ваҡиғаларҙан һуң сирек быуат үткәс башланған дәһшәтле Икенсе донъя һуғышында бындай мөмкинлек бирелмәүе хаҡында яҡшы беләбеҙ. Хатта Советтар Союзы үҙ граждандары өсөн ойошторған ГУЛАГ лагерҙарында ла тотҡондарҙың туғандарына хат яҙа алыу мөмкинлеге булыуын, етмәһә, был хатта күстәнәс һорауҙарын, ебәрелгән күстәнәстең һәм аҡсаның тотҡонға тиклем барып етеүен күҙ алдына килтереп тә булмай. Беренсе донъя һуғышы йылдарында әсирҙәрҙең хоҡуҡтары Икенсе донъя һуғышы концлагерҙарындағы һәм ГУЛАГ лагерҙарындағы шарттарға ҡарағанда күпкә иреклерәк булған, тип әйтергә ҡала. Һис шикһеҙ, хат килеп еткәнсе бер нисә тапҡыр цензура үткән. Уларҙа "Хәрби цензура тарафынан асылды. Петроград. Хәрби цензор № ..." тигән мисәт тә бар. Цензура булғанға күрәлер, хаттарҙың йөкмәткеһе лә ярлы. Шуға ҡарамаҫтан, әсиргә туғандары менән аралаша алыу хоҡуғы бирелеүе үҙе күп нәмә хаҡында һөйләй.

1917 йылдың 20 авгусы менән даталанған һуңғы хатында Мутиғулла "Иҫән-һаумын, бар донъя көткәнде мин дә көтәм", тип яҙа. Был һүҙҙәр артында ул нимәне, һуғыш бөтөүенме, әллә башҡа нәмәнеме күҙ уңында тота, әйтеүе ҡыйын. Шулай ҙа ҙур булмаған, стандарт текстар менән яҙылыуҙарына ҡарамаҫтан, был хаттар уникаль һәм ҙур тарихи ҡиммәткә эйә. Улар беҙҙең яугирҙарҙың дошман лагерҙарындағы тормошо хаҡында мәғлүмәт бирә.

Яҡташыбыҙ тере ҡалғанмы, әллә юҡмы? Уға тыуған яҡтарына ҡайтырға насип булғанмы, әллә ғүмере ошо Цоссен лагерында өҙөлгәнме? Был беҙгә әлегә билдәле түгел. Шулай уҡ был раритеттарҙың нисек итеп китапханаға килеп эләгеүе хаҡында ла әйтеүе ҡыйын. Бәлки, ғәрәп яҙыуы менән яҙылған әлеге китап хәрби тотҡондоң туғандарының ғаилә китабылыр, беҙ белмәйбеҙ. Бөгөнгө көндә был кешенең туғандары ҡалыу- ҡалмауы хаҡында ла мәғлүмәтебеҙ юҡ. Туғандары ҡалырға тейеш, сөнки хаттарында ул ата-әсәһенән тыш, апай-ағайҙарына ла өндәшә. Бәлки, ул кешеләрҙең ейән-ейәнсәрҙәре бөгөн иҫәндер? Быны белеү бик тә ҡыҙыҡлы булыр, ошо хат-открыткалар ярҙамында бер кешенең яҙмышын күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итер ине...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**2014 йылда Беренсе донъя һуғышы башланыуға 100 йыл тула. Был егерменсе быуатта тиҫтәләрсә миллиондарҙың ғүмерҙәрен өҙәсәк ҡот осҡос һуғыштарҙың беренсеһе. Беҙҙең замандаштар, киләсәк быуындар ошондай хата эшләп ҡуймаһын өсөн барлыҡ мөмкин ысулдар менән беҙ аңлатыу, иҫкәртеү эше алып барырға бурыслыбыҙ. Әлеге хаттар ҙа, шул һуғыштың әҙемтәләрен иҫкәртеү маҡсатында, китапхана күргәҙмәләренә ҡуйыласаҡ, тинеләр беҙгә Милли китапхана хеҙмәткәрҙәре.**

**Редакция иһә Туймазы районы Әгертамаҡ ауылы кешеләренән әлеге мәҡәләлә телгә алынған кеше - Авзалитдинов Мутиғулла Кәшфетдин улы һәм уның нәҫел-нәсәбе тураһында ниндәй ҙә булһа хәбәр йә шылтыратыу көтөп ҡала.**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү



Аҙыҡҡа ҡулланыу алдынан башҡорттар игенде кәбәктән айырып, унан ярма яһаған, тарттырған. Тары, арпа, бойҙайҙы кәбәктән киләлә (**һүрәт**) төйөп айырғандар йәки бер тапҡыр ҡул тирмәнендә (**һүрәт**) тартҡандар. Ҡул йәки ағас тирмәне бер ваҡыт башҡорттарҙа киң таралған була. XX быуат башында инде кәмей, шулай ҙа уны һәр ерҙә осратырға мөмкин. Бындай тирмәндәр бейеклеге 25 сантиметр, диаметры 60-70 сантиметр булған ике ҡайын түмәрҙән эшләнгән. Тирмәндең аҫҡы өлөшөнә ағас йәки тимер кендек ҡуйылған, уға өҫкө өлөштә киң генә тишек тура килгән. Ике өлөштөң бер-береһенә тейеп торған өлөштәре ҡабырғаһы менән һәм ваҡлап ҡағылған суйындан торған. Тирмәндең аҫҡы өлөшө уртаға ҡарай ҡабарынҡы, ә өҫкөһө, киреһенсә, саҡ ҡына соҡорайған булған. Өҫкө өлөштөң бер ситенә бәләкәй генә ҡаҙыҡ-тотҡа урынлаштырылған. Ул өҫкө өлөш менән бергә эшләнгән, йәки айырым эшләнеп, нығытылып ҡуйылған. Ошо тотҡа ярҙамында тирмәнде әйләндергәндәр. Тирмән тартҡанда уның аҫтына быҙау йәки ҡолон тиреһе эс яғы менән киндер япма итеп һалынған. Тирмәндә игенде бер тапҡыр тартҡанда уның кәбәге айырылып, ярма барлыҡҡа килгән, ә он алыу өсөн игенде өс-биш тапҡыр тартырға тура килгән.



Ағас тирмәндән тыш, башҡорттарҙа бик йыш булмаһа ла, таш ҡул тирмәне лә осраған (**һүрәт**). Таш тирмәндәр ағас тирмәне кеүек уҡ ике яҫы таштан яһалған. Борон улар киң таралған булһа ла, бындай тирмәндәрҙе миңә бары тик тау башҡорттарында ғына күрергә тура килде. Башҡорттар йыш ҡына йәйләү йәки боронғо ауыл урындарын баҫыу итеп һөргәндә бөтөн йәки ватыҡ тирмәндәр тапҡан.



Тирмән тартыу менән бары тик ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнгән.

Ҡул тирмәндәренән башҡа, Башҡортостанда борондан һыу тирмәндәре - ябай "таҡыя" һәм "тәғәрмәсле" тирмәндәр ҙә булған. XVIII быуаттың беренсе яртыһындағы документтарҙан күренеүенсә, башҡорттар ерҙәренә татарҙарҙы индергәндә уларҙың да "таҡыя"-тирмәндәрҙе үҙҙәре тегәләгәнсә, ә инде тәғәрмәслеләрен бер йәки ике поставалы итеп төҙөргә хоҡуҡлы булыуҙарын билдәләгән.



"Таҡыя"-тирмәндәр ҡул тирмәне кеүек булған, әммә улар двигатель урынына һыу энергияһын ҡулланған (**һүрәт**). Бындай тирмәндәр XIX быуат һуңында Башҡортостан Ырымбурында осраған.

Башҡортостанда күп осраған ҙур һыу тирмәндәре билдәле рус тирмәндәренән бер нимәһе менән дә айырылмаған.

**Быйыл йәй башында Йылайыр районының Ҡәҙерша ауылы мәсете имам-хатибы, милләтебеҙ аҡһаҡалы Нуретдин олатай ИГЕБАЕВ редакциябыҙға шылтыратып, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтте: "Бик ныҡ ҡартайылды. Хәҙер тәнем өсөн йәшәмәйем дә һымаҡ, бары тик йәнем, телем һәм хәтерем генә тороп ҡала бара. Теге донъяға ҡасан күсеремде белә алмайым. Иҫән саҡта бер күрешәйек, Әхмәр улым. Васыят һымаҡ итеп әйтер һүҙҙәрем дә бар. Быйыл йәйҙән ҡалмай, ваҡыт табып бер килеп сыҡ әле..."**

**Нуретдин олатай Игебаевты гәзитебеҙҙе уҡып барыусылар бик яҡшы беләләр, тип ышанабыҙ. 2008 йылдың 36-сы һанында уның "Туфан яйлап ҡалҡа, унан дингә ҡайтып ҡына ҡотола алырбыҙ..." тигән әңгәмәһе баҫылғандан һуң, әйтергә кәрәк, рухиәтебеҙ донъяһында яңы дәүер башланғандай булды. Олатайҙың әңгәмәһе баҫылған гәзиттең был һанын, әле булһын, ксерокс аша күбәйтеп, халыҡ араһында ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыйҙар. Мәҡәлә урыҫ теленә тәржемә ителеп тә, башҡортсаһы ла айырым брошюраларҙа, шулай уҡ быйыл Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә сыҡҡан"Башҡортостан - әүлиәләр иле" тигән китапта донъя күрҙе.**

**Быйыл йәй сираттағы отпускыма сығыуымдың икенсе көнөндә үк Ҡәҙершаға барып еттем. Васыят әйтерҙәй хәлгә етеп, миңә шылтыратыусы Нуретдин олатай ҙа, әлхәмдүлиллаһ, яңы ғына Күгәрсен районының Мораҙым тарлауығы янындағы республика балалар "Байыҡ" фестиваленән ҡайтып төшөп тора, кәйефе ғәжәйеп көр ине. Унан: "Байрам нисек үтте, жюри составында булдығыҙмы?" - тип һорағайным, олатай: "Ғәжәп шәп үтте. Жюриһында ла булдым, балаларға фатиха ла бирергә тоғро килде", - тип яуапланы. Мине күргәс тә, һәр ваҡыттағыса, олатайҙың күҙҙәрендә осҡондар балҡыны. Үҙенә генә хас ихласлыҡ һәм ирәүәнлек менән һикереп-һикереп алды ул. Хәл-әхүәл һорашҡас, ваҡыт-ваҡыты менән туҡталып тороп, алдан уйланып йөрөп, күңелендә эркелгән һүҙҙәрен дә тышҡа сығарҙы олатай.**

## Олатайҙар һөйләгәне

Беҙ бала саҡта халҡыбыҙҙың боронғо тарихын бик яҡшы белеүсе олатайҙар була торғайны. Улар беҙгә шул тарихты һөйләп, күңелебеҙҙе үҫтерә, йөрәгебеҙгә дәрт һала ине. Хәҙер ундай ҡарттар юҡ. Уларҙың һөйләүенән башҡорт яугирҙәренең Рус-Төрөк һуғыштарында ҡатнашыуы һәм унда күрһәткән батырлыҡтары хаҡында бер нисә хәтирә күңелгә һеңеп ҡалған. Был тарих ҡарттарҙан ҡарттарға ҡала килгән, китаптарҙа ул яҙылмаған. Был һуғыштарҙа башҡорттоң аты ла, үҙе лә ҡарлы-ҡыразлы тауларҙы үткәреп ебәрә. Һуңынан бәһлеүән яурынын ысҡындырыу менән күпер емерелеп тә төшкән. Рус ғәскәре офицеры башҡорт яугиренең көсөн һәм тәүәккәл булыуын хуплап, уға көмөш тәңкә биргән. Яугир аҡсаны ҡулы менән ялпаштырып, командирға кире биргән. Аптырауға төшкән офицер уға алтын тәңкә һонған. Аты менән теге ярҙа тороп ҡалған яугир ошонан һуң үҙенең менге атын елкәһенә һалып, йылға аша алып сыҡҡан.

## Рәхмәтһеҙлек хаҡы

Атай-олатайҙарыбыҙҙың тарихтағы ошоға оҡшаш батырлыҡтары, тапҡырлыҡтары тула бер тапҡыр әйләнеп ҡайтырға мәжбүрмен: "Беҙ "Рәхмәт" һүҙенә үтә ябайлаштырып ҡарайбыҙ. Белгегеҙ килһә, "Рәхмәт" фатихаға торошло мөғжизәле, доғаға тиң һүҙ ул. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ был донъяла "Рәхмәт" өсөн генә йәшәйбеҙ. Юҡҡа ғына "Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр" тимәгәндәр. Бында рәхмәтте яулаған кеше хаҡында ғына һүҙ бармай, был һүҙҙе ваҡытында әйтә белеү ҙә бәндәне мең бәләләрҙән ҡотҡара. "Рәхмәт"те яулап ала белергә лә кәрәк. Был һүҙ ваҡытында һәм урынлы әйтелергә тейеш. Уны урынлы-урынһыҙ ҡулланыуҙың да, ваҡытында әйтә нафиҡлыҡ булып һаналасаҡ..."

## Ҡаһарманлыҡ сере

"Бөтә кеше лә ҡурҡа, тик алйот ҡына ҡурҡмай", тигән бер һүҙ бар. Был һүҙҙәргә мин дә ике ҡуллап ҡушылам. Ни өсөн тигәндә, һәр кемгә йәне ғәзиз, бер генә тапҡыр бирелгән ғүмере ҡәҙерле. Шуның өсөн дә ғүмерен юғалтыуҙан ҡурҡыу тойғоһо һәр кемдә бар. Беҙҙең ҡаһарман олатайҙарҙың үҙ йәнен аямайынса тыуған төйәгебеҙ - Уралтауыбыҙ өсөн көрәшеүе, Рәсәй дәүләте, совет ғәскәрҙәре сафында батырҙарса алышыуы, әлбиттә, уларҙың тыуған еребеҙҙе үҙ ры һәм башҡалар бөгөн атай-олатайҙарыбыҙҙың был ҡаһарманлығын баһаламай бит. Быңдай ҡаһарманлыҡ күрһәтеү беҙгә кәрәк булғанмы?" тип әйтеүселәр ҙә бар. Бер яҡтан ҡарағанда, улар хаҡлы ла һымаҡ, әммә ниңә Аллаһы Тәғәлә хаҡына килтерелгән ҡорбандарыбыҙҙы властар һәм башҡалар баһаларға тейеш һуң әле? Сөнки ҡаһарман олатайҙарыбыҙ үлемгә күҙ йомоп барған саҡта беҙҙе, тыуған еребеҙҙе, башҡаларҙы һаҡлау менән бер рәттән, иң беренсе нәүбәттә йөрәктәрендәге Аллаһы Тәғәләне лә һаҡлаған бит. Халҡыбыҙ ҡаһарманлығына Хаҡ Тәғәлә әллә ҡасан уҡ үҙенең баһаһын биргән, баһаламағандарға язаһын сығарған бит инде.

Тап шуның өсөн дә Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 180 йыл тулыуға арналған байрам сараларына килеүсе Солтан Мәхмәт шәйех юҡҡа ғына: "Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе бик һөйә. Мин һеҙҙең халҡығыҙҙың тарихын да бер аҙ беләм. Төрлө золомдарға, хаҡһыҙлыҡтарға ҡаршы баш күтәреп, һеҙҙең халҡығыҙ бик күп шәһит булған. Шул шәһитлектәрҙән һуң, бәлки, халҡығыҙҙың ундан бер өлөшө генә тороп ҡалғандыр. Халҡығыҙҙың үҙ еренә бәйлелеге ныҡ көслө булған. Аллаһтың ризалығы өсөн улар үҙҙәрен

# ВАҠЫТЫ-ВАҠЫТЫ

ҙарҙа йөрөргә түҙемле булып, иң хәл иткес мәлдәрҙә рус ғәскәрен һәләкәттән ҡотҡарып алып ҡалған, ти ине олатайҙар. Бер мәл рус ғәскәре шарлап-ярһып ағып ятҡан тау йылғаһына килеп төртөлә һәм туҡталып ҡала. Бер нисә рус һалдаты аттары менән һыуҙы аша сығырға ынтылып, йылғаға төшөп ҡарай, әммә ярһыу йылға уларҙы түбәнгә ҡарай ағыҙып алып китә. Шул саҡта башҡорт яугирҙәренең тәжрибәһе ярҙамында ғәскәр йылға аръяғына сығыуға өлгәшә. Башҡорт ғәскәре башлығы һәр бер башҡорт яугире эйәрендәге сылбыр арҡанды (атты арҡанлап ашатыу ебе) алып, шуларҙан йыуан арҡандар ишергә бойора. Арҡандарҙы йылға аша тарттырып, йыуан ағастарға бәйләгәс, уларҙың өҫтөнә һайғауҙар һалып, рус ғәскәре тиҙ арала теге ярға үтә. Башҡорттарҙың "шайтан күпере", урыҫтарҙың "чертовый мост" тигәне тап шул мәлдән килә. Хәҙер беҙ ундай баҫма-күперҙәрҙе аҫылмалы баҫма тип кенә атап йөрөтәбеҙ.

Тағы ла бер ваҡиға. Рус ғәскәре бер күпергә килеп төртөлгәс, күпер бағаналарының серегәне, пушкалар тағылған аттарҙы күтәрә алмаҫы асыҡлана. Шул мәл бер башҡорт бәһлеүәне күперҙе яурыны менән күтәреп тороп, пушкараһында олатайҙар тағы ла күп кенә хәтирәләр, хикәйәттәр һөйләй торғайны. Үкенескә күрә, рус ғәскәре тарихын яҙыусылар үҙҙәренең сафында иңгә-иң терәп көрәшкән, иң ауыр мәлдә терәк булған башҡорт яугирҙәре хаҡында һөйләмәй ҙә, яҙмай ҙа тиерлек, дөрөҫөрәге, күрмәмешкә һалыша. Былтыр 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығын Рәсәй һәм бар донъя кимәлендә билдәләгән саҡта ла Үҙәк телевидение, радио һәм гәзит-журналдары аша башҡорт яугирҙәренең ҡаһарманлығы хаҡында бер һүҙ ҙә булманы. Рәсәйҙең рәсми органдары ла был йәһәттән тарихи ысынбарлыҡҡа битарафлыҡ күрһәтте. Был осраҡта "Киске Өфө"нөң 2008 йылдың 36-сы һанындағы "Туфан яйлап ҡалҡа, унан дингә ҡайтып ҡына ҡотола алырбыҙ..." тигән әңгәмәмдәге бер фекергә тағы

## Аллаһы Тәғәләгә еткереп

белмәүҙең дә зыяны бар. Сөнки барыһын да Аллаһы Тәғәлә күреп тора, рәхмәтһеҙҙәргә язаһын биреп тора.

Ошо һүҙ йәһәтенән башҡорттар Урал төбәгендәге иң рәхмәтле халыҡтыр. Күпме халыҡ вәкилдәрен суҡындырыуҙан, крепостнойлыҡ ҡоллоғона төшөүҙән, аслыҡ-яланғаслыҡтан, ҡырылып бөтөүҙән йолоп ҡалған, үҙ еребеҙгә һыйҙырған милләт беҙ. Әммә йәненән артыҡ һөйөүенән, уны юғалтырға теләмәүҙән киләләр.

Был, һис һүҙһеҙ, шулай, әммә тағы ла төптәрәк ятҡан инаныу - ул илаһи көскә, Аллаһы Тәғәләгә ышаныуға һәм табыныуға бәйле. Ни өсөн

*Шәйехтең был һүҙҙәренән шуны аңлайым: ун башҡорттоң туғыҙы Аллаһы Тәғәлә өсөн йәнен һалған, тыуған ерен дә, динен дә бирмәгән. Кәмеһә - кәмегән, үлһә - үлгән, әммә Аллаһы Тәғәлә өсөн үлгән. Солтан Мәхмәт шәйех беҙгә килеп, үҙебеҙҙең кем икәнлекте аңлатып, башҡалар алдында беҙҙең милләткә хаҡ баһаһын биреп китте. Беҙ, йүғиһә, ни дингә килмәй, ни байлыҡ тупламайса, аҙашып, таралып бөтөп бара инек. Ә бит шәйехтең һүҙҙәрендә беҙҙең милләткә киләсәктә программа, йәшәү ҡануны булыр мәғәнә ята. Тик ошо һүҙҙәрҙе аңлап, йөрәге менән ҡабул итеп, милләтебеҙҙең күҙе асылырға ғына тейеш.*

"Рәхмәт" һүҙенән бигерәк, күберәк әр һүҙҙәре, беҙҙе кәмһетергә тырышыусыларҙың нахаҡ яҡмаларын, уйҙырма фәлсәфәһен дә ишетергә тура килә. Әлбиттә, "Рәхмәт"те һорап алмайҙар, әммә рәхмәтле булмағандар барыбер Аллаһы Тәғәлә хөкөмөндә. Рәхмәтле булмаған хет мең тапҡыр хажға барһын, шәриғәт ҡанундарын теүәл үтәп йәшәһен, уның был ғәмәлдәре барыбер ҙә мотигәндә, тик Аллаһы Тәғәләгә табынған һәм унан ҡурҡҡан ғына башҡа бер кемдән дә, бер нәмәнән дә ҡурҡмай, ундайҙар үҙ ғүмерен биргән саҡта ла, быны Аллаһы Тәғәлә хаҡына ҡорбан итә.

Халҡыбыҙ ҡаһарманлығының төп сере, минеңсә, тап ошонда ятаЛыр.

Үҙебеҙҙең арала "Ниңә шул тиклем ҡорбан биреп, Рәсәй өсөн һуғышҡанбыҙ, ниңә танктарға ҡаршы ҡылыс болғап барғанбыҙ? Рәсәй властааямаған, йәндәрен Аллаһҡа тапшырған..." - тип әйтмәне.

Шәйехтең был һүҙҙәренән шуны аңлайым: ун башҡорттоң туғыҙы Аллаһы Тәғәлә өсөн йәнен һалған, тыуған ерен дә, динен дә бирмәгән. Кәмеһә -кәмегән, үлһә - үлгән, әммә Аллаһы Тәғәлә өсөн үлгән. Солтан Мәхмәт шәйех беҙгә килеп, үҙебеҙҙең кем икәнлекте аңлатып, башҡалар алдында беҙҙең милләткә хаҡ баһаһын биреп китте. Беҙ, йүғиһә, ни дингә килмәй, ни байлыҡ тупламайса, аҙашып, таралып бөтөп бара инек. Ә бит шәйехтең һүҙҙәрендә беҙҙең милләткә киләсәктә программа, йәшәү ҡануны булыр мәғәнә ята. Тик ошо һүҙҙәрҙе аңлап, йөрәге менән ҡабул итеп, милләтебеҙҙең күҙе асылырға ғына тейеш. Кеше үҙүҙенә дөрөҫ баһаны бирә алмауы ла бар. Ә күптән көтөлгән баһа, Аллаға шөкөр, ситтәр тарафынан бирелде. Беҙҙе ике уртанан, аңһыҙлыҡ менән динһеҙлек урталығынан сығыу өсөн Аллаһы Тәғәлә Солтан Мәхмәт шәйехте илсе итеп ебәрҙе.

## Зар итеү

Беҙ ни тиклем Хоҙайға һығынһаҡ, Уны ҙурлаһаҡ, Уның

***✓ Халҡыбыҙҙың доға кеүек сихри бер көскә эйә ул "Урал" йыры. Унда аңлатып булмаҫлыҡ хозурлыҡ, беленмәгән ҡөҙрәт бар. Шуға күрә лә уны башҡарыу өсөн тауыштан бигерәк күңел һәм йөрәк көсө кәрәк тиҙәр. Дөрөҫтөр.***



ярҙамына өмөт итеп, бойороуын үтенһәк, Ул да беҙгә һығына, ҙурлай һәм үтенесебеҙҙе тормошҡа ашырырға үҙенең бойороғон бирә. Мин дә бына дүрт класс ҡына уҡыным, диндән дә уҡымышым юҡ, әммә Аллама зар итеп йәшәгәнгә күрә лә, Ул бер ваҡытта ла мине үҙенең ярҙамынан ташламай. Шуның өсөн дә беҙгә юғалып ҡалмаҫ өсөн дин юлында булыу фарыз. Әле бына ошо һүҙҙәрҙе һөйләп ултырам, тик мине Хоҙай Тәғәлә һөйләтә, минең телем аша үҙенең фекерҙәрен әйттерә.

Беҙ ҡайғырабыҙ, көйәләнәбеҙ, үҙебеҙҙең зарыбыҙҙы Аллаһы Тәғәләгә ишеттереп, унан ярҙам һорайбыҙ. Яңыраҡ Башҡортостанда ер тетрәне. Тап шул мәлдә мин дә тетрәнеү тойғоһо кисерҙем. Уны күптәр һиҙмәй ҙә ҡалды шикелле. Шул саҡта эй иланым, ни ҡылырға белмәйенсә тәкәтем ҡороно. Үҙемдең борсолоуҙарымды ҡайһы бер иптәштәргә еткерҙем. Шунан күмәкләшеп Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тыуған көнө уңайынан аят уҡытырға булдыҡ. Бының өсөн Нарыҫтауҙағы мәсеткә йыйылдыҡ. Шунда аят уҡыныҡ, доға ҡылдыҡ, бер айлыҡ пенсиямды хәйер итеп тараттым һәм ошонан һуң ғына күңелемә тыныслыҡ килде. Бының менән нимә әйтергә теләйем: беҙгә ваҡыты-ваҡыты менән зарыбыҙҙы Аллаһы тәүҙә тәүбәгә килергә кәрәк. Тәүбәгә килеүең бер үк ваҡытта Хоҙайҙан һорау менән дә бер. Тәүбәгә килмәйенсә, рәхмәтһеҙ көйө һорауыңды Ул ҡабул итмәй. Тәүбәһеҙ, рәхмәтһеҙ көйө бары тик ихласлыҡ менән һорау ҙа ярҙам итмәй бында. Сөнки ихлас кешенең дә ауыр гонаһтары булыуы бар бит әле. Мин ҡайһы ваҡыт йөҡлар алдынан Хоҙайға мөрәжәғәт итеп, Унан бала тыуған илен, ерен, туған телен ҡәҙер иткән кеше. Үҙендә булмаған ҡәҙерҙе башҡаға биреп булмаған кеүек, үҙ-үҙен яратмаған кеше башҡаларҙы ла ярата алмайҙыр. Былар барыһы ла имандың, диндең нигеҙен тәшкил итә. Бынан нимә килеп сыға: Аллаһы Тәғәләне ҡәҙер иткән кеше генә ҡәҙерле була ала. Үҙенде ихтирам итһәң, Аллаһы Тәғәлә һине икеләтә ихтирам итә.



ҙы һаҡлар өсөн яуға ташланған, походҡа сыҡҡан, "Урал" йырын тыңлап, атай-олатайҙарыбыҙ ил яҙмышын хәл итер кәңәш ҡорор булған.

Олатайҙар һөйләгән хикәйәттә күршеләш йәшәгән ҡаҙаҡтар менән башҡорттарҙың аралашып йәшәүе хаҡында ла әйтелә ине. Бер мәл ҡаҙаҡтар үҙҙәренең батырын сынйыр менән уратып бәйләп, ярһыулығын тышҡа сығарып, сынйөсөнсөгә ынтылған ҡаҙаҡ, һәм тағы ла шул уҡ хәл ҡабатланған. Бер кемгә лә бил бирмәгән ҡаҙаҡ батырының шулай тиҙ генә башҡорт батырынан еңелеүен бер нисек тә аңлай алмаған ҡаҙаҡтар ахырҙа шундай фекергә килгән: "Был истәктәрҙә ниндәйҙер аңлатып булмаҫлыҡ сихри көс бар, уларҙың көс бирә торған йыры бар. Беҙгә шул йырҙы оторға кәрәк..."

Әммә ҡаҙаҡ көйсөләренең думбыраһына, дала фиғеленә ята буламы һуң "Урал" йыры. Ошонан һуң ҡаҙаҡтар башҡорт көсөнөң ҡөҙрәте Уралтауға һәм ошо йырға бәйле булыуын тамам аңлаған. Ҡаҙаҡтар аңлаған да ул, башта әйткәнемсә, үҙебеҙ бөгөн быны аңлайбыҙмы, "Урал" кеүек йырҙарыбыҙҙың әһәмиәтен аңлап бөтөрәбеҙме икән? Был йырҙағы илаһи көстө, ҡөҙрәтте, тик илаһи юғарылыҡта ғына аңлашылған хикмәтте аңлап, мәнфәғәтен күреп йәшәһәк икән. Уны башҡа бер халыҡ та башҡорт кеүек йөрәге менән тоя алмаясаҡ, шуға уны аңлау һәм тойоу һәләте Аллаһы Тәғәлә тарафынан тик беҙгә генә бирелгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нуретдин олатай менән оҙаҡ та һөйләшеп ултырманыҡ кеүек. Әммә шулай булһа ла, ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ул миңә бик күп мәғлүмәт биреп**

# МЕНӘН ЗАРЫБЫҘҘЫ...

## торорға кәрәк

Тәғәләгә еткереп торорға кәрәк.

Зар итеүҙең мәғәнәһенә килгәндә, ул ысын күңелдән, бар йөрәктән Хоҙай Тәғәләгә өндәшеүҙе, Уға бирелеп ялбарыуҙы, Унан ярҙам һорауҙы аңлата. Күптәр Аллаһы Тәғәләнән нимәнелер һорай һәм һорағанын Ул бирер тип өмөт итә. Ә бит Хоҙай бер нәмәне лә бирмәй, ә бойора. Һораған бер нәмәнде бирергә Хоҙай мәрхәмәтлек фонды түгел. Шуға күрә күптәр "Алла бойорһа" тип әйтеү урынына "Алла бирһә", тип әйтеп яңылыша. Хоҙайҙың бойороуы бер үк ваҡытта бәндәнең үҙенә лә сәбәп ҡылыу, сөнки Ул бәндәнең һорағанын үтәүсе итеп бәндәнең үҙен билдәләп, уға барлыҡ мөмкинлектәрҙе асып, сәбәп ҡылырға бойора һәм был эшкә фатихаһын бирә. Хоҙай бирмәй, ә һораған ғәмәлде үтәргә бәндәһенә бойора, шуға күрә тик лайыҡлылар, тик тырыштар, тик Хоҙайға тоғролар ғына һорағанына өлгәшә. "Хоҙайға ышан, әммә үҙең дә хата ебәрмә" тиҙәр бындай саҡта урыҫтар.

### Тәүбәгә килеү

Хоҙайҙан нимәнелер һорар алдынан, гонаһтарың булһа, сағалар, донъялар именлеген, мал-тыуарымдың бәрәкәтен һорайым да, төн уртаһында уянып китәм. Кире йоҡлап булмай, ҡураға сыҡһам, баҡтиһән, һыйырым быҙаулап йә һарығым бәрәсләп тора. Бер мәл хатта ҡыҫыр ҡалғандыр, тип иҫәпләп йөрөгән һыйырыбыҙ ҙа быҙауланы.

### "Урал" йырының көсө

Хәҙерге ваҡытта башҡорт халыҡ йыры "Урал" сәхнәләрҙән һәм радио, телевидение аша бик һирәк башҡарыла. Хатта йылдар буйына мин ул йырҙы ишетә алмайым. Дөрөырын сыңлатып, был юл менән башҡорт көрәшселәренә психик атака яһай-яһай, ике халыҡ тарафынан ойошторолған байрам майҙанына алып килгән. Килеп еткәс, ҡаҙаҡ батыры майҙан уртаһына ултырған. Был хәлдә күргән башҡорт батыры ҡурайсыларҙан һәм йырсыларҙан халҡы-

> ***Зар итеүҙең мәғәнәһенә килгәндә, ул ысын күңелдән, бар йөрәктән Хоҙай Тәғәләгә өндәшеүҙе, Уға бирелеп ялбарыуҙы, Унан ярҙам һорауҙы аңлата. Күптәр Аллаһы Тәғәләнән нимәнелер һорай һәм һорағанын Ул бирер тип өмөт итә. Ә бит Хоҙай бер нәмәне лә бирмәй, ә бойора. Һораған бер нәмәнде бирергә Хоҙай мәрхәмәтлек фонды түгел. Шуға күрә күптәр "Алла бойорһа" тип әйтеү урынына "Алла бирһә", тип әйтеп яңылыша. Хоҙайҙың бойороуы бер үк ваҡытта бәндәнең үҙенә лә сәбәп ҡылыу, сөнки Ул бәндәнең һорағанын үтәүсе итеп бәндәнең үҙен билдәләп, уға барлыҡ мөмкинлектәрҙе асып, сәбәп ҡылырға бойора һәм был эшкә фатихаһын бирә. Хоҙай бирмәй, ә һораған ғәмәлде үтәргә бәндәһенә бойора, шуға күрә тик лайыҡлылар, тик тырыштар, тик Хоҙайға тоғролар ғына һорағанына өлгәшә. "Хоҙайға ышан, әммә үҙең дә хата ебәрмә" тиҙәр бындай саҡта урыҫтар.***

### Ҡәҙер итеү

Донъялыҡта бер кеше лә үҙенән-үҙе ҡәҙерле була алмай. Биләгән вазифаңа ҡарап, һин хөрмәтле лә булырға мөмкинһең, әммә ҡәҙерле булыуыңдың сере үҙеңдә ята. Ҡәҙерле булыуҙың асҡысы башҡа кешене ҡәҙер итә белеүеңдә. Шул уҡ ваҡытта кем башҡаны ҡәҙер итә ала һуң? Дөрөҫ, үҙ-үҙен, ата-әсәһен, туғандарын, ҫөн әйткәндә, зарығып, һағынып йәшәйем мин был йырҙы. Халҡыбыҙҙың доға кеүек сихри бер көскә эйә ул "Урал" йыры. Унда аңлатып булмаҫлыҡ хозурлыҡ, беленмәгән ҡөҙрәт бар. Шуға күрә лә уны башҡарыу өсөн тауыштан бигерәк күңел һәм йөрәк көсө кәрәк тиҙәр. Дөрөҫтөр.

"Урал" йырын ишетеп, атай-олатайҙарыбыҙ Уралтауыбыҙбыҙ йыры "Урал"ды йырлауҙарын үтенгән. Батырҙы ситкәрәк алып китеп һорауын үтәгәндәр. Йыр башҡарылған.

Ошонан һуң был көрәше башланған. Башҡорт батыры ҡаҙаҡ батырын алып ташлаған. Ергә тәкмәсеп сәмләнгән ҡаҙаҡ, алыш ғәҙел булманы, тип ярһып, башҡорт батырына тағы ла ташланған һәм тағы ла ергә һөрлөгөп барып төшкән. Алыш өстән, тигәндәй,

**өлгөрҙө. Күп кенә фекерҙәрен кинәйә, ишара рәүешендә генә еткерҙе ул. Баҡтиһән, Нуретдин олатай үҙҙәренең төбәгендәге Хәйбулла районының Ырыҫбай ауылындағы Әбделмән атлы егет менән Көнһылыу исемле ҡыҙҙың сафтан-саф мөхәббәте хаҡында ҡиссаны ла күңелендә һаҡлап йөрөтә икән. "Пьеса яҙырға ине. Үҙем ни ҡултамға ла һалырлыҡ грамотам булмағас, уны яҙалмаҫмын инде", тип аптыратты олатай. Үҙе яҙа белмәһә лә, улына әйтеп тороп, ошо шиғырҙы ла яҙҙырған ул:**

*Шөкөр инде Хоҙайыма*
*Күрһәткәнгә ҡәҙер.*
*Шуға күрә үлемдән дә*
*Ҡурҡмайым мин хәҙер.*
*Илем, халҡым, ерем*
*Киләсәген аяп.*
*Өлөшлө лә бәндәләрҙән*
*Уҡыттырҙым аят.*
*Ниндәй бөйөк кешеләрҙе*
*Аҙаштыра шайтан.*
*Нисек кенә тырышмаһын*
*Була алмаҫ солтан.*

*Кеше ғүмерҙәре шулай*
*Тиҙ-тиҙ үтә, китә.*
*Тик яҡшылыҡ эшләүҙәргә*
*Нимә икән етә?*
*Рәхмәтле лә булыуҙарың*
*Үҙе оло байлыҡ.*
*Ожмахтың тап түрҙәренә*
*Улар ғына лайыҡ...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

***✓ Иртәгәһенә Ғамирҙы мәктәпкә саҡыртып алдылар. Директор бүлмәһендә, унын үҙенән һәм Әсмә апайҙан тыш, МТС вәкиле ултыра ине. Барыһының да йөҙҙәре етди, Әсмә апай ниңәлер илағанға оҡшаған.***



**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН**

# ТАРТАЙ

(Хикәйә)



Был ниндәй татлы хәбәр? Ҡәҙимге һүҙҙәрҙән торған ябай ғына өс һөйләм. Ләкин улар кем ауыҙынан сыға ла, кемдең ҡолағына тәғәйенләнә бит! Эйе, был һүҙҙәр кластың ғына түгел, ә бөтә мәктәптең тиңһеҙ һылыуы Сафура ауыҙынан сыҡты. Улар башҡаға түгел, ә нәғеҙ Ғамирға төбәп әйтелде. Ошонан да ҙур ҡыуаныстың булыуы мөмкинме? Тимәк, Сафураның да күңеле Ғамирға тартыла. Ура!..

"Күңелендә ни булғанын белергә ине, - тип уйланы Ғамир, тәҙрә эргәһендәге парта артында мыштым ғына ултырған Йәүҙәткә ҡарап алғандан һуң. - Ух, аҫтыртын!.." Ҡараһаң, ҡарамаһаң да, унын уйы билдәле инде: нисек булһа ла Сталин тураһындағы шиғырҙы Ғамирҙан алдараҡ яҙыу һәм бөтә мәктәп алдында шәп булып күренеү. Бигерәк тә Сафура алдында. Юҡ, быға һис тә юл ҡуйырға ярамай! Шиғырҙы Йәүҙәттән алдараҡ яҙмаһа, унын исеме Ғамир булмаһын!..

* * *

Әйткән һүҙ - атҡан уҡ: Ғамир иртәгәһенә үк шиғырҙың яҙылыуы тураһында Әсмә апайға йәүкә һалды. Йөкләмәнең шулай тиҙ үтәлеүенә ҡыуанған уҡытыусы уны һәм Павлик Морозов исемендәге дружина советы рәйесе Әкрәмде эйәртеп, мәктәп директоры бүлмәһенә барып инде. Әсмә апай директорға эштең асылын аңлатып биргәс, өсәүләшеп шиғыр тыңларға әҙерләнделәр.

-Йә, тыңлайбыҙ, - тине Әсмә апай. - Ҡысҡырып, ҡабаланмай һөйлә, йәме.

Ғамир күтәренке тауыш менән "Сталинға!" тип иғлан итте лә, тулҡынланыуҙанмы, мәлдең мөһимлегенә баҫым яһарға теләүҙәнме, тамағын ҡырғылап алғандан һуң, яҙған шиғырын һөйләргә кереште:

*Даһи Ленин һыҙған оло юлдан*
*Етәкләйһең беҙҙе оҫта һин.*
*Яҡты тормош*
*күрһәткәнең өсөн,*
*Рәхмәт һиңә, бөйөк Сталин!*
*Ҡәләм бирҙең, ҡағыҙ,*
*дәфтәр бирҙең,*
*Китап бирҙең беҙгә уҡырға.*
*Бәхет бирҙең, бөтмәҫ*
*шатлыҡ бирҙең,*
*Азат иттең ғүмер-ғүмергә.*
*Мәктәп ишеген астың*
*беҙҙең өсөн,*
*Уҡыу, ялға бирҙең мөмкинлек.*
*Оҙаҡ йәшә, даһи, оҙаҡ йәшә,*
*Бәхет биргән өсөн мәңгелек.*
*Һин күтәргән байраҡ*
*аҫтында беҙ*
*Еңеү тауҙарына үрләрбеҙ.*
*Илгә ҡайғы һалып, үлеп китһәң,*
*Сәскәләргә сорнап, ерләрбеҙ.*

Шиғыр тамамланғас, бүлмәлә бер аҙға тынлыҡ урынлашты. Ғамир үҙенең ижад емешенә ҡарата маҡтау уҡ булмаһа ла, хуплау һүҙе көткән Әсмә апай ниңәлер башын түбән эйҙе, мәктәп директоры мәғәнәле итеп тамағын ҡырып ҡуйҙы. Шунан ул төрлөсә аңларға мөмкин булған тауыш менән:

- Дә-ә-ә... - тип һуҙҙы.

Ниһайәт, Әсмә апай телгә килде:

- Ғамир, шиғырыңдың аҙағында бигерәк ашыҡҡанһың түгелме?

Әкрәм, үҙенең вазифаһына һәм Павлик Морозов исемендәге пионер дружинаһының идеалына ярашлы, аяуһыҙ ҡәтғилек менән тура ярҙы:

- Бындай юлдарҙы фәҡәт халыҡ дошмандары ғына яҙа ала. Был - тере юлбашсыға үлем теләү менән бер!

Әле генә илһамланып шиғыр уҡып торған Ғамирҙың өҫтөнә һалҡын һыу һиптеләрме ни! Бигерәк тә Әкрәмдең хөкөм ҡарарына тартым һүҙҙәре күңелен шомландырҙы. Әсәһе әйтмешләй, Алла һаҡлаһын! Кешеләрҙең элегерәк ОГПУ, хәҙер инде НКВД тип аталған дәһшәтле ойошманан дер ҡалтырап торған сағы. Шул айҡанлы ауылда яңыраҡ бер ләҡәп тә таралғайны. Имеш, Ихсан ағай менән Бәҙерниса апайҙың иң бәләкәй малайҙары нимәгәлер мыжып, илай ҙа илай икән. Әсәһе, уны тымыҙырға була: "Ана, бабай килә!" - тип тә, "Урыҫ килә ята, хәҙер биреп ебәрәм үҙенде!" - тип тә ҡурҡытып ҡарай, ләкин малай оторо мыжый. Ахырҙа, унын мыжыуынан ялҡҡан Бәҙерниса: "Шым, ана, НКВД килә!" - тигәс, сабый илауынан шып туҡтай.

Шулай ҙа, был юлы яҙмыштың Ғамирға ҡарата рәхимле мәле тура килде, ахырыһы, сөнки мәктәп директоры һиҙелерлек булып кәмегән һәм шуға ла уғата шомло яңғыраған тауыш менән:

-Был шиғыр йоратын һин яҙманың, ә беҙ ишетмәнек, - тине. Директорҙың "яҙманың" тигәнен "был шиғыр шәрәмәтен йыртып ташла" тип, ә "ишетмәнек" һүҙен әйткән саҡта ҡарашын Әкрәмгә күсереүен "ауыҙыңды биктә тот" тип аңларға була ине.

* * *

Көн артынан көн үтә торғас, Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһының сираттағы йыллығы ла килеп етте. Иртәгә байрам тигән көндөң кисендә Ҡыҙылъяр ауылы халҡы клубҡа эркелде. Олоһо ла, кесеһе лә концерт тамашаһын ҡарарға ашҡына ине. Ҡайһы берәүҙәр хатта үҙҙәренең ултырғыстары менән килгән, сөнки бындай байрам сараларында клубҡа шығырым тулған халыҡҡа урын етешмәй. Мәсетте төҙөгән бабайҙар унын ҡасандыр бер ваҡыт клубҡа әүерелерен һәм унда, мәхшәргә йыйылғандай, ауылдың йәше-ҡарты мыжғып килеп тулырын ҡайҙан белһен? Белһәләр, әлбиттә, ҙурыраҡ итеп төҙөрҙәр ине.

Башта мәктәп директоры, шаршауы ябылған сәхнәнең бер яҡ ситендәге трибуна артына баҫып, революцияның донъя кимәлендәге әһәмиәте тураһында ялҡынлы доклад һөйләне. Концертты башлап ебәрергә тип хорға теҙелгән уҡыусылар, бигерәк тә малайҙар, үҙ-ара шаярышып торғанға күрә, директорҙың һөйләгәндәренә иғтибар итмәй. Бына, докладтың тамамланыуын белдереп, залда ултырыусыларҙың дәррәү алҡыштары яңғыраны. Унын артынса ике уҡыусы шаршауҙы ике яҡҡа айырып, асып ебәрҙе. Байрамса кейенгәнлектән, уғата матур булып күренгән Сафура, сәхнә алдына сығып, тәүге номерҙы иғлан итте:

-Сталин тураһында башҡорт халыҡ йыры! Ҡыҙылъяр ете йыллыҡ мәктәбенең уҡыусылар хоры башҡара!

Ябылып бөтмәгән шаршау артында ултырған Әсмә апай, мандолинала йырҙың көйөн уйнай биребирәк, башы менән ымлауға, уҡыусылар башҡарыуында юлбашсы тураһындағы тантаналы йыр яңғыраны:

*Көмөш кенә һыулы*
*сылтыр шишмә*
*Ағып ҡына төшә йылғаға.*
*Даһи Сталин беҙҙе*
*алып сыҡты*
*Ҡараңғынан яҡты донъяға…*

Йыр тамам булғас, шаршау киренән ябылды, тап та топ килгән уҡыусыларҙың бер өлөшө сәхнә ҡабырғаларына теҙелеп баҫты, ә ҡыҙҙар бейеүгә тип әҙерләп ҡуйған күлдәктәрен кейер өсөн сәхнә төпкөлөндәге кескәй бүлмәгә ашыҡты. Һәр төрлө шиғырҙы тасуири итеп оҫта һөйләүсе Заһиҙә, шаршауҙар араһынан сәхнә алдына сығып баҫты ла, Ғ. Сәләмдең "Республика иртәһе"н һөйләргә тотондо. Тап шул саҡта Әсмә апайҙың шыбырлауға тартым борсоулы тауышы ишетелде:

- Малайҙар, ҡыҙҙар! Кемдең әҙер йыры бар?.. Алтынбикә күлдәген онотоп ҡалдырған, әле өйөнә йүгерҙе. Ул килеп еткәнсе, сығып йырларға кәрәк, юҡһа, өлгөрмәйҙәр!..

Ғамирҙың ҡолағы "ҡарп" итеп ҡалды. Шиғыр менән килеп сыҡмаһа ни, йыр менән алдырырға була бит. Халыҡ алдында һәләтеңде күрһәтер өсөн бынан да уңайлы мәлдең булыуы мөмкин түгел! Бигерәк тә Сафура алдында. Һәм Ғамир тәүәккәлләне:

- Апай, мин йыр беләм!

- Вәт, маладис! - тип ҡыуанып китте Әсмә апай. - Ниндәй йыр?

- "Ҡыҙыл командир". Граждандар һуғышы тураһында...

- Яҡшы, - тип уны бүлдерҙе уҡытыусы һәм Сафураға ҡарап дауам итте: -Шаршау асылғас, Ғамирҙың йырын иғлан итерһең.

Бер аҙҙан Заһиҙә шиғырын һөйләп бөттө, шаршау асылды. Сафура киләһе номерҙы иғлан итте:

-Башҡорт халыҡ йыры "Ҡыҙыл командир"! Алтынсы класс уҡыусыһы Ғамир Кинзин башҡара!

Ғамир сәхнә уртаһына сығып баҫты. Абау, унын бер үҙенә нисәмә күҙ төбәлгән! Ул тәүге мәлдә бер аҙ баҙап ҡалды хатта. Эйе, был күмәкләп хор менән йырлау түгел икән. Унда яңылышып-фәлән китһәң дә, һиҙелмәй. Ә яңғыҙыңа?.. Шулай ҙа Ғамир ҡаушауын һиҙҙермәҫкә тырышып, бөтә иғтибарын туплап, Зәлифә апаһы өйрәткән һәм көйө бәйеткә тартымыраҡ йырҙы башланы:

*Муйыл ап-аҡ сәскә атҡан*
*Сыуаҡ бер көндө,*
*Ат уйнатып, бер ауылға*
*Һыбайлы килде.*
*Тыуған ауылына ҡайтты*
*Ҡыҙыл командир -*
*Билдәрендә булат ҡылыс,*
*Өҫтөндә - мундир.*
*Өйҙә уны ҡаршы алды*
*Өлкән ағаһы -*
*Аҡтар яғында һуғышып*
*Йөрөгән ағаһы.*
*Көрәшергә һуҙылған ҡул*
*Шул килеш ҡалды.*
*Ҡыҙыл командир ҡынынан*
*Ҡылысын алды:*
*"Колчак ялсыһынан сәләм*
*Алмайым, - тине, -*
*Һин - хас дошман миңә, түгел*
*Ағайым", - тине.*
*Шунан һуң ул ағаһына*
*Һелтәне ҡылыс…*
*Өйҙән әсә йүгереп сыҡты:*
*"Нишләнең, яуыз?*
*Сабый саҡта һыйғайнығыҙ*
*Кескәй ояға;*
*Инде килеп, һыйманығыҙ*
*Яҡты донъяға.*
*Ҡәһәрләнһен ҡыҙыл менән*
*Аҡтар һуғышы!*
*Һине лә алыҫ ебәрмәҫ*
*Әсә ҡарғышы!.."*
*Ысынлап та, төштө уға*
*Әсә ләғнәте -*
*Тиҙҙән һуҡты командирҙың*
*Һуңғы сәғәте:*
*Ағаһын оҙатҡан көндә*
*Иң һуңғы юлға,*
*Аҫылынды ап-аҡ сәскә*
*Атҡан муйылға…*
*Ағаһы артынан китте*
*Ҡыҙыл командир -*
*Эргәһендә булат ҡылыс,*
*Өҫтөндә - мундир.*

Йырҙы башлағанда теҙ быуындары йомшарып, тулҡынланыуҙан тауышы ҡалтыраңҡырап сыҡһа ла, аҙаҡҡа табан Ғамир тынyслана төштө, көй ҙә тигеҙләнде. Йырҙың эсенә үтеп ингән һайын, унын ышанысы артты, ниндәйҙер мәлдә хатта үҙен көйләп һүрәтләгән ваҡиғалар уртаһында йөрөгәндәй хис итте. Ғамирҙың бирелеп, талпынып йырлауынан залда ултырған бер нисә ҡатын яулыҡ остары менән күҙ йәштәрен һөртөп алды. Быны күреп оторо илһамланған Ғамир Зәлифә апаһынан отоп алған ҡыҙғаныс йырҙы тағы ла тәьҫирлерәк итеп башҡарырға тырышты.

Иңләп-буйлап та, тыйып та булмаған өсөн күҙҙе даръя менән сағыштыралар ҙыр, моғайын. Йәне-тәне менән йырға бирелеүенә ҡарамаҫтан, Ғамирҙың ҡарашынан залдағы бер генә хәрәкәт тә ситтә ҡалмай ине. Ана, тағы бер әбей яулыҡ осон күҙҙәренә баҫты, Таһира апайҙың йәнәшәһендәге ҡатын унын ҡолағына ниҙер шыбырланы. Ана, иң алғы рәттә ултырған МТС вәкиле, мәктәп директорына боролоп, ниҙер әйтте. Бына улар, урындарынан күтәрелеп, эйәртенешеп, клубтан сығып китте. Ләкин әлеге мәлдә Ғамирҙың зиһенен биләгән, иғтибарын йәлеп иткән нәмә бөтөнләй икенсе ине - граждандар һуғышы һәм унда ҡатнашҡан ике бер туғандың фажиғәле яҙмыштарын һүрәтләгән йыр...

* * *

Иртәгәһенә, байрам көнө булыуға ҡарамаҫтан, Ғамирҙы мәктәпкә саҡыртып алдылар. Директор бүлмәһендә, унын үҙенән һәм Әсмә апайҙан тыш, МТС вәкиле ултыра ине. Барыһының да йөҙҙәре етди, Әсмә апай ниңәлер илағанға оҡшаған. Һүҙҙе мәктәп директоры башланы:

- Ғамир, кисә концертта йырлаған йырыңды кем өйрәтте?

Билдәһеҙ шомдан хәүефләнгән Ғамир теленә килгән тәүге тайшаныу һүҙен әйтте:

- Берәү ҙә өйрәтмәне.

МТС вәкиле телгә килде:

- Нисек инде, "берәү ҙә"? Улай булғас, үҙең яҙҙыңмы ни?

Был һорауҙы биргәндән һуң, уҫал йөҙлө вәкил Әсмә апайға мәғәнәле итеп ҡарап ҡуйҙы. Күңеле оторо шомланған Ғамир хәйләләшергә булды:

- Мин уны бер китаптан уҡығайным.

- Ниндәй китап? - тип төпсөндө вәкил. - Авторы кем?

Бындай боролошто көтмәгән Ғамир ҡойолоп төштө. Шулай ҙа, бер танғас, артабан дауам итергә ҡарар ите:

- Онотҡанмын.

- Вот, вот! - тине ҡомары йөҙөнә сыҡҡан вәкил. - Дружина советында тикшерергә кәрәк бының тәртибен! Эштәр былай барһа, комсомол менән партияға ниндәй алмаш киләсәк?

Был мәлдә МТС вәкиле Ғамирға ҡорбаны өҫтөнә ташланырға әҙерләнгән йыртҡысты хәтерләтте. Үҙе мәкерле, үҙе аяуһыҙ. Бер ҡараһаң, йомшаҡ кеүек, икенсе ҡараһаң, таш бәғерле булып төҫмөрләнә. Ғамирҙың күптән былай шөрләгәне юҡ ине. Унын хәтеренә "ҡылт" итеп әсәһенән ишеткән бер хәбәр килеп төштө. Таһира апайҙың әйтеүенсә, яңыраҡ "халыҡ дошманы" тип ҡулға алынған Юлдыбай ағай ҡатынын ҡосаҡлап хушлашҡан саҡта конвойға ишеттермәй генә унын ҡолағына: "НКВД беҙҙе МТС аша сүпләгәнгә оҡшай. Аслан уларҙан һаҡ булһындар", - тип шыбырлап өлгөрә.

Мәктәп директоры ярһый башлаған вәкилде тынысландырырға ашыҡты:

- Иптәш, һеҙ борсолмағыҙ. Кәрәк булһа, дружина советын

да, класташтарын да йәлеп итербеҙ. Был эште шул көйөнсә ҡалдырмабыҙ - әбизәтелнә төбөнә төшөрбөҙ. - Унан һуң, илап ебәрмәҫ өсөн иренен ныҡ итеп ҡымтып торған Ғәмирға өндәште: - Ярай, һин, бар, ҡайт, әйҙә. Ләкин ныҡ итеп уйла, йәме.

Йөрәгән хафалы уйҙар тырнаған Ғәмир өйөнә йүгереп ҡайтты. Ул өҫтөнә ябырылған борсоулы уйҙарҙан үҙенә урын тапманы. Бер йыр арҡаһында шундай ғауға ҡубыр, тип кем уйлаған? Йырҙың йыртығы юҡ, тигән булалар. Бар икән шул! Ярай әле, уның үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгәнен күреүсе кеше юҡ - өй буш. Ҡыҙҙар кисә төштән һуң район үҙәгенә юлландылар - Зәлифә, Маһинур апаһының ай-вайына ҡарамайынса, уны үҙҙәренә ҡунаҡҡа алып ҡайтып китте, ә Таһира апай бөгөн туған тейешле кешеләренә байрам мәжлесенә саҡырылғайны.

Уйҙы күпме генә уйлаһаң да, хәлде еңеләйтмәй - низер эшләргә, ҡыймылдарға кәрәк. Дәфтәр!.. Эште, моғайын, уны йәшереүҙән башлау дөрөҫ булыр. Эйе, дәфтәр өй эсендә булырға тейеш түгел. Әгәр табып алһалар, әсәһе әйтмешләй, Зәлифә апайҙың башынан һыйпамаҫтар. Ана бит, МТС вәкиле ҡалайыраҡ төпсөндө. Ығы-зығы баҫылғансы, йәшерергә, күренмәҫтән к... нә тығырға! Аҙаҡ күҙ күрер.

Ғәмир Зәлифәнең тәрлә шиғырҙар, йырҙар күсереп яҙылған дәфтәрен тәүҙә түбәлек аҫтына өйөлгән утын әрҙәнәһе араһына йәшерҙе. Ләкин йөрәй биргәс, ул урынды килештермәйенсә, дәфтәрҙе иҫке сепрәккә төрөп, өй башына мендерҙе лә мөрйә төбөндәге тупраҡҡа күмде. Инде бер аҙ тынысландым тигәндә, күңелен бер-бер артлы шик-шөбһәләр өйкәй башланы. Әгәр уларҙың йортонда тентеү үткәрһәләр, эҙләүҙә тап шул өй башынан башларҙар һымаҡ тойолдо. Юҡ, былай булмай! Иң яҡшыһы - яманатлы йыр яҙылған дәфтәрҙе өйҙән ситтә йәшереү. Һәм Ғәмир, сепрәккә ураулы дәфтәрҙе бишмәт ҡуйынына тығып, колхоздың йылға буйында урынлашҡан йәшелсә баҡсаһына йүгерҙе.

Үҙ өйҙәренең һалам менән ябылған ҡыйығы аҫтынан Ғәмирҙарҙың йортон күҙәтеп ултырған Йәүҙәт нимәләр килеп сығырынан өмөтөн өҙгәйне инде. Директор, бер нисә малайҙы мәктәпкә саҡыртып, эштең асылын аңлатҡас та, ул, Ғәмирҙан күҙ яҙҙырмаҫҡа, тигән хәйләле уй ҡорғайны. Әле, шул ниәтен тормошҡа ашырырға була, елгә һимерер өсөн бейеккә осоп менгән күркә кеүек, өй башында ултыра. Көн ҡояшлы булыуға ҡарамаҫтан, тышта һалҡын ғына. Өҫтәүенә, ике яғы көпләнмәгән ҡыйыҡ аҫтынан ел үтәнәүтә өрә. Уның класташы йортонан күҙ яҙҙырмай күҙәтеп ултырыуына байтаҡ булды. Ә Ғәмир, үҫ иткәндәй, юҡ та юҡ. Берҙән, өшөй башлаған, икенсенән, арыу үк ялҡҡан Йәүҙәттең башында: "Әллә ҡул һелтәргә микән?" - тигәнерәк уйҙар йышыраҡ өйөрөлә башланы. Тик, әлеге лә баяғы, сәм! Ғәмир бигерәк китте. Сафура алдында шәп булып ҡыланыуы инде. Йәнәһе, берәү йырлай белә. Сафураһын да әйтер инем - шуның яғына ауышырға самалаған була. Ғәмирҙың минән ҡайһы яғы артыҡ? Концертта анау йырын йырлап, ну, уңай булды! Их, шуның кикреген бөтөнләй шиңдергәндә!...

Сеү, туҡта! Ана, Ғәмир йортонан сыҡты. Колхоз баҡсаһы яғына йүгерҙе түгелме? Нәҡ шунда! Тиктәҫкә түгел был. Әйҙә, беҙ ҙә уның артынан!

Йәүҙәт йәшелсә баҡсаһының бирге осонда етемһерәп ултырған ҡарауылсы будкаһының мөйөшөнән һаҡ ҡына интылып ҡарағанда, Ғәмир кәртә буйындағы буразна эсен һабы һыныҡ көрәк менән тигеҙләп маташа ине. Бына, ул, эшен тамамлағанға һанап, һапның көрәкте ситкә ырғытты ла, кәртә аша төшөп, ауыл яғына һыҙғыланы. Ул күҙҙән юғалыу менән, Йәүҙәт, боҫҡан еренән сығып, Ғәмир әле генә низерләр күмеп йәшергән урынға йүнәлде.

* * *

Маһинур байрамдың икенсе көнөн кисләтеп, район үҙәгенән яңғыҙы ғына ҡайтып килде. Уны танырлыҡ түгел ине: күҙҙәре шешенгән, нур әҫәре ҡалмаған йөҙө йәмрәйгән. Әйтерһең, кисә генә ҡыуаныстан балҡып, әхирәте йортона ҡунаҡҡа киткән Маһинурҙы алмаштырып ҡайтарғандар. Ҡыҙын бер ваҡытта ла былай хәлдә күрмәгән Таһира апай ултыра төштө. Әҙерәк тын алғас, йөрәге урынынан ҡуҙғалған әсәнең тәүге һорауы: "Нимә булды?", икенсеһе: "Зәлифә ҡайҙа?" ине.

Әсәһенең һорауҙарынан күнеле тулған Маһинур, яуап урынына сенләп иларға кереште. Өй эсен көсөргәнешле шом солған алды. Ни уйларға ла белмәгән Таһира апай Ғәмирға, Ғәмир Таһира апайға ҡараны. Улай ҙа, һуҡырҙың күҙе күрмәнә лә, тәне һиҙә тигәндәй, Ғәмирҙың эске тойомлауы шуны аңғарта ине: нисәдәйер тәҙәтә алмаҫлыҡ хәл булған. Ул, әлбиттә, Зәлифә апайға һәм уның дәфтәренә бәйле. Ләкин быны булыуы мөмкинме? Ул бит эҙҙе йәшереп өлгөргәйне!..

Ул арала күнел нескәреүҙән тәүге өйәнәге үткән Маһинур телгә килде - һыңҡылдай-һыңҡылдай ни булғанын бәйән итергә тотондо:

- Зәлифәне, эһе-эһе... ҡулға алдылар, эһе-эһе...

- Атаҡ, атаҡ! Кемдәр? - тип һораны Таһира апай. Уның был һорауын аптыраған өйрәктең арты менән һыуға сумыуына миҫал итеп алырға була ине. Юҡһа, һуңғы йылда кешеләрҙең кем тарафынан ҡулға алыныуын кескәй бала ла яҡшы белә.

- Кем булһын, НКВД инде, эһеэһе...

- Бәй, нимә өсөн һуң? - тип тағы бер аптыраны Таһира апай. - Ул баланың ни зыяны тейгән?

Маһинур:

- Нимә өсөнмө? - тине лә нәфрәт тулы йәшле күҙҙәрен Ғәмирға төбәне. Шундай итеп ҡараны - хатта булмышын солғап алған асыу тойғоһонан һыңҡылдауҙан туҡтаны: - Уныһын, ана, улыңдан һора. Зәлифә һинә ул йырҙы ғәм алдында сығып йырлаһын тип өйрәттеме ни, тартай?

Ғәмирҙың тәне әсеЛе-һыуыҡлы булып китте, тамағына ҡаты төйөр тығылыуҙан әйтәһе һүҙен бер талай әйтә алмай торҙо. Ахырҙа, саҡ-саҡ ишетелерлек итеп:

- Нисек инде?.. Мин бит... - тип мығырҙаны.

- Мин бит, мин бит! - тип уны үсекләне Маһинур. - Йәшергәс, кеше арыуыраҡ ергә йәшерә. Тапҡанһың күмә торҡан ер - колхоз баҡсаһы! НКВД кешеһе барыһын да һөйләп бирҙе инде. Ана, класташың Йәүҙәткә рәхмәт әйт!..

Булмышына өйөрмәләй ябырылған ғәрлек, рәнйеү, хурлыҡ тойғоларына сыҙамайынса, Ғәмир тышҡа атылды. Тимәк, Йәүҙәт!.. Ысын булһа, ниндәй ҡәбәхәтлек! Шундай ҙа әшәкелеккә барып булыу икән ни? Йәүҙәт ундай ауызлыҡҡа һәләтле тип кем уйлаһын!..

Бына, колхоздың йәшелсә баҡсаһы. Ана, теге бураҙна. Унда һабы һынған көрәк ята. Дәфтәрҙе күмгәс, Ғәмир кисә уны ситкә бырҡтырғайны. Тимәк, барыны ла дөрөҫ. Тимәк, был төш түгел, ә әсе ысынбарлыҡ.

Тормош дарьяһының ғәзелһеҙлек тигән тәүге ҡеүәтле тулҡынынан шаңҡыған Ғәмир, бураҙналағы кескәй соҡорға текләп, өнһөҙ ҡалды. Шул саҡта, ҡуйыра башлаған эңер ҡараңғылығына яктылыҡ өҫтәргә теләгәндәй, эре ябалаҡлап ҡар яуырға тотондо. Ә, бәлки, мәрхәмәтле һәм ҡеҙрәтле Алла тарафынан камил итеп итеп булдырылған тәбиғәт теге соҡорҙо тиҙерәк күмеп, Ғәмирҙың ярһы йәнен дауаларға ашыҡҡандыр...

Ошо көндән башлап Ғәмирға "тартай" тигән ҡушамат тағылды. Йәнәһе, теленән тапты. Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай, әммә Ғәмир тапҡандың ҡоһоро бөтөнләй икенсе кешегә төштө - шуныһы үкенеслә. Был ваҡиғанан һуң Зәлифә һыуға батҡандай юҡ булды. Әйтерһең, ул Ҡыҙылъяр ауылындағы МТС-ҡа эшкә килмәгән дә, Ғәмирҙарға фатирҙа тормаған. Әйтерһең, ул, ғөмүмән, донъяла булмаған. Тик күңелдең быға һис тә ышанғыһы килмәй. Бына-бына ишек асылып китер ҙә, унан шат йылмайып Зәлифә килеп инер, МТС-та булған мәрәкә хәлдәрҙе һөйләргә керешер төҫлө. Ул күреүе менән донъя яҡтырып китер, Таһира апайҙың маңлайындағы һырҙар язылыр, ә һуңғы арала гел бойоҡ йөрөгән Маһинурҙың күнеле күтәрелеп, әхирәтен ҡосаҡлап алыр ине кеүек. Тик былар инде мәңге тормошҡа ашмаҫ хыял ғына булып ҡаласаҡ.

Тағы ниндәй яңылыҡтармы? Байрам үтеү менән Ҡыҙылъяр мәктәбендә Павлик Морозов исемендәге дружина советы булды. Унда теге МТС вәкиле ҡатнашып, сәйәси һиҙгерлек күрһәткәне өсөн Йәүҙәткә рәхмәт хаты тапшырып китте. Ә Ғәмирға, киреһенсә, әлеге һиҙгерлекте юғалтҡан өсөн, ҡаты шелтә бирҙеләр. Дружина советы рәйесе булараҡ, Әкрәм уны пионерҙар сафынан сығарырға тигән тәҡдим индергәйне, ләкин ул күпселектә яҡлау тапманы.

Йәнә шул: коммунистик тәрбиә биреү эшен үҙ ағышына ҡуйған өсөн Ҡыҙылъяр мәктәбенең директорын алмаштырҙылар. Элекке директорҙы ябай уҡытыусы итеп икенсе мәктәпкә күсерҙеләр. Яңы директор Ҡыҙылъяр мәктәбендә коммунистик тәрбиә биреү эшен әҙәби түнәрәкте тыйыуҙан башлап ебәрҙе.

Ғәмир менән Йәүҙәткә ҡарата Сафураның мөнәсәбәте генә үҙгәрешһеҙ ҡалды, тиер инең, унда ла бер яңылыҡ бар: ҡыҙыҡай Йәүҙәт менән бөтөнләй һөйләшмәй хәҙер. Ә Ғәмирға Сафураның ҡарашы элеккеҫә, хатта уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренә ниндәйҙер йылылыҡ та өҫтәлгәндәй ине. Ә был кешеләрҙән төңөлмәҫ һәм тормош ауырлыҡтары алдында бөгөлмәҫ өсөн үҙе ҙур таяныс.

**(Аҙағы).**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УҢЫШ ҠАҘАНЫР ӨСӨН...

## маҡсат ҡуйыу ҙа етә

**Ғәзиз ЙОСОПОВ, Башҡортостан Республикаһы Президентының матбуғат хеҙмәте хәбәрсеһе:** "Нимә ул уңыш?" тигән һорау тураһында фекер алышҡы килә уҡыусы менән. Уңышлы кешеләрҙе һанап сыҡ әле, тиһәләр, иң тәүҙә ошо кешеләрҙең исемәте күҙ алдыма килә: Әхмәтзәки Вәлиди, Зәйнулла Рәсүлев, Аҡмулла, Роберт Юлдашев, улар менән бер рәттә Стив Джобс (Apple-ға нигеҙ һалыусы), Билл Гейтс (Microsoft-тың "атаһы") һәм "Facebook"ты барлыҡҡа килтереүсе Марк Цукерберг. Ни өсөн тап ошо кешеләр уңышлы булып танылған һуң? Беренсенән, маҡсатлы булыуҙары уларҙы башҡаларҙан айырып тора. Шулай итеп, хөрмәтле уҡыусы, ҡайһы өлкә һинең күңелеңә яҡын, шул өлкәне табып, уныш килтерер эшмәкәрлеккә баҫым яһап, аныҡ маҡсат ҡуйырға кәрәк. Әллә күпме ымһындырғыс ялтырауыҡтар араһынан үҙеңдең генә өлөшөңә төшкән, һине шәхес булараҡ камиллашыуға яҡынайтҡан бер генә маҡсатты айырып алыуы, ай-һай, еңелдән түгел. Был эҙләнеүҙәр ваҡытында һинең яҡындарың - атай-әсәйең, туғандарың, дуҫтарың һәм күршеләрең һинә үҙҙәре күҙ алдына килтергән маҡсаттарҙы тормошҡа ашырырға өгөтләй башлаясаҡ. Миҫал өсөн, ата-әсәй, уңышлы кеше - күн куртка, ҡиммәтле йәнлек тиреһенән тегелгән тун кейеп йөрөүсе кеше була, тип ышандырырға тырышыр. Атай менән әсәйҙең фекерен дә ихтирам итергә кәрәк, әлбиттә, сөнки, оло кешеләр тәжрибәле була. Шулай ҙа уларҙың кәңәше һин маҡсаттар билдәләгән ваҡытта хәл иткес роль уйнамайынса, мәғлүмәт ярҙамы ғына булып ҡалырға тейеш. Кемдәрҙеңдер фекеренә ҡарап ҡына ҡарар ҡабул итһәң, был - төркөм артынан эйәреү була. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күп кенә йәштәр бөгөн төркөм артынан эйәреүҙе хуп күрә. Улар ҡартайғас, уҙған ғүмерҙәрен күҙ алдынан үткәреп: "Мин үҙ ғүмеремде йәшәнемме, үҙемдең һөйгәнемә өйләндемме, яратҡан эшем менән шөғөлләндемме, үҙем теләгән йортта көн күрҙемме икән?" тип уйланмаҫ, тип әйтеп булмай.

Шуға ла, маҡсатты үҙеңдең теләктәреңә, мөмкинлектәреңә, талантыңа, булмышыңа ҡарап билдәләү зарур. Был йәһәттән Мөхәммәт Али тураһында төшөрөлгән "Али" фильмын ҡарарға кәңәш итәм. Был фильмда төп геройҙың башҡаларҙың фекеренә иғтибар итмәйенсә, үҙе булып ҡалырға тырышыуы хаҡында бәйән ителә. Тағы ла, миҫал өсөн: әгәр ҙә Роберт Юлдашев төркөм фекеренә генә ҡолаҡ һалһа, уның артынан ғына эйәрһә, халҡыбыҙҙың брендына, ғорурлығы булып үҫеп етә алмаҫ ине. Ваҡытында Зәйнулла Рәсүлев та, күмәк кешеләр фекерен генә алға ҡуйып, шул йүнәлештә генә хәрәкәт итһә, үҙенең маҡсаты мәғрифәт йүнәлешендә булыуын аңламаһа һәм 8 йылға иркенән мәхрүм ителеүенә ҡарамаҫтан, үҙенә ҡаршы көстәргә иғтибар ҙа итмәй алға бармаһа, ул, моғайын, берәй урындағы мулла булыуҙан уҙмаҫ ине.

Артабан киттек. Маҡсатты билдәләгәндән һуң маҡсатыңа өлгәшеү программаһын да төҙөп, ҡағыҙға теркәп ҡуйырға һәм көн һайын, бер-нисә минутлап булһа ла, шөғөлләнергә кәрәк. Әлбиттә, үҙеңде өҫтәл артына ултыртып, ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр итеүҙән дә ауыры юҡ, шулай ҙа "Мин ошоно, ошоно, быны һәм тегене эшләргә тейешмен", тип яҙып ҡуйырға мөмкин әле. Яңыраҡ бер федераль баҫмала бер мәҡәләләр шәлкемен баҫыла башланы. "Матбуғат хеҙмәте нисек эшләргә тейеш?" тигән темаға ине был хеҙмәтем. Был мәҡәләне яҙыр алдынан мин дә үҙемә программа төҙөгәйнем. Программаға ярашлы, мин көн һайын интернеттағы блогыма ошо темаға бәләкәй мәҡәлә яҙырға тейеш инем. Сер түгел: көн һайын яҙыу килеп сыҡмаһа ла, аҙнаға бер тапҡыр бер тайпылыуһыҙ мәҡәлә яҙып һала инем интернетҡа. Һәҙөмтәлә, яйлап ҡына булһа ла был маҡсатымды ла тормошҡа ашыра алдым...

Әйтелгәндәргә өҫтәп, аралаша, килешә, әңгәмәләшә, бәхәсләшә, үҙ фекерҙәреңде ҡағыҙға матур итеп яҙа белеүҙе һәм, ахыр сиктә, шөкөр итә белеүҙе лә уңышлы булырға теләгәндәр өсөн файҙалы сифаттар тип билдәләр инем.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ *Проблемалар килеп тыумаһын өсөн, ғалимдар ҡояш байыу менән йоҡларға ятырға, йышыраҡ саф һауала булырға кәңәш итә, былар барыһы ла биоритмдарҙы яҡшырта.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘ ТОРҺАҢ...

## уңырһың

■ Профессор Толле (Германия) хроник һыҙланыуҙырҙы баҫыу өсөн яҡтылыҡ терапияһы ярҙамын ҡулланыу ысулын уйлап тапҡан. Һынауҙарҙа 100 кеше ҡатнаша, улар ярты йыл дауамында Мюнхен техник университеты дауаханаһында яҡтылыҡ терапияһы курсы үтәсәк. Сеанстар яҡтылыҡ кимәле 3000-4000 люксҡа еткән махсус бүлмәләрҙә ойошторола. Был яҡтылыҡ ябай бүлмәләге көндөҙгө лампалар яҡтылығынан 6-8 тапҡырға күберәк. Бынан тыш, бүлмәлә яҡтылыҡ спектры үҙгәртелгән - уға күк төҫ күберәк өҫтәлгән, ә түбә төҫө зәңгәр күк йөҙөн хәтерләтә. Толле фекеренсә, әлегә һығымталар яһауы ауыр, әммә даими рәүештә ауырыу тойоп йөрөүселәр хәленең күпкә яҡшырыуын билдәләй. Сағыу яҡтылыҡ депрессияны, шулай уҡ йоҡоһоҙлоҡто дауалау өсөн күптән ҡулланыла.

■ Иртә тороу бик файҙалы, әммә күптәргә таң менән уяныуы ауыр. Боулдере университеты (Колорадо) ғалимдары быныӊ ни өсөн шулай икәнлеген аңларға тырышып ҡараған. Сер түгел, күбебеҙ иртән үҙен кискә ҡарағанда күпкә насарыраҡ тоя, быға төндә йоҡлап китә алмау, стрестар, эмоциональ көсөргәнеш, психологик проблемалар "ғәйепле". Ҡояш яҡтылығы ла ҙур роль уйнай, организмдың тәүлек ритмдарын - йоҡлау һәм уяулыҡ осорҙарын мелатонин гормоны яйға һала, ә уның күпме күләмдә бүленеп сығыуы тап ҡояш нурҙарынан тора. Йоҡоға тиклем ике сәғәт самаһы ҡалғас, был гормон ҡапыл күтәрелә, ә таңға ҡарай ҡырҡа түбәнәйә. Әгәр ҙә кеше тәбиғәт тарафынан билдәләнгән ваҡытта йоҡламаһа, етмәһә, иртәгәһенә һуң тороһа, уның ҡанында мелатонин кимәле тағы ла бер нисә сәғәт юғары тора. Һөҙөмтәлә, кеше үҙен арыған итеп тоя. Был организмда тәүлек ритмдары боҙолоуы тураһында һөйләй. Әйткәндәй, бындай проблемалар килеп тыумаһын өсөн ғалимдар ҡояш байыу менән йоҡларға ятырға, йышыраҡ саф һауала булырға кәңәш итә, былар барыһы ла биоритмдарҙы яҡшырта. Уларҙың фекеренсә, иртә торған кешеләр күпкә позитив, бәхетле һәм сәләмәт була.

■ Огайо университеты ғалимдары үткәргән һынауҙар иммун системаһының яңы үҙенсәлектәрен асҡан. Туҡымалар һәм ҡандағы моноциттар хәүеф симптомдарын булдырыу һәләтенә эйә. Был стресс ваҡытында кәйеф булмауының бер сәбәбе булып тора. Тикшеренеүҙәр барышында ҡомаҡтар араһында социаль стресс булдырғандар: ҡомаҡтар ғаиләһенә үтә әүҙем ата ҡомаҡ урынлаштырғандар. Йәнлектәр ирекһеҙҙән уға буйһонған һәм был уларҙа систематик хәүеф һәм стресс тыуҙырған. Хәүеф тойғоһоноң көсө ата ҡомаҡ менән осрашыуҙың йышлығына бәйле булған. Даими рәүештә стреста булыу иммунитетты әүҙемләштерә, ә ул, үҙ сиратында, моноциттарҙың бүленеп сығыуына булышлыҡ итә. Моноциттар - елһенеү күҙәнәктәре һәр ваҡыт организмда зарарланған урынға ашыға, мәҫәлән, йәрәхәт алған мәлдә улар мускул туҡымаһына йәки ағзаларға йыйылып, унда шешеү процесын булдыра. Ә стресс ваҡытында был күҙәнәктәр баш мейеһенең нервы туҡымаһына туплана һәм шешеү реакцияһы башлана. Шешеү һоро һәм аҡ матдәгә артыҡ йоғонто яһамай, әммә ҡурҡыу һәм хәүеф үҙәктәренә тәьҫир итә.

ДЕПУТАТ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

**Йәш быуындың сәләмәтлеген һаҡлау һәм нығытыу кәрәклеге хаҡында төрлө кимәлдә күп һөйләнелә, әммә был йәһәттән дәүләт тарафынан ниндәй саралар атҡарылыуы тураһында ата-әсәләр, йәмәғәтселектең генә түгел, бәлки балалар һәм үсмерҙәр менән эшләүсе мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренең дә аныҡ ҡына төшөнсәгә эйә булмауы ихтимал. Шуға күрә беҙ яңы уҡыу йылы башланыр алдынан ошо хаҡта ҡыҫҡаса аңлатма биреүен һорап, РФ Федераль Йыйылыш Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә МЫРҘАБАЕВАға мөрәжәғәт иттек.**

# БАЛА ҺАУЛЫҒЫ ӨСӨН...

## мәктәп тә яуаплы



**➔ Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, уҡыусы балаларҙың ни бары 14 проценты ғына нигеҙҙә сәләмәт, тип әйтелә, ә 50 проценттан ашыуы һәр төрлө функциональ тайпылыштарға дусар булһа, 35-40 проценты хроник ауырыуҙар менән яфалана. Ғөмүмән, 1-се класҡа килеп уҡый башлаған миллион һау-сәләмәт баланың, 9 ай үтеүгә, һәр дүртенсеһендә, йәғни 250 меңендә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегендә кире үҙгәрештәр асыҡлана башлай. Мәктәпте тамамлап сығыуға бөтөн балаларҙың 10 проценты ғына сәләмәт тип танала. Ә бит илебеҙгә белемле генә түгел, ныҡлы сәләмәтлеккә эйә йәштәр ҙә кәрәк. Был йәһәттән мәғариф өлкәһенә ниндәй бурыстар йөкмәтелә?**

- Мәсьәләнең ни тиклем мөһим булыуын ҡабатлап тороу кәрәкмәйҙер. Белем биреү учреждениеларын тамамлаған балаларҙың оло тормош юлына ниндәй сәләмәтлек менән аяҡ баҫыуы күп йәһәттән төрлө кимәлдәге власть органдары, ғаилә һәм граждандар йәмғиәте институттарының берлектәге эшмәкәрлегенә бәйле. Йәш быуын сәләмәтлеген хәстәрләү мәсьәләһе һаулыҡ һаҡлау өлкәһе менән берлектә балалар ғүмеренең байтаҡ өлөшөн үҙ эсенә алған мәғариф системаһының да бурысы, сөнки һаулыҡ торошо тәрбиә һәм уҡытыу эше менән тығыҙ бәйләнгән. Ата-әсәләр һәм уҡытыусыларҙан йыш ҡына уҡыу осоронда балаларҙың сәләмәтлек торошо насарайыуы хаҡында борсолоуҙар ишетергә тура килә. Быныӊ сәбәптәре күп төрлө, әлбиттә: уҡыусы балалар күп ваҡытын мәктәп бинаһы эсендә ябыҡ һауала ултырып үткәрә, хәрәкәт әүҙемлеге етешмәй, саф һауала аҙ була, дөрөҫ туҡланмай, компьютер менән артыҡ ныҡ мауыға һ.б. Шуның өсөн дә бөгөн Рәсәй мәғариф системаһы алдына балаларға һәм үсмерҙәргә белем биреү менән бер рәттән, уларҙы сәләмәт тормош рәүешенә өйрәтеү, һау-сәләмәт тормошҡа әҙерләү һәм күнектереү, дөйөм сәләмәтлек мәҙәниәтен тәрбиәләү, быныӊ өсөн тейешле шарттар булдырыу, белем биреү процесына сәләмәтлек булдырыу технологияларын индереү бурысы ҡуйыла. Мәғариф өлкәһендә дәүләт сәйәсәтенең төп принциптарының береһе булған " Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль закон белем биреүҙән кешелеклелек асылын, кеше сәләмәтлеге һәм тормош өҫтөнлөктәрен билдәләп, йәштәргә үҙ мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыу өсөн тейешле шарттар булдырыу мәсьәләләрен ҡарай.

**➔ Әйткәндәй, мәғариф буйынса яңы законда балаларға сифатлы белем биреү эшмәкәрлеген уларҙың сәләмәтлеген һаҡлау проблемаһы менән нисек итеп яраштырыу юлдары ла билдәләнә...**

- Законда уҡыусы балаларҙың һаулығын һаҡлау, атап әйткәндә, сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау һәм шуға өйрәтеү, туҡландырыуҙы ойоштороу, сирҙе иҫкәртеү һәм һауыҡтырыу саралары, физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар тыуҙырыу, тәмәке тартыуҙы, алкоголь һәм аҙ алкоголле эсемлектәрҙе, һыра эсеүҙе, наркотик саралар һәм психотроп матдәләр ҡулланыуҙы иҫкәртеү һәм тыйыу буйынса мәғариф учреждениеларының бурыстары билдәләнә ("Уҡыусыларҙың сәләмәтлеген һаҡлау" 41-се статьяла ҡарала). Мәғариф учреждениеларын медицина йәһәтенән тәьмин итеүҙең норматив базаһы заманға ярашлы үҙгәрештәр кисерә. Әлеге ваҡытта Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығында "Балиғ булмағандарға, шул иҫәптән мәғариф учреждениеларында белем һәм тәрбиә алған осорҙарында уларға медицина хеҙмәте күрһәтеү тәртибен раҫлау тураһында" бойороҡ проекты әҙерләнде. Унда медицина персоналының штат иҫәбе, медицина кабинеттарын йыһазландырыу, шулай уҡ медицина хеҙмәткәрҙәренең бурыстары тураһында һүҙ бара. Мәҫәлән, 100-ҙән алып 500-гәсә бала уҡыған учреждениеларҙа медсестра йәки фельдшер ставкаһы булдырыла. Мәғариф учреждениеһында медицина кабинеттары йыһазландырыласаҡ. Бынан тыш, 2500-ҙән ашыу уҡыусыһы булған уҡыу йорттарында балалар һәм үсмерҙәр гигиенаһы буйынса табиб вазифаһы булдырыу ҡарала. Ул мәктәптең санитар-гигиена торошон, уҡытыу һәм тәрбиә эше шарттарын, технологияһын, физкультура-һауыҡтырыу эшмәкәрлеген ойоштороуҙы, яңы профилактик һәм гигиена -диагностикалау технологияларын индереү мәсьәләләрен контролдә тотасаҡ. Был бойороҡ Рәсәй Юстиция министрлығында теркәлгәндән һуң медицина ярҙамы күрһәтеү тәртибе бөтә төбәктәр өсөн дә мотлаҡ буласаҡ.

Уҡыусылар сәләмәтлеген һаҡлау буйынса башҡа төр норматив акттарҙы ла билдәләп үтеү кәрәктер. Мәҫәлән, бәлиғ булмағандар, шул иҫәптән мәғариф учреждениеһына уҡырға инеүсе, уҡыған осорҙарында йәш төркөмдәренә ҡарап медицина тикшереүе үтәсәк, физкультура дәрестәрен сәләмәтлек торошо буйынса төркөмдәргә бүлеп уҡытыу ҙа ҡарала. Медицина тикшереүҙәре үткәреүҙең төп маҡсаты - балаларҙың ауырыу төрҙәрен ваҡытында асыҡлау һәм уларҙың артабан аҙып китеүенә юл ҡуймау. Медицина ҡаралыуы һәм диспансер күҙәтеүенең аныҡ шарттарын, төбәк үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, РФ субъекттарының дәүләт власы органдары билдәләй. Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан БР Хөкүмәтенең "БР мәғариф учреждениеларында белем һәм тәрбиә алған осорҙа балиғ булмағандар тарафынан медицина ҡаралыуы, шул иҫәптән мәғариф учреждениеларына уҡырға ингәндә һәм унда уҡыу осоронда, физик культура һәм спорт менән шөғөлләнгәндә диспансер күҙәтеү, медицина реабилитацияһы үтеү, уларға медицина ярҙамы күрһәтеү тураһында"карар проекты күптән әҙерләнгән дә инде.

Мәғариф тураһындағы яңы законда шулай уҡ сәләмәтлеге насар балаларҙың уҡыу шарттарына ла ҙур иғтибар бүленә. Элекке закондарҙа был йәһәттән әлегеләй үҙ аллы нормалар ҡаралмағайны. Бөгөн иһә, һаулыҡ торошона ҡарамайынса, ихтыяжына, үҫеш үҙенсәлектәренә, һәләтенә, ҡыҙыҡһыныуҙарына ярашлы, һәр баланың сифатлы белем алыуға конституция хоҡуғы бойомға ашырыла. Белем биреү, уҡыу һәм тәрбиә эшен ойоштороу баланың һаулығын тергеҙеү йүнәлешендә индивидуаль программа буйынса алып барыла.

Илдә йоғошло булмаған, әммә зыянлы ғәҙәттәргә бәйле (йөрәк-ҡан тамырҙары, яман шеш һ.б.) сирҙәрҙән үлем осраҡтары юғары кимәлдә. Ошондай шарттарҙа халыҡты бала саҡтан сәләмәт йәшәү рәүешенә күнектереү, сирҙәрҙе иҫкәртеү буйынса эште көсәйтеү һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә дәүләт сәйәсәтенең стратегик өҫтөнлөгө булып тора. Ҡайһы бер үҫешкән илдәр тәжрибәһенән күренеүенсә, иҫкәртеү сараларын иҫәбенә генә дөйөм үлем күрһәткесен ике тапҡыр һәм унан да күберәккә кәметеп була. Ә насар ғәҙәттәрҙең кесе йәштән башлап нығынып китеүе һәр кемгә мәғлүм. Шуға күрә лә балала дөйөм сәләмәтлек мәҙәниәтен тәрбиәләү, һаулыҡты баһаларға, һаҡларға, нығытырға өйрәтеү, уны хәүефһеҙ тәртипкә көйләү буйынса мәғариф учреждениеларының роле баһалап бөткөһөҙ.

**➔ Ҡот осҡос эҙемтәләргә килтереүсе тәмәке тартыу кеүек алама ғәҙәттең балалар араһында күпләп таралыуы бер кемгә лә сер түгел. Киләсәктә уҡыусы балалар араһында бындай күренеште тамырынан юҡҡа сығарыу мөмкинме?**

- Мәғлүм булыуынса, Рәсәйҙә өлкән йәштәгеләрҙең 40 проценты тәмәке тартһа, балалар был яман ғәҙәткә 10-11 йәштән ылығып китә, ә халыҡтың 70 проценты "пассив тартыу"ға йәлеп ителә. Һөҙөмтәлә тәмәке зыянынан йылына 400 мең кеше "теге донъяға" китә. "Граждандарҙың һаулығын әйләнә-тираләге тәмәке төтөнөнән һәм тәмәке тартыу эҙемтәләренән һаҡлау тураһында" быйыл ҡабул ителгән федераль законда тәмәке ҡулланыуҙы кәметеүгә, был зарарлы ғәҙәттән айырыуса балаларҙы һәм үсмерҙәрҙе ара-

✓ *Уҡыусы бөйөк кешеләрҙең аҫтыртын дошмандарын нисек таныуы, насарлыҡ теләүселәрҙе башҡаларҙан нисек айырыуы, ниәттәрен йәшерә белеүе, көтөлмәгән һәм еңеүле һөжүм итеүе серҙәре менән танышыр.*



лауға, халыҡты тәмәке төтөнөнән һаҡлауға йүнәлтелгән комплекслы саралар билдәләнә. Айырым территориялар, биналар һәм объекттар - тәү сиратта балалар һәм тәмәке тартмаусы кешеләр булған урындарҙа: балалар ойошмалары һәм мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт учреждениелары биләмәләрендә, йәмәғәт транспортында тартыу тыйыла. Тәмәкене рекламалау, уны балиғ булмағандарға һатыу, балаларҙы тәмәке ҡулланыуға йәлеп итеү шулай уҡ ҡәтғи тыйыла. Балиғ булмағандарға алкоголле эсемлектәр һатҡан өсөн енәйәт яуаплылығы индерелде (Енәйәт кодексы, 151.1 -се статья). Бөтә был саралар РФ Хөкүмәте ҡуйған маҡсатҡа - 15 йәштән өлкән кешеләрҙең йән башына алкоголь ҡулланыуын 2011 йылғы 14,5 литр этанолдан 2015 йылға - 12,5 литрға һәм 2020 йылға 10,0 литрғаса кәметеүгә өлгәшеү маҡсатына йүнәлтелә.

**➔ Үткән йылдарҙа мәктәптәрҙә уҡыусыларға наркотик матдәләргә тест үткәреү башланғысы менән бәйле бәхәстәр һәм хатта ризаһыҙлыҡ белдереүҙәр ҙә ишетелгеләне…**

- Тап ошо хаҡта ине әйтергә теләгән киләһе фекерем. Быйыл 5 декабрҙә тағы бер закон -"Рәсәй Федерацияһының айырым закон акттарына наркотик саралар һәм психотроп матдәләрҙе законһыҙ (медицина маҡсаттарынан тыш) ҡулланыуҙы иҫкәртеү буйынса үҙгәрештәр индереү тураһында"закон үҙ көсөнә инәсәк. Унда уҡыусылар араһында наркотиктарға ҡарата тест үткәреү буйынса норма ҡарала. Быңдай закон ҡабул итеүгә наркотиктар ҡулланыу менән бәйле килеп тыуған етди хәл сәбәпсе булды. Тест үткәреү бөтөн мәғариф учреждениеларында ла 15 йәштән өлкән үҫмерҙәрҙең ризалығы менән үҙ теләктәре буйынса үткәрелә һәм ул ике этаптан тора. Тәүгеһе - социаль-психологик тест, икенсеһе - лаборатор һәм инструменталь ысулдар ҡулланыу юлы менән иҫкәртеүсе медицина ҡаралыуы үтеү.

**➔ Умыртҡа бағанаһының кәкерәйеүе (сколиоз), тын юлдары сирҙәре, күреү һәләтенең насарайыуы, аш һеңдереү эшмәкәрлегенең боҙолоуы, аҙ ҡанлылыҡ кеүек "күнегелгән" мәктәп ауырыуҙарына һуңғы 10 йылда тағы ла эндокрин, һөйәк-мускул системалары сирҙәре, иммун системаһы һәм тоташтырғыс туҡымаларҙың ҡаҡшауы, аллергия кеүек сирҙәрҙең дә өҫтәлеүе күпләп күҙәтелә. Ошондай сирҙәргә килтереүсе факторҙарға ҡаршы мәктәп артабан ниндәй юлдар менән көрәшәсәк?**

- Балалар сәләмәтлегенә уҡыу программаһының көсөргәнешлеге өҫтәнә дөрөҫ туҡланмау һәм артыҡ ауырлыҡ та кире йоғонто яһай. Әлеге ваҡытта Рәсәй Хөкүмәте тарафынан раҫланған Дөрөҫ туҡланыу өлкәһендә дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәрен бойомға ашырыу буйынса саралар планына ярашлы, йыл аҙағына Дәүләт Думаһына "Мәғариф, һауыҡтырыу һәм социаль яҡлау учреждениеларында балалар өсөн сәләмәт, шул иҫәптән ҡайнар, аш тураһында" федераль закондың проекты ҡарауға тапшырыласаҡ. Мәктәп туҡланыуы сәләмәт туҡланыу өлгөһөнә әүерелергә тейеш.

Балалар һәм йәштәрҙең хәрәкәт әүҙемлеге, даими рәүештә физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеүе уларҙың сәләмәтлеген нығытыуҙа һыналған һәм ышаныслы сара. 2020 йылға физик культура һәм спорт менән даими шөғөлләнеүсе уҡыусы һәм студенттар һанын бермә-бер арттырыу стратегияһы алға ҡуйыла. Һуңғы йылдарҙа был йәһәттән бер аҙ йәнлелек күҙәтелһә лә, беҙҙә спорт менән шөғөлләнеүсе йәштәр һаны ҡайһы бер сит илдәрҙәге күрһәткестәрҙән күпкә түбән әле. Мәсьәләнең мөһимлеген иҫәпкә алып, РФ Хөкүмәтенең 2013 йылдың 20 мартындағы ҡарары менән "Физик культура һәм спортты үҫтереү" дәүләт программаһы раҫланды. Уның төп бурыстары иҫәбенә граждандарҙы, бигерәк тә балалар һәм йәштәрҙе физик культура һәм спорт менән даими шөғөлләнеүгә йәлеп итеү, мәктәпкәсә, мәктәп һәм һөнәри мәғариф учреждениеларында физкультура-спорт тәрбиәһе системаһын камиллаштырыу мәсьәләһе тәүге урынға ҡуйыла. Бөгөн был өлкәлә лә яңы эш формалары, спорт йүнәлешенә генә түгел, һауыҡтырыу сараларына ла иғтибар туплау кәрәк. Ә инде бының өсөн киң мөмкинлектәргә юл асыу - ул спорт залдарын һәм майҙансыҡтарҙы һөҙөмтәлерәк файҙаланыу, уҡыусының дәрестән тыш ваҡытын спорт күнекмәләренә, һәр төрлө секцияларға әүҙемерәк йәлеп итеү тигән һүҙ ул. Шулай итеп, уҡыусыларҙың сәләмәтлеген һаҡлау һәм нығытыу, уҡытыу һәм тәрбиә биреү барышында уларҙы сәләмәт тормош рәүешенә күнектереү мәғариф эшмәкәрлегенең айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп ҡаралырға тейеш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

## *ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ

**Сергей Суворов исемле авторҙың ошо исемдәге китабы донъя тарихындағы төрлө дәүерҙәрҙәге билдәле сәйәси эшмәкәрҙәрҙең (Черчилль, Де Голль, Цезарь, Сталин, Ришелье, Бисмарк, Иван Грозный, император Тиберей, папа Александр VI Борджиа, Людовик XI, Макиавелли, Клеопатра, Алкивиад, Палмерстон, Кеннеди, Ганнибал, Рейган, Робеспьер һ.б.) миҫалында дипломатияның нескәлектәре, власть өсөн көрәш, йылғырлыҡ һәм интригалар үреү, дошмандарҙы жезл һәм ҡан менән түгел, ә сослоҡ һәм һығылмалылыҡ менән еңеү осраҡтары тураһында бәйән итә. Уҡыусы бөйөк кешеләрҙең аҫтыртын дошмандарын нисек таныуы, насарлыҡ теләүселәрҙе башҡаларҙан нисек айырыуы, ярамһаҡланыу һәм провокацияларға бирелмәйенсә, ниәттәрен йәшерә белеүе, көтөлмәгән һәм еңеүле һөжүм итеүе, шул уҡ ваҡытта үҙе күләгәлә ҡалыуының серҙәре менән танышыр. Китапта донъяның өс мең йыллыҡ сәйәси көрәше тәжрибәһе тупланған, уларҙың нигеҙе һәм ҡанундары бөгөн дә Власть үренә походҡа йыйыныусылар өсөн көнүҙәк.**



## Бер тинлек ҡуян, өс тинлек зыян…

***Тәүҙән үк үҙең өсөн аныҡ сәйәси комбинация уға сарыф иткән тырышлыҡты аҡлаймы икәнлеген асыҡларға кәрәк. Бик йыш тап маҡсаттарҙың һәм тырышлыҡтың аҡланмаған булыуы хатта иң ҙур хәйлә менән ҡоролған мәкерҙең дә уңышһыҙлыҡҡа осрауына сәбәп була.***

Беҙҙең эраға тиклем 281 йылда оратор Киней Эпир батшаһы Пирրға ни өсөн Италияға ҡаршы шундай ентекле поход әҙерләүе һәм ул Эпирға нимә килтерәсәге менән ҡыҙыҡһынып һорау бирә. Батша, римляндарҙы еңгәндә Италияның башҡа бер генә ҡалаһы ла үҙенә ҡаршы тора алмаясағын һәм ул тотош илгә хужа буласағын белдерә. "Ә Италияны яулағандан һуң нимә эшләйәсәкбеҙ?" тип һорай унан Киней. Пирр Италияның эргәһендә күп һанлы халҡы, бай ҡалалары һәм уңайлы порттары булған сәскә атыусы Сицилия утрауы булыуын аңлата. "Ә Сицилияны яулағас, походты туҡтатасаҡбыҙмы?" тип үҙенекен ҡуймай оратор. "Утрау артында, бик алыҫ түгел Африка урынлашҡан, унда ҡеүәтле Корфаген бар, - тип дауам итә батша, - әгәр беҙ уны ла яулайбыҙ икән, әле беҙҙе кәмһетеүсе бер генә дошман да беҙгә ҡаршы тора алмаясаҡ. Шунан һуң беҙ тулыһынса ял итәсәкбеҙ, көн һайын байрам ҡорасаҡбыҙ, күңелгә ятышлы әңгәмәләр алып барасаҡбыҙ". Аҡыллы Киней был яуапты ишеткәс: "Ә беҙгә хәҙер буш ваҡытыбыҙҙа байрам итергә һәм бер-беребеҙ менән әңгәмә ҡорорға нимә ҡамасаулай һуң? Әле үк беҙҙең бик күп юғалтыуҙар, хәүеф, ҡан ҡойош хаҡы менән өлгәшергә тырышҡан һәм тап ошо хаҡҡа үҙебеҙгә лә бик күп юғалтыуҙар кисерергә, башҡаларҙы ла ошоға дусар итергә тура киләсәк нәмәләрҙең барыһы ла бар бит", - тигән.

Бер нисә йылдан һуң зирәк ораторҙың ни тиклем хаҡлы булыуы асыҡлана: күп һанлы походтарҙан һәм баталияларҙан һуң ("Пирр еңеүе") батша ғәскәре тар-мар ителә, ә римляндар Эпирҙы яулай.

Француз императоры Наполеон Өсөнсө шулай тигән: "Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаны яһалма рәүештә булдырырға тырышыу ҙур хата; көнэлгәре уларҙың йүнәлешен дә, киңлеген дә күҙаллау мөмкин түгел, әммә хәл-ваҡиғаны көткән ваҡытта уға ҡаршы тороу һәм унан файҙа алыу өсөн алдан уҡ тейешле сараларҙы күрергә, әҙерләнергә була".

Әгәр һеҙ башығыҙҙы ниндәйҙер сәйәси авантюраға тығырға уйлайһығыҙ икән, уның ыңғай һәм кире яҡтарын үлсәгеҙ. Ҡайһы бер альянс йәки мәкер, көтөлгән дивиденттар бирмәйенсә, әлегә тиклем булған абруйығыҙҙы төшөрөп кенә ҡалмаясаҡ, ә һеҙҙең сәйәси карьерағыҙға бөтөнләй юл ябыуы ихтимал. "Пирр еңеүе"нә өлгәшеүегеҙ һөҙөмтәлә еңелеүегеҙҙең башы булып тороуы ла мөмкин. Шулай уҡ ҡайһы бер сәйәси еңеү ҙә файҙа килтермәүе бар. Еңеүселәрҙе хөкөм итмәйҙәр, тиһәләр ҙә, ҡайһы бер ваҡытта уларҙы хөкөмһөҙ-ниһеҙ аҫалар. Шуға ла Аристотель "Һәр нәмәлә һәм һәр ерҙә уңыш ике шартты үтәүгә: һуңғы маҡсатты дөрөҫ итеп ҡуйыуға һәм ошо маҡсатҡа илтеүсе тейешле сараларҙы эҙләп табыуға бәйле", тигән.

**Сергей СУВОРОВ.**

## *УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Туғыҙынсы көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Оптимизмды һайлайбыҙ.**

Оптимизм барлыҡ тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртер. Әгәр һеҙ тормошоғоҙҙоң "тере хазина" буласағын көтөп, үҙегеҙҙе шуға әҙерләһәгеҙ, бәхетле буласаҡһығыҙ, оҙағыраҡ йәшәйәсәкһегеҙ һәм ошо матур тормоштан ул һеҙгә нимә тәҡдим итә ала, шуларҙың барыһын да аласаҡһығыҙ. Ғалимдар Гарвард университетының 99 сығарылыш студентынан оптимизмдың тормош рәүешенә ниндәй йоғонто яһауы тураһындағы фекерен белешә. 1988 йылда, тикшеренеү тамамланып, һөҙөмтәләр баҫылып сыҡҡас, яуап биреүселәр араһындағы иң шат күңеллеләр үҙҙәренең пессимист коллегаларына ҡарағанда күпкә йәшерәк күренгән, һирәгерәк ауырығаны асыҡланған.

Оптимизмға өйрәнергә мөмкин. Көн һайын был тормошта өлөшөгөҙгә ниндәй яҡшылыҡ төшөүе хаҡында уйлағыҙ. Һәр кемдең Илаһҡа нимә өсөндөр рәхмәт әйтерлеге бар. Оптимист менән пессимист араһындағы айырма шунда: уларҙың береһе һәр нәмәнән ниндәй ҙә булһа яҡшылыҡ эҙләй, ә пессимист бары тик кире нәмәләрҙе генә хәтерендә ҡалдыра. Мәҫәлән, оптимист үткән көнөн уйлап, үҙенә ҡарата булған яҡшы мөнәсәбәт, тәмле аҙыҡ, бәхетле ғаиләһе, ныҡлы сәләмәтлеге хаҡында уйлап, ҡыуаныс кисерһә, пессимист бер-нисә кире мәлгә иғтибарын туплап, көндөң үтә лә насар булыуы тураһында һығымта яһай. Үҙенең "Человек мыслящий" тип аталған китабында Джеймс Аллен быңа нимә тип яҙа: "Кешене фекерен тамырынан үҙгәртергә мәжбүр итегеҙ, ул был үҙгәрештең уның матди хәлен ниндәй тиҙлек менән үҙгәртәсәген күреп, үҙе лә аптырап ҡаласаҡ".

Сәләмәт уйҙар гарантиялы рәүештә имен хәл-торошҡа килтерә. Оптимизм дөйөм уңыштың мотлаҡ бер өлөшө булып тора. Аңығыҙҙы ыңғай фекерләүгә көйләгеҙ һәм бөгөндән тормошто тик ыңғай яҡтан ғына ҡабул итеүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ. Һәр һүҙегеҙ изгелек сәсһен, һәр фекерегеҙ илһам сығанағы булһын, һәр ғәмәлегеҙ яңы үҫеш кимәленә күтәрелһен.

**Икенсе бүлек: тән. Көслө тән - көслө аң.**

Руссо: "Көсһөҙ тән мейене бәлтерәтә", - тигән. Физик яҡтан көслө кешеләр рухи ныҡлыҡҡа эйә. Физик йәһәттән күнегегеҙ һәм һеҙ яңы рух, яңы аң кимәленә күтәрелерһегеҙ. Быңа һеҙ бер тапҡыр һәм мәңгелеккә үҙегеҙҙең режимығыҙға индерергә тейешле күнегеүҙәр: а) ҡулығыҙҙы өҫкә күтәреп сүгеп ултырыу; б) армиялағы кеүек күкрәкте киреп йөрөү; в) ҡулдарығыҙға көс йыйыу өсөн гантелдәр менән эшләү; г) аяҡтарығыҙҙы нығытыу өсөн юрғалап йүгереү; д) йөрәкте һәм үпкәләрҙе нығытыу маҡсатынан аэробика менән шөғөлләнеү; е) иҙәндән ҡулдарҙа күтәрелеү (отжимание), сүгәләп ултырыу.

**Өсөнсө бүлек: характер. Көндәлектә яҙыуҙар арта.**

Ҡотлайбыҙ! Һеҙ программаның туғыҙынсы көнөнә еттегеҙ һәм быға тиклем төшөгөҙгә лә инмәгән кимәлгә дөрөҫ юлдан бараһығыҙ. Программаны үтәүҙә ошо кимәлгә етеүегеҙ үҙе үк һеҙҙең кешелектең үҙ-үҙен камиллаштырыу өсөн етерлек тәртибе һәм ныҡышмалылығы булған аҙсылығы иҫәбенә инеүегеҙҙе раҫлай. Уҙған һигеҙ көн эсендә ниндәй өҫтөнлөктәр һәм яңы тәьҫораттар кисереүегеҙ тураһында көндәлегегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ. Шулай уҡ һеҙгә бәхетле булырға ҡамасаулаған барлыҡ көсһөҙ яҡтарығыҙҙы ла: алға барырға ҡамасаулаған фекерҙәрегеҙҙе, әлегәсә аяҡ салып торған насар ғәҙәттәрегеҙҙе, үҙгәртергә кәрәк булған кире факторҙарҙы яҙығыҙ.

**Робин ШАРМА.**

✓ *Ираҡ парламенты депутаты Мөхәммәд әл-Акили белдереүенсә, "Сүриә - күпмелер ваҡыттан һуң шартлай торған мина. Әгәр ул шартлай ҡалһа, тотош төбәкте шартлатасаҡ һәм был Европала ла сағылыш табасаҡ".*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ЕЙӘНСУРА РАЙОНЫ




**Горизонталь буйынса:** 6. Континент. 11. Үтәлеше ҡәтғи итеп ҡуйылған ҡәтғи һорау. 12. Патио нимә ул? 13. Барон Мюнхаузендың әҙәби "атаһы". 14. Риф утрауы. 18. Рәшәткә таҡтаһы. 26. Ғәйбәт. 28. Көн эҫеһендә мал тупланып ята торған урын. 29. "Көсләп асҡан күҙҙең (...) юҡ". 31. Жокейҙың тар ыштаны. 33. Дарыу флаконы. 34. Артистың тамашасыға төбәп әйткән монологы. 35. Кешенең килем-килбәте. 36. Дүрт юллы шиғыр. 37. "Йән тартмаһа, (...) тартмай". 39. "Ижаулы" йоноҙ. 45. Күп йылдар "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналын етәкләгән Сәлимйән. 50. Ҡышҡы спорт төрө. 55. Франция кинойондоҙо Катрин (...). 56. Сара Буранбаеваның эш урыны. 57. Клумба нимә ул? 58. Берәй нәмәнең әтнәкәһе. 59. Яҡшы тоҡомло йүгерек ат. 60. Күп йылдар "Совет Башҡортостан"ын етәкләгән мөхәррир. 61. Йылдың бер сиреге.

**Вертикаль буйынса:** 1. Эш буйынса үҙ өҫтөңә алған бурыс. 2. Торонто ҡалаһы буйындағы күл. 4. Саҡ ҡына ишетелгән тауыш. 5. Ҡағыҙҙан яһалған торна. 7. Урмандың "ҡустыһы"9. Буй балаҫ. 10. Бер йондоҙло офицер. 16. Ҡорос арҡан. 17. Сирмеш кем ул? 19. "Байҙың (...)е булғансы, ярлы ҡыҙы бул". 20. "Яҡшы (...) үҙен үҙе маҡтай". 22. Күңел тыныслығы. 23. Моряктарҙың төньяғы. 27. Йорт бөжәге. 28. Кенияның рәсми теле. 30. Мосолман байрамы. 32. Нәҫел, нәсәп. 33. Балаһы булған ир кеше. 37. Украинаның төп ярымутрауы. 38. Бураның бер уратып алған бүрәнәләре. 40. Предмет. 41. Ҡол һалдат. 43. Йылғаның ятыуы. 44. Әрәсә нимә ул? 46. Көрән төҫлө затлы тиреле йәнлек. 48. Ҡатын-ҡыҙҙар артынан күп йөрөүсе ир. 49. Н.Гоголь ял иткән Бельгия курорты. 52. Купюраға яҙылған хаҡ. 53. Рәсәй эстрада йондоҙо (...) Цой. 54. Ҡышҡы һыуыҡта татлана торған емеш.

**35-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 21. Илбәков. 3. Олимпиада. 6. Кисереш. 11. Тирәк. 12. Шланг. 13. Ралли. 14. Малай. 15. Насыров. 18. Ҡаҙаҡбаев. 21. Әлибаев. 26. Ләстит. 28. Ашхана. 29. Ара. 31. Яҡупов. 33. Үтәшев. 34. Алдыр. 35. Сысҡан. 36. Терһәк. 37. Тас. 39. Ололоҡ. 42. Тамада. 45. Маринад. 47. Стипендия. 50. Таналыҡ. 55. Толом. 56. Тирет. 57. Батыр. 58. Иҫбат. 59. Вәсүәсә. 60. Ғүмәрова. 61. Аралбай.

**Вертикаль буйынса:** 1. Имтихан. 2. Онтарио. 4. Лексика. 5. Дүшәмбе. 7. Иргәйел. 8. Шафиҡов. 9. Кроль. 10. Лайла. 16. Соус. 17. Рәми. 19. Астра. 20. Балта. 22. Илаш. 23. Алма. 24. Илембәтов. 25. Балтырған. 27. Таянсыҡ. 28. Адвокат. 30. Раджа. 32. Ван. 33. Үрт. 37. Толом. 38. Сурин. 40. Осор. 41. Олон. 43. Аҙан. 44. Аҡыл. 45. Моталов. 46. Автобус. 48. Тимерәү. 49. Интрига. 51. Алтатар. 52. Ҡарағай. 53. Плита. 54. Проба.

*ИҒЛАН*

**2 йәшлек сабыйға** бер йыл самаһы ваҡытҡа (ярты йылдан һуң отпуск бирелеүе мөмкин) ғаиләбеҙ менән башҡа ҡалаға күсеп китергә риза булған **бала ҡараусы** эҙләйем. Юл хаҡы һәм туҡланыу сығымдары - эш биреүсенән. Балаларҙы яратҡан, миһырбанлы, бурысына яуаплы ҡараған һәм **башҡорт телен** яҡшы белгән (хаҡлы ялдағы, йәше бик оло булмаған) ҡатын-ҡыҙ булһа, бигерәк тә яҡшы булыр ине.

Эш хаҡы: **30-35 мең** самаһы. Телефон: **8-903-310-37-58.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (3) дүшәмбе | 6:09 | 7:39 | 14:30 | 19:16 | 20:46 | 22:16 |
| 10 (4) шишәмбе | 6:11 | 7:41 | 14:30 | 19:14 | 20:44 | 22:14 |
| 11 (5) шаршамбы | 6:13 | 7:43 | 14:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 12 (6) кесе йома | 6:15 | 7:45 | 14:30 | 19:08 | 20:38 | 22:08 |
| 13 (7) йома | 6:16 | 7:46 | 14:30 | 19:06 | 20:36 | 22:06 |
| 14 (8) шәмбе | 6:18 | 7:48 | 14:30 | 19:03 | 20:33 | 22:03 |
| 15 (9) йәкшәмбе | 6:20 | 7:50 | 14:30 | 19:01 | 20:31 | 22:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘЙӘСӘТ*

# МИН-МИНЛЕК ЭҘЕМТӘҺЕ...

## кеше ғүмерҙәре

**Һауала тағы дары еҫе таралды. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр фараз итеүенсә, әгәр АҠШ Президенты Обама хәрби хәрәкәттәр башларға бойороҡ бирһә, өсөнсө донъя һуғышы башланасаҡ.**

Сүриәләге ике йылға һуҙылған граждандар һуғышы бөгөн бөтөн донъяға хәүеф менән янай. Әммә уны хәл итеү юлдары АҠШ-ҡа һәм Рәсәйгә бәйләнгән. Сөнки тап ошо мәсьәлә буйынса бәхәстә был ике ил баррикаданың ике яғында тора. Рәсәй Сүриәгә хәрби һөжүм яһауға ҡаршы булһа, АҠШ иһә хәрби хәрәкәттәр башлау яғында. Бында улар, йәнәһе лә, Сүриә хөкүмәтенең Гута районына химик ҡорал менән һөжүм яһауы тураһында ситләтелгән раҫлауҙар булыуына арҡалана. Әлегә БМО эксперттарының химик ҡорал ҡулланыу тураһындағы доклады һәм һығымталары донъя күрмәһә лә, күптәр АҠШ-тың башҡаларҙың һәм халыҡ-ара ойошмаларҙың фекеренә төкөрөп биреп, күптән инде үҙе өсөн ҡарар ҡабул итеүен белдерә.

РФ-ның Системалы стратегик анализ институты директоры Андрей Фурсов, Яҡын Көнсығыштағы хәл-торошто тотороҡһоҙландырыу - Обама уларҙың ҡулында марионетка ғына булған көстәрҙең маҡсаттарының береһе, тип белдерҙе. Юҡҡа ғына "Рокфеллерҙарҙың кешеһе" - йоғонтоло Збигнев Бжезинский АҠШ Президентын тәнҡитләп сығыш яһаманы. Ул Сәғүд Ғәрәбстанын, Катар һәм АҠШ-тағы айырым мөхит вәкилдәрен Сүриә низағын башлаусылар тип белдерҙе һәм уны ҡорал ярҙамында хәл итергә тырышыуы, киреһенсә, ҙурыраҡ проблемалар тыуҙырасаҡ, тип иҫкәртте. Йәғни, Бжезинский Сүриәгә ҡаршы халыҡ-ара заговор барлығын таныны. Ә инде АҠШ-тың был илгә ҡаныҡыуының сәбәптәре бөтөнләй Сүриәгә бәйле түгел. Беренсенән, үҙен бөтөн донъяға бөйөк держава итеп күрһәтергә теләүсе Америка иҡтисады бөгөн торғонлоҡ кисереп кенә ҡалмай, ә яңы рецессия (иҡтисади үҫештең темптары әкренәйеү) алдында тора. Икенсенән, Обаманың популярлығы аҫҡа тәгәрәүе. Яңы тарихтан билдәле булыуынса, ниндәй генә илде алып ҡарама, халыҡтың иғтибарын килеп тыуған хәлдән ситкә йүнәлтеү өсөн ил башлыҡтары тиҙ генә үҙ илендә йәки ситтә һуғыш уты тоҡандырып, үҙе үк унда барып ҡыҫылып, "еңеү" яулай һәм абруйын күтәрә.

Әгәр сәбәпте ситтән эҙләгәндә инде, Обама менән идара итеүсе көстәр Яҡын Көнбайыштағы хәлдәрҙе тотороҡһоҙландырып, Мавританиянан Ҡырғыҙстанға, Кашмирға тиклем идара итеп булған хаос тыуҙырырға тырыша. Шуның менән улар, тәү сиратта, Рәсәйҙе һәм Ҡытайҙы ҡурҡытып алырға ниәтләй. Әгәр агрессия була ҡалһа, ул, ысынлап та, Американа буйһонорға теләмәгән илдәрҙе ҡурҡытыу акцияһы буласаҡ. Сөнки Ҡытай ҙа, Рәсәй ҙә Сүриәне һатманы һәм улар һаман да, хәҙер уларға Ираҡ та ҡушылды, низағты дипломатик юл менән хәл итеү яғында. Ә АҠШ, үҙ һүҙле бала һымаҡ, һаман үҙенекен өҫкә сығарырға, үҙ һүҙен һүҙ итергә: был донъяла мин нисек теләйем, шулай буласаҡ, тигән мин-минлеген күрһәтергә тырыша.

Ираҡ парламенты депутаты Мөхәммәд әл-Акили белдереүенсә, "Сүриә - күпмелер ваҡыттан һуң шартлай торған мина. Әгәр ул шартлай ҡалһа, тотош төбәкте шартлатасаҡ һәм был күрше илдәрҙә генә түгел, Европала ла сағылыш табасаҡ".

Әйткәндәй, Сүриәләге низағ һөҙөмтәһендә бөгөнгә яҡынса 1,6 мең кеше һәләк булған.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?



**Ыласын** - русса сапсан. Ҙур ыласындарға ҡарай, шулай ҙа шонҡарҙан бәләкәйерәк. Арҡа өлөшө һорғолт, йәки ҡарағусҡыл, эс тирәһе аҡ, алһыу, йә һарғылт төҫтә, арҡыры һыҙаттар менән сыбарланған була. Ыласындар ғаиләһенә түбәндәге ҡоштар ҡарай: **балапан ыласыны** - балобан; **ҡыйғыр, ҡыйғыр ыласын** - чеглок; **шонҡар** - кречет; **торомтай** (ҡайһы бер диалекттарҙа **сысҡан типкес**,тип тә йөрөтәлә) - обыкновенная пустельга; **ағылбай** - дербник; **мүктәрге** - кобчик.

**Ала ҡарға** - русса серая ворона. Кешеләр йәшәгән ерҙәргә ныҡ эйәләшкән һоро тәнле, башы, ҡойроғо һәм ҡанаттары ҡара төҫтәге киң таралған бик һиҙгер, аҡыллы ҡош. Ала ҡарғаның "туғандары" исемдәре һәм уларҙың рус теленә тәржемәһе: **ҡоҙғон** - ворон; **ҡара ҡарға** - грач; **сәүкә** - галка; **һайыҫҡан** - сорока; **бараба, урман сәүкәһе** - сойка; **ҡыҙҙыулаҡ** - кукша; **баян ҡош, сыбар һайыҫҡан** - кедровка;

**Һоро торна** - русса серая журавль. Күл төҫөндә булғанға күрә шулай атайҙарҙыр. Ҡыҙыл түбәле, елкәһенән аҡ юлаҡ төшкән, муйыны ҡара ғына ҡош.

**Аҡ торна** - русса стерх. Тышҡы төҙөлөшө буйынса һоро торнаға оҡшаған, әммә тәүгеһенән ҙурыраҡ. Тәне тотошлай аҡ төҫтә, ҡанатының аҫҡы өлөшөндә генә ҡара һыҙат бар. Беҙҙең халыкта торнаға айырыуса үҙенсәлекле мөнәсәбәт әле лә һаҡлана. Борон ҡайһы бер ырыуҙар торнаға табынған. Бөгөн дә торнаға бәйле төрлө ышаныуҙар йәшәй халҡыбыҙҙа. Мәҫәлән, яҙғы осорҙа торналарҙың тоҡом арттырыу мәле еткәндә ата торнаның бейегәнен ҡарарға ярамай тигән тыйыу әле лә бар.

**Аҡҡош, ҡаңғылдаҡ аҡҡош** - русса лебедь-кликун. Исеменән үк күренеүенсә, аҡ төҫтәге матур, ҡабарып торған ҡош. Аҡҡоштоң бүтән төрҙәре һәм уларҙың русса варианттары: **ваҡ аҡкош** - малая лебедь; **ышылдаҡ аҡҡош** - лебедь-шипун.

**Селән** - русса серая цапля. Һоро торнанан бер аҙ бәләкәйерәк, республикала ярайһы уҡ киң таралған ҡош. Арҡаһы - һоро, түше һәм муйынының тирәләре аҡ төҫтә. Оҙон нәҙек муйынында буйҙан-буйға һуҙылған ҡара тимгелдәрен күргәргә була. Елкә тирәһенән ҡара өлпөһө һәлберәп тора. Ҡыҫка-ҡыҫка ғына ишетелеп ҡалған тауышы шығырҙауҙы хәтерләтә. Селәндең бүтән төрҙәре һәм руссаға тәржемәһе: **аҡ селән** - большая белая цапля; ҡауылдаҡ селән - обыкновенная кравка.

**Ала ҡаҙ, ҡыр ҡаҙы** - русса серый гусь. Тәү ҡарашҡа йорт ҡаҙҙарынан айырылмай тиерлек - бары еңелерәк, шулай булғас, шәп йүгерә һәм бик шәп оса. Ауырлығы 2,1-4,5 кг, күҙгәһөн ҡайһылары 6 килограмғаса етә. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың күпселек төбәктәрендә көмөүе арҡаһында, 2004 йылда был ҡоштар "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән. Ҡыр ҡаҙҙарының бүтән төрҙәре һәм уларҙың русса атамалары: **сыбар ҡаҙ** - гуменник; **ҡашҡа ҡаҙ** - белолобый гусь; **сәңкелдәк ҡаҙ** йәки **ваҡ ҡашҡа ҡаҙ** - пискулька; **аҡ ҡаҙ** - белый гусь.

**М.Г. Баяновтың һәм А.Ф. Маматовтың "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып,**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

КИТАП СЫҠТЫ

# ЙЫЛДЫҢ ҺӘР КӨНӨ...

## йыртма календарҙа

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә 2014 йылғы йыртма "Башҡортостан календары" донъя күрҙе.**




Салауат Юлаев кеүек арҙаҡлы шәхестең һәйкәле биҙәй календарь тышлығын. Унда шулай уҡ 2014 йылда буласаҡ тарихи даталар, юбилейҙар: 2014 йыл - Рәсәйҙә мәҙәниәт йылы, милли ҡаһарманыбыҙ Салауат Юлаевтың 260 йыллыҡ юбилейы, баш ҡалабыҙ Өфөгә - 440 йыл, Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенә - 95 йыл, һәм башҡа ваҡиғалар һынландырыла. Әлбиттә, календарь, бөтәһенән элек, көн иҫәбе. Йылдың һәр көнө тураһында тулы мәғлүмәтле белешмә бирелә бында ла. Ҡояш сығыуы-байыуы ла, Ай ҡалҡыу-батыуы ла, яҡты көн оҙонлоғо ла күрһәтелә. Календарь биттәрендә ҙур юбилейҙар, республикабыҙҙың йөҙөк ҡашы булған шәхестәр, уңған яҡташтарыбыҙ тураһында ҡыҫҡа, әммә тос белешмәләр ҙә табып була. "Тарих ярсығы", "Боронғо йолалар", "Башҡортостандың "Ҡыҙыл китабы" һ. б. рубрикалар аҫтында бирелгән фәһемле яҙмалар, тәрбиә мәсьәләләре һәм әхлаҡ, халыҡ дауалары хаҡында ҡыҙыҡлы мәҡәләләр урын ала. "Аш-һыу", "Хужабикәгә", "Күл эштәре" тигән баш аҫтында бирелгән материалдар күберәк ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәлеп итһә, "Балаларға уҡығыҙ", "Балалар уйындары" рубрикалары кескәйҙәр өсөн ҡыҙыҡлы булыр. Ләззәтләнеп уҡырлыҡ хисле шиғырҙар ҙа, күңелгә ятышлы йырҙар ҙа, ғаилә менән бергәләшеп кис ултырғанда уҡырлыҡ юмористик хикәйәләр ҙә, кәләмәстәр ҙә байыта календарь биттәрен, ял сәғәттәрендә "баш эшләтеп" алыр башваткыстар ҙа, уйланыр өсөн фәһемле фекерҙәр ҙә бирелә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



# ҠУРАЙ БАЙРАМЫ САҠЫРА!

**13-14 сентябрҙә Октябрьский ҡалаһында Республика ҡурай байрамы үтә.**

**2001 йылда ойошторолған был сара республиканың юғары статусҡа эйә булған байрамдарынан иҫәпләнә хәҙер. Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәгендә ҡурайҙы популярлаштырыу, һаҡлау һәм ҡурай сәнғәтен артабан үҫтереү маҡсатында үткәрелгән Ҡурай байрамы профессиональ ҡурайсыларға үҙ оҫталығын күрһәтеү өсөн дә ҙур мөмкинлектәр бирә.**

Ҡурайсы-солистар, ҡурайсылар ансамбле араһында конкурс ике турҙа, ике йәш - 16 йәшкә тиклем һәм унан өлкәндәр категорияһында үтә. Бәйгеселәр ҡурайҙа традицион башҡарыу мәҙәниәтенә эйә булырға тейеш. Һирәк башҡарылған көйҙәргә өҫтөнлөк биреү хуплана. Ҡурайсы башҡарған көйөнөң тарихын, легендаһын мотлаҡ белергә тейеш.

Республика ҡурай байрамы сиктәрендә ҡурайсылар һәм ансамбль етәкселәре өсөн ижади лабораториялар ойошторола. Сығыштарҙы билдәле ҡурайсылар, сәнғәт оҫталары, фольклорсы ғалимдар, халыҡ ижады белгестәре, конкурстың Гран-приһын яулаусыларҙан торған жюри баһалаясаҡ.

**Гала-концерт 14 сентябрь Октябрьский ҡалаһының Музыка училищеһында буласаҡ. Өҫтәмә мәғлүмәттәр өсөн телефон: (34767) 6-28-30.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪ БИТЛЕКЛЕ...

## дошман хәтәр

Бер үлтереү кешене енәйәтсе итә, йөҙәрләгән ғүмерҙе өҙөү уны батыр итә. Бөтә эш - масштабтарҙа.

**(Чарльз Чаплин).**

Кеше үҙенең ауырыуҙары тураһында һөйләшергә ярата. Ә үҙе өсөн ауырыуҙар тормошондағы иң ҡыҙыҡ булмаған ҡара тап.

**(Антон Чехов).**

Камил булмау - дуҫтарыбыҙҙағы бына ошо сифат беҙгә оҡшай ҙа инде.

**(Филип Честерфилд).**

Әгәр ҙә бәхет йорто тәҙәргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

Ат менмәгән ат менһә, саба-саба үлтерер, тун киймәгән тун кейһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шәкерт Остазы эргәһенә килгән дә, уға шулай тип өндәшкән:**

**- Остазым, бер кеше һеҙҙең турала белгәнеҙме ни әйтте?**

**- Белмәйем. Белер алдынан һинә шуны әйтәм: ул хәбәреңде өс ҡат иләк аша үткәр башта, - тигән Остаз уны һөйләүҙән туктатып.**

**- Ниндәй иләк? - тип аптырап һораған шәкерт.**

**- Эйе-эйе, кемгәләр ниндәйҙер хәбәр тапшырыр алдынан уны өс ҡат иләк аша үткәрергә кәрәк. Беренсеһе - Хәҡиҡәт иләге. Һин минә әйтә торған хәбәрҙең хәҡиҡәт икәненә үҙең ышанаһыңмы? - тигән Остаз.**

**- Юҡ, мин ишеткәнемде генә еткерергә теләгәйнем...**

**- Ярай, тимәк, һин ул хәбәрҙең хәҡиҡәтме, түгелме икәнен белмәйһең инде. Әйҙә, улайһа, уны икенсе иләктән үткәрәйек: Изгелек иләге булыр ул. Һин ул хәбәрҙә һөйләгән кеше тураһында насарлап әйтмәксеһеңме? - тип һораған Остаз.**

**- Юҡ, юҡ, киреһенсә... - тип мыңғырҙаған шәкерт.**

**- Тимәк, һин ул кеше тураһында ниндәйҙер насар һүҙ әйтергә уйлайһың, ләкин ул насарҙың хәҡиҡәтме, түгелме икәнен белмәйһең?- тип дауам иткән Остаз. - Улайһа, хәбәреңде Файҙалылыҡ иләге аша үткәрәйек. Ул хәбәрҙе ишетеү минең өсөн мотлаҡ кәрәк, тип уйлайһыңмы?**

**- Юҡ, мотлаҡ түгел...**

**- Шулай итеп, - тип һығымта яһаған Остаз, - һинең минә әйтергә теләгән хәбәреңдә хәҡиҡәт тә, изгелек тә, файҙа ла юҡ. Улай булғас, ниңә уны минә һөйләргә?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зөйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 6 сентябрь 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006 Заказ 3354